✓ *Бер аҡыл эйәһенән: "Ни өсөн ярлы кешеләр байҙарға ҡарағанда йомартыраҡ һәм ағымлыраҡ була?" - тип һорағандар. "Тәҙрәнән ҡарағыҙ әле, ни күрәһегеҙ?" - тигән аҡһаҡал. "Урамда балалар уйнап йөрөй..." "Ә хәҙер көҙгөгә ҡарағыҙ: унда ни күрәһегеҙ?" "Үҙебеҙҙе күрәбеҙ", - тигән кешеләр. "Бына шулай: тәҙрә лә, көҙгө лә быяланан яһалған, ләкин ул быялаға саҡ ҡына көмөш ялаттыңмы - унда тик үҙеңде генә күрә башлайһың булып сыға..." - тигән аҡһаҡал.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

6 - 12 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№36 (610)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Миҙал таҡҡан миҫалмы?**



3

**Кредит һине һынағанда...**

һин килем һана...



5

**Үҙәк архив...**

боронғолоҡ һағында



7

**Башҡорт йәштәре лә...**



8-9 заман ҡуласаһының уртаһына инһен ине

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Рәсәй ҡалалары араһында уткәрелгән рейтингта Өфө иң оптимистик ҡала тип табылған. Һеҙ был баһа менән килешәһегеҙме?

***Вәкифа ХӘЙРУЛЛИНА, философия фәндәре докторы, профессор, иҡтисад фәндәре кандидаты:*** Был һорауға бер төрлө генә яуап биреүе ҡыйыныраҡ, әлбиттә, сөнки әлеге рейтингтың кем тарафынан һәм ниндәй масштабтарҙа, ниндәй алымдар һәм маҡсаттарҙа үткәрелеүе беҙгә ҡараңғы. Әйтеүегеҙсә, белгестәр ҡала халҡының бәхет кимәлен биш төрлө күрһәткес буйынса баһалаған. Иң беренсе уларҙы кешеләрҙең эш урынында үҙен ышаныслы тойоуы һәм улар эшләгән предприятие, ойошманың үҫеш перспективаһы ҡыҙыҡһындырған. Был йәһәттән респонденттарҙың 77 проценты ыңғай яуап биргән. Әгәр беҙ, ысынлап та, тотороҡло һәм ҙур предприятиелағы татыу коллективта эшләһәк, етәкселәребеҙҙең халыҡ мәнфәғәтендә тырышып тороуын күрһәк, власть етәкселәре үткәргән сәйәсәткә ышаныс белдереп, уларға етәксе булараҡ ҡына түгел, шәхес булараҡ та (кешелек сифаттарына) ихтирам менән ҡараһаҡ, тормошобоҙҙоң алға барыуын күрһәк, әлбиттә, үҙебеҙҙе оптимист тип әйтә алабыҙ. Икенсе критерий - кешенең иртәгәһе көнгә ышаныс кимәлен асыҡлау. Был әлеге лә баяғы тәүге мәсьәлә менән ауаздаш: иртәгәһе көнгә ышаныс менән ҡарау өсөн тотороҡло эшең булыу мотлаҡ. Рейтингта ҡатнашыусыларҙың 68 проценты киләсәгенә ышаныс менән ҡарай. Әйткәндәй, Өфө халҡы һуңғы йылдарҙа эшһеҙлектән әллә ни яфа сикмәй, быныһы яҡшы, сөнки мәшғүллек - баяғы биш күрһәткестең береһе. Рейтинг авторҙары артабан бәхет билдәһе тип халыҡтың килем кимәлен асыҡлауҙы маҡсат итеп ҡуя. Был йәһәттән Өфөлә генә түгел, ә тотош Башҡортостанда хәлде әллә ни оптимистик тип әйтеп булмай, әлбиттә. Килем кимәле буйынса Башҡортостан Волга буйы федераль округы буйынса иң аҙаҡҡы урындарҙың береһен биләй. Рейтинг иһә баш ҡала халҡының 11 процентының яңы автомобиль һатып алыуға булған мөмкинлеген башҡа ҡалалар менән сағыштырғанда бик яҡшы күрһәткес, тип баһалай. Бәлки, шулайҙыр ҙа, ләкин бәхет, яҡты киләсәккә ышаныс, оптимизм тойғоһо кешенең матди тәьминәт кимәленә генә түгел, ә билдәле бер рухи ҡиммәттәргә лә бәйле булыуын хәтерҙән сығарырға ярамайҙыр. Тикшереүселәр баш ҡалабыҙҙы иң оптимистик ҡалалар иҫәбенә (Ҡаҙан менән Төмәндән ҡала) индергән икән, мин шатланам ғына, әлбиттә. Рейтинг һөҙөмтәләре, моғайын да, объектив һәм етди нигеҙләүҙәргә таянғандыр, тип ышанам. Өфөбөҙ былдай баһаға бик тә лайыҡ: йылдан-йыл үҫә, матурлана һәм төҙөклөнә; урамдары иркен, таҙа, яҡты. Географик яҡтан да урыны бик отошло, климат һәйбәт. Юҡҡамы ни, башҡа яҡтарҙан килеп тулдылар беҙгә - күрәһең, улар ҙа һиҙеп ҡалды Өфөнөң уңайлы яҡтарын.

***Заһир ИШКИНИН, эшҡыуар:*** Өфөлә тыуып үҫкән йәш быуын вәкиле булараҡ, мин уға илдә иң оптимистик ҡалаларҙың береһе тигән баһа биреү менән килешәм, сөнки баш ҡалабыҙ ай үҫәһен көн үҫә, тигәндәй, йылдам үҙгәрә бара, яңынан-яңы сауҙа-хеҙмәтләндереү комплекстары һәм офис биналары ғына түгел, ҙур-ҙур торлаҡ йорттар ҙа ҡалҡып сыға. Тимәк, был йорттарға яңы ғаиләләр күсеп киләсәк. Әйткәндәй, ҡаланың киләсәге уның инфраструктура йәһәтенән генә түгел, ә демографик яҡтан да үҫеш кимәле менән билдәләнә. Ә Өфөлә һуңғы йылдарҙа, статистик мәғлүмәттәр буйынса, ыңғай демографик хәл күҙәтелә: быйылғы йылдың тәүге яртыһында 481 сабый донъяға килгән. Был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 6,7 процентҡа күберәк. Хәйер, был бер тапҡыр Өфө урамдары буйлап йәйәү үткәндә лә күҙгә ташлана: коляска һөйрәп, балалар етәкләп саф һауаға сыҡҡан йәш ғаиләләр, йә булмаһа бәхетле өләсәй-ҡартатайҙар аҙым һайын осрап ҡына тора. Тиҙҙән әсә булырға йыйынған йөклө ҡатын-ҡыҙ ҙа элеккесә һирәк күренеш түгел хәҙер. Белгестәр фаразлауынса, яҡындағы 7 йыл эсендә мәктәп йәшендәге балалар һанының артыуы көтөлә, сөнки быйыл 2007 йылғы балалар мәктәпкә аяҡ баҫты, ә улар былтырғы беренселәрҙән 700-гә күберәк. Ғөмүмән, баш ҡалабыҙ халыҡ һанының тәбиғи артым күрһәткестәре буйынса беренсе урында килә. Тәүге ярты йыллыҡта был күрһәткес 2109 кеше тәшкил итте. Балалы йортта ҡот бар, тигәндәй, әлеге рейтинг һығымталары менән килешеп кенә ҡалмай, тикшеренеүселәр нишләптер иҫәпкә алмаған, ләкин өмөтлө ҡала күрһәткесе булырҙай тағы бер мөһим факторға иғтибарығыҙҙы йүнәлткем килгәйне.

**(Дауамы 2-се биттә).**



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Рәсәй ҡалалары араһында үткәрелгән рейтингта Өфө иң оптимистик ҡала тип табылған. Һеҙ был баһа менән килешәһегеҙме?

(Башы 1-се биттә).

*Рәсимә УРАҠСИНА, филология фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, шағир:* Бәләкәй генә йәштән, бынан иллеләп йыл элек, интернатҡа уҡырға килеп, унан ғүмер буйы ошонда йәшәп, баш ҡалабыҙҙың күҙ алдында иҫ киткес заманса үҙгәрештәр кисереүенә шаһитмын һәм бик шатмын. Образлы итеп әйткәндә, баш ҡалабыҙ менән бергә үҫтек, бергә үҙгәрҙек. Ул күктәргә үрләһә, беҙ ҙә, уның балалары, ярышлап юғарыға, белемгә ынтылдыҡ. Үткән быуаттың 60-сы йылдарында ҡалала нигеҙҙә биш ҡатлы йорттар ғына булып, Черниковка биҫтәһендәге һигеҙ ҡатлы йортто күрергә класыбыҙ менән экскурсияға барып йөрөгән саҡтарҙы хәтерләһәң, Өфөбөҙҙөң бөгөнгө йөҙө мөһабәт мегаполистарҙан бер ни менән дә айырылмауын күреп, тағы бер һоҡланаһың. Йорттар хәҙер күктәргә олғашырҙай бейек, архитектура йәһәтенән дә улар бер-береһен ҡабатламай.

Мин үҙем йәшәгән йорттоң ун икенсе ҡатынан ус төбөндәгеләй күренеп ятҡан Өфөмдө күҙәтергә яратам. Тәбиғәттең, тәүлектең һәр миҙгелендә лә матур, ҡарап туйғыһыҙ гүзәл ул. Бер нисә тиҫтә йыл эсендә генә лә танығыһыҙ үҙгәрештәр кисереп, көн һайын прогреска үрләүҙән туҡтамаған баш ҡалабыҙҙа, әлбиттә, оптимистик рух өҫтөнлөк итә! Был ҡаланың үҫешендә генә түгел, көн һайын урамда осраған кешеләрҙең йөҙҙәренән дә, үҙ-ара мөнәсәбәттәренән һәм холоҡ-ҡылыҡтарынан да, кейгән кейемдәренән дә һәм хатта атлап йөрөүҙәренән дә асыҡ күренеп тора. Гәрсә нурлы Ҡаҙанға етә алмаһаҡ та (әйткәндәй, Татарстандың күпселек өлкәләрендә һәр дайым үҙ иленең, үҙ еренең ысын хужалары - урындағы мәнфәғәттәргә битараф булмаған илһөйәр кадрҙар етәкселек итә), бик ҡалышып та бармайбыҙ. Ә бына был йәһәттән Ҡаҙанда нисектер, әммә беҙҙә ситтән килеүселәргә ҡалабыҙ ҡапҡалары ғына түгел, күңелдәребеҙ ҙә шар асыҡ. Был яҡшымы, насармы - уныһы икенсе мәсьәлә, мәгәр оптимистик рух булмаған ҡалала хатта сит-ят ҡәүемдәр ҙә үҙҙәрен хужаларса ышанысһыҙ тотоп, ныҡ баҫып йөрөй алмайҙыр ул, минеңсә...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән тәңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# МИЛЛИ РУХ БУЛМАҺА...

## белем генә наҙанлыҡтан ҡотҡармай

**Зәки ӘЛИБАЕВ, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ доценты, филология фәндәре кандидаты:** Ниндәй генә замандарҙа йәшәһәк тә, халыҡ өсөн бөйөк шағир, мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулланың һүҙҙәре әһәмиәтен юғалтмай: "Аңғыра айыуҙан Уралдағы ҡурҡҡандай, эй, туғандар, наҙанлыҡтан ҡурҡыу кәрәк!" - тигән юлдар милләттәштәремә белемле кеше - донъя тотҡаһы, киләсәгебеҙ булыуын иҫләтеп тора. Әммә бөгөн мәғариф системаһында белем биреүҙе яҡшыртыу, юғары кимәлгә күтәреү ниәтендә йыл да төрлө закондар, заманса технологиялар ҡулланыуҙы талап иткән үҙгәрештәр индерелһә лә, йәмғиәтебеҙҙә төплө белемле, алдынғы ҡарашлы кешеләр һаны кәмей бара. Уҡыусылары аҙ булған мәктәптәрҙе ябыу, юғары уҡыу йорттарында бюджет урындарын аҙайтыу, педагогтарҙы ҡыҫҡартыу, бер һүҙ менән әйткәндә, белем биреү учреждениеларын оптималләштереү тиҫтәләгән йылдар дауамында формалашҡан традицияларҙы юғалтыуға килтерҙе. Перспективаһыҙ мәктәп уҡыусылары 25 километр алыҫлыҡта урынлашҡан ауыл мәктәбенә йөрөргә мәжбүр икән, улар йөрөп уҡыуҙан арый, белемле булыуҙан тәңөлә. Ә белемен камиллаштырырға ашыҡмаған халыҡ - һарыҡ менән бер. Һарыҡ көтөүе менән идара итеүе нисек уңайлы икәненә төшөнгән сәйәсмәндәр беҙгә наҙанлыҡты юғарынан көсләп таға. Юғары уҡыу йорттарының бәҫе төшөүендә лә ниндәйҙер кимәлдә улар ғәйепле. Элек мәктәпте 25 кеше тамамлай икән, шуларҙың икәүһе генә юғары уҡыу йортона инә, унауһы - техникумға, ҡалғаны эшсе һөнәрҙәрен үҙләштерә торғайны. Хәҙер нисә сығарылыш уҡыусыһы бар, бөтәһе лә вузға инергә теләйеш, тигән маҡсат ҡуйыла. Уларҙың күбеһе түләүле бүлеккә уҡырға инә, әммә уларҙың ҙур өлөшө илгә киләсәктә кәрәкле белгес булып сығыу тураһында хыялланмай ҙа. Шундай студенттарҙан олатаһының исеме йә күренекле яҡташы тураһында белешһәң, белмәйҙәр. Иң ҡыҙғанысы, белергә лә тырышмайҙар, улар быны кәрәкмәгән мәғлүмәт, тип иҫәпләй. Йәштәрҙе үҙебеҙҙең шәхестәр миҫалында тәрбиәләмәгәс, уларға: "Бөгөн театрҙа бик шәп спектакль ҡуйыла, төп ролдә Хәрмәтулла Үтәшев", - тип әйтеүҙән дә файҙа юҡ, уларҙа беҙ һөйләгәнгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уянмай. Ә үҙенең күренекле милләттәштәрен белмәгән кеше, тыуған иле тураһында хәбәрҙар булмаған әҙәм нисек башҡорт рухлы булһын? Үкенес, был йәштәр Башҡортостан ерендә ирәйеп, тура баҫып йөрөй алмай. Уларҙа, был - минең ерем, илем, халҡым, уны ташлап китмәйем, тигән хис юҡ. Ә бит башҡорттарҙа элек ундай тойғо булмаһа, дәһшәтле яуҙарҙа еңеп сыға, төрлө ҡыйралыштарҙан һуң тере ҡалып, ошо ерҙән бер ҡайҙа ла ҡасып китмәй йәшәп, һаҡланып ҡала алмаған да булыр инек. Шуға күрә, бөгөн улың йәки ҡыҙың наҙанлыҡты нимәлә күреүенә иғтибар итергә кәрәк: көнсығыш "йондоҙҙары"н белмәүҙәме, йәки үҙ олатаһының исемен әйтә алмауҙамы? Сөнки наҙанлыҡ - ул теоретик белем нигеҙҙәрен белмәү генә түгел, "милли рух" тигән төшөнсәнең дә булмауы. Уны булдырыу өсөн һә бары һәр башҡорт үҙенә ошо һорауҙы биреп ҡарарға тейеш: "Салауат Юлаев 22 йәшендә ирек өсөн көрәшеп, бөтөн системаға ҡаршы күтәрелгән, Мостай Кәрим 19 йәшендә һуғыштан поэмалар яҙып ятҡан, ә мин, үҙ сиратымда, халҡым мәнфәғәте өсөн нимә эшләнем?"

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле башланды. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана икәнен тағы бер тапҡыр иҫегеҙгә төшөрәбеҙ.**

● Шулай итеп, 2015 йылдың беренсе яртыһы өсөн сентябрҙән **50665** индекслы "Киске Өфө"гә **513 һум 72 тингә** яҙылырға мөмкин. Предприятиелар һәм ойошмалар өсөн билдәләнгән 50673 индекслыһының хаҡы - 543 һум 72 тин.

● Сентябрҙә "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ - **С. Руденконың "Башкиры"**, 2 уҡыусыбыҙ - **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ башҡортса **"Дини календарь"**, 10 уҡыусыбыҙ **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып ҡыуаныр.



**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **252 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **252 һум**.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Ишембайҙа Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич, Рәсәйҙең транспорт министры Максим Соколов һәм Башҡортостан башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Геройы А.В.Доставалов исемендәге Башҡортостан кадет корпусында булды. 2013 йылдың июлендә кадет корпусы "КаДетство" проекты сиктәрендә федераль кимәлдәге белем биреү учреждениеһына үҙгәртелгәйне. Ҡунаҡтар был юлы кадеттарҙың йәшәү шарттары менән танышты.

✓Мәскәү ҡунаҡтары Михаил Бабич һәм Максим Соколов Өфөлә төҙөлә башлаған күперҙәрҙе лә ҡаранылар. Әле Ағиҙел йылғаһы аша ике күпер төҙөлә. Беренсеһе Галле урамындағы хәҙерге күперҙән ағым буйынса 40 метрға юғарыраҡ урынлашҡан. Тәүге автомобилдәр ағымын күпер 2016 йылдың июлендә ҡабул итә аласаҡ. Киләһе объект - Воровский урамындағы Ағиҙел йылғаһы аша иҫке күпер. Күпер ҡала өсөн стратегик әһәмиәткә эйә - ул Өфөгә көньяҡтан инеү, Ырымбурға, Стәрлетамаҡҡа, Дим һәм Чесноковка биҫтәләренә сығыу юлы.

✓29 августа Янауыл, Ҡалтасы һәм Нефтекама райондарында дауыллы ел һөҙөмтәһендә емерелгән өйҙәрҙе тергеҙеү буйынса эштәр йыл аҙағына тиклем тамамланырға тейеш, тине республика комиссияһы кәңәшмәһендә Башҡортостан башлығы Рөстәм Хәмитов. Билдәләнеүенсә, бөтә зыян күргәндәргә матди ярҙам күрһәтеләсәк. Башҡортостанда стихия килтергән зыянды баһалау буйынса Ведомство-ара комиссия ойошторолдо. Уны республика Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Рәүеф Ноғоманов етәкләй.

✓Башҡортостан башлығы Рөстәм Хәмитов бер көнлөк эш хаҡын республиканың төньяҡ-көнбайышында көслө дауылдан зыян күргәндәргә ярҙам йөҙәнән аҡса йыйыу өсөн асылған махсус иҫәпкә күсерҙе. Республика етәксеһе миҫалына беренселәрҙән булып Башҡортостан Президенты Хакимиәте һәм республика Хөкүмәте хеҙмәткәрҙәре ҡушылды.

✓Башҡортостанда ваҡытынан алда тауыш биреү башланды. 2014 йылдың һайлау кампанияларында ул тик муниципаль һайлауҙарҙа участка һайлау комиссияларында бара. Тауыш биреү 13 сентябрҙә тамамлана. Ваҡытынан алда тауыш биреү 20 муниципаль берәмектәге 188 һайлау участкаһында уҙғарыла, тип аңлаттылар БР Үҙәк һайлау комиссияһында.

*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# МИҘАЛ ТАҠҠАН МИҪАЛМЫ?

*- Шағир данына һәр кем дә риза,*
*Тик шағир булмайҙар, яҙып ғариза.*
*- Шағирлыҡты ла, иллә лә мәгәр,*
*Ғариза яҙып ташлап китмәйҙәр.*
*Әсхәл Әхмәт-Хужа.*

**Бер аҡһаҡал баҡсала шәкерттәренә һабаҡ биреп йөрөй икән. Был урында данлыҡлы шәхестәргә һәйкәлдәр ҙә ҡуйылған булған. Бер уҡыусыһы аҡһаҡалға: "Нишләп бында һеҙгә һәйкәл юҡ?" - тигән һорау биргән. Аҡһаҡал: "Нишләп был кешегә һәйкәл ҡуйылған?" тигән һорауға ҡарағанда, "Нишләп уға һәйкәл юҡ?" тигәндәре яҡшыраҡ түгелме ни?" - тип яуаплаған.**



Был хикмәтнәмә билдәле музыкант Андрей Макаревич менән бәйле ваҡиғалар арҡаһында иҫкә килеп төштө. Хәтерегеҙҙәлер, 2 августа А. Макаревич Украинаның Святогорск ҡалаһында Донецк менән Луганск ҡасаҡтары лагерында ойошторолған концертта ҡатнашҡайны. Быны күптәр Рәсәйгә ҡаршы йүнәлтелгән сара, тип ҡабул итте. Бынан алда А. Макаревич Владимир Путинға яҙған асыҡ хатында Рәсәйҙең Ҡырымды үҙ составына кире ҡайтарыуына ла ҡаршы сығыш яһағайны. Артистың был ҡылыҡтары Рәсәй патриоттарында кире реакция тыуҙырҙы. Дәүләт Думаһы депутаты Евгений Федоров артистың дәүләт наградаларын тартып алырға ла тәҡдим итте. Уны Рәсәй гражданлығынан мәхрүм итергә, концерттары тыйырға, тигән тәҡдимдәр ҙә яңғыраны. Тәүҙә Макаревич бындай янауҙарға ҡаршы үҙе лә суд менән янап маташты, шунан һуң Рунетта уға ҡаршы петицияла 20 меңдән артыҡ ҡултамға йыйылғас, Рәсәй Президенты Владимир Путин исеменә асыҡ хат яҙырға мәжбүр булды. Унда ул дәүләт етәксеһенә үҙен эҙәрлекләүҙәре тураһында белдерҙе һәм был кампанияны туҡтатыуҙы талап итте. Президенттың матбуғат секретаре Дмитрий Песков, быны эҙәрлекләү тип ҡабул итеү дөрөҫ түгел, тип белдерҙе. Ысынлап та, Рәсәй халҡының уртаҡ фекерен тап ошолай итеп ҡабул итергә тырышыуҙы Макаревичтың үҙ рейтингын күтәреү сараһы, тип уйларға ла була.

Мине артистың һуғыш хәлендә булған дәүләттә концерт менән сығыш яһай аламы, юҡмы икәнлегенән бигерәк, дәүләт наградаһының кеше өсөн әһәмиәте нығыраҡ ҡыҙыҡһындыра. Почетлы легион орденын булдырғас, Наполеон: "Ошо меҫкен шаҡы-шоҡо ярҙамында кеше менән үҙең теләгәнсә файҙаланып була", - тип әйтә. Уйлап ҡараһаң, дәүләт тарафынан булдырылған төрлө наградалар ошо манипуляция өсөн хеҙмәт итә түгелме? Теге йәки был наградаңа алыу өсөн ниндәй генә "мутлыҡтарға" бармай бөгөн берәүҙәр. Яңыраҡ билдәле бер композиторҙың интервьюһында ошо турала уҡырға насип булды. Ул үҙенә республиканың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре тигән исемде һәм Ғәлимов Сәләм исемендәге премияһы ике уҡытыусыһына бер вуздың профессоры дәрәжәләрен алыу өсөн генә бирелгәнлеген әйтеп үтә. Әлбиттә, был профессорҙарыһыҙ ҙа ижадсыбыҙ был наградаларға лайыҡ ине. Әммә уның был фактты ғәләм алдында таныуы күпте һөйләй.

Уҡыусыһының уҡытыусыһы өсөн ошолай "терәк" булыуы кешелә әллә ни ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙырмайҙыр ҙа. Әммә йыш ҡына беҙгә теге йәки был наградаға лайыҡ булмаған замандаштарыбыҙ менән аралашырға тура килә. Уларҙың ниндәйҙер ҡаҙаныштары булмаһа ла, күкрәгенән был наградa билдәһен төшөрмәй, йәки үҙенең бөтә регалияларын тулыһынса күрһәтергә тырышып, ҡупырайып йөрөгәндәр аҙмы ни? Фән докторымын, тип, был фәндең төп ҡанундарын да белмәгән "ғалим", тауышсы ла булмаған "атҡаҙанған артистарыбыҙ" юҡмы? Ошо наградалар, премиялар, гранттар системаһы арҡаһында ябыҡ авторҙар ҡастаһы барлыҡҡа килде. Үҙҙәренең бәхәсле, түбән сифатлы әҫәрҙәрен пропагандалау өсөн улар бер нәмәнән дә тартынмай. Телевидение, радио, гәзит-журналдарҙа бер-береһен маҡтауҙың ялған икәне хатта ябай кешенең күҙлегенән ситтә ҡалмағанын һиҙмәйҙәр ҙә һымаҡ ҡайһы саҡта. Ошо ябыҡ "түңәрәк" ағзалары бер исемлектән икенсеһенә алмаш-тилмәш күсеп йөрөй. Бының өсөн республика иҫәбенә сит илдәргә даими сығып йөрөгән, китаптарын баҫтырған "таланттарҙы" байҡау ҙа етә. Әгәр ҙә уларҙан һәләтлерәктәр ярҙамдан ситтә ҡалмаһа, был хәлгә көлөп кенә ҡарар ҙа ҡуйыр инек...

Макаревичты дәүләт наградаларынан мәхрүм итергә маташыу тағы бер мәсьәләнә алға ҡуя. Тарихта бындай осраҡтар булғылаған, хатта Советтар Союзы Геройҙары ла үҙ дәрәжәһенән ҡолаҡ ҡаҡҡан. Наградаларҙы алыуҙан баш тартҡандары ла булғылаған. Тимәк, был наградa уға "лайыҡлы түгел"дәр ҙә булғандыр. Андрей Макаревичтың наградаларын тартып алып та булмайҙыр, алып булғанда ла, әхлаҡи яҡтан башҡа һиймаған эштер. Был осраҡта уның үҙенә был наградаларҙан баш тартырға ғына ҡалалыр, моғайын.

Ә шулай ҙа ниндәйҙер исемдәр кешене биҙәмәй, киреһенсә, кеше наградаһының дәрәжәһен билдәләй. Шунлыҡтан, бындай бүләктәр менән һаҡ булырға кәрәк. Уларҙы тик лайыҡлыларға ғына биреү лазым. Шулай иткәндә генә һунынан был наградаңы кире тартып алыу мәсьәләһе килеп тыумаҫ. Наградa көсәп йөрөгән ижадсыларға ла быны онотмаҫҡа ине.

*Һинән һуң ҡалһын матур иҫтәлек:*
*Халҡыңа бөрсәк бер нур өҫтәрлек,*
*Йөрөгән ереңде һағынып иҫләрлек,*
*Еләҫ елдәр ҙә һығылып иҫерлек!*

**Бәхтийәр ӘХӘТОВ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# БЫНДАЙ КЕШЕЛӘР...

## һеҙгә таныш түгелме?

**Ҡала йәмәғәт транспортында йөрөгәндә кемдәрҙе генә күрмәйһең дә, нимәләр генә ишетмәйһең. Донъя булғас, төрлө әҙәмдәр осрай, ғибрәттәре лә тулып ята. Шуларҙың үҙем шаһит булған береһен генә тасуирлау ҙа, бәлки, ҡайны берәүҙәрҙе йәшәйешебеҙ хаҡында уйланырға мәжбүр итер...**

Йәйҙең матур бер көнө. Быйыл ямғыр мул яуғас, тирә-йүн сәм-йәшел. Бер туҙан әҫәре юҡ, тын алыуы иркен. Автобус эсендәге барса халыҡ тышҡа төбәлгән. Ә унда, урамда, күҙҙең яуын алырлыҡ сәскәләрҙең ниндәйе генә юҡ! Шулай ҙа ҡалабыҙ матур беҙҙең, һоҡланып туймаҫлыҡ.

Эштән һуң арыған кешеләр шул гүзәллектәргә ҡарап, ял итеп бара. Барыһы ла шып-шым, тик бер кеше генә, бөтөн салон эсен яңғыратып, туҡтауһыҙ телефондан һөйләшә. Минең бара торған ерем йыраҡ булғас, бер сәғәттән ашыуыраҡ юлда булдым. Шул бер сәғәт буйы был йәш кеше кеҫә телефонындағы номерҙарҙың һәммәһенә лә шылтыратып сыҡты ла, аҙаҡ шул уҡ әңгәмәселәренә икенсе тапҡыр (ә бәлки, өсөнсөләр) шылтырата башланы. Телефонһыҙ бер минут та тора алмай, ахырыһы.

Бер үк ваҡытта йәнәшәлә ултырған таныш булмаған ҡыҙҙың планшетына ла (сибәр ҡыҙҙың үҙенә түгел!) күҙ һалғылай. Артыҡ ҡыҫҡырып һөйләшеүенә ҡарағанда, был әҙәм үҙенең ҡайҙа икәнен онотто, күрәһең. Бармаҡтары телефон төймәләрендә туҡтауһыҙ уйнай, күҙҙәре лә уйнап тора. Уның мәғәнәһеҙ, аҙашҡан күҙ ҡарашы бер нәмә лә күрмәй һымаҡ. Тыштағы матурлыҡты ла, тирә-яғындағы кешеләргә лә ҡарай, ләкин күрмәй. Ғөмүмән, уның өсөн ысынбарлыҡ юҡ ине, шикелле. Ҡыҫҡырып һөйләшкәс, барыһы ла ирекһеҙҙән ошо "күҙле бүкән"дең һүҙ буҡһын тыңларға мәжбүр булды. Водитель нисек түҙгәндер, уға яҡын ғына ултырғас, эшенә ныҡ ҡамасаулай ине бит. Егеттең һөйләшеүенең дә рәте юҡ. Бына уның бер диалогы:

- Уҡыуҙар нисек бара?
- Әле өйгә каникул бит, - тине, ахыры, тегеһе.
- Ә-ә, каникулмы ни? Ҡасанға тиклем инде? Ә-ә, 1 сентябргә тиклемме ни әле...

Ошо һөйләшеүҙән аңлашылыуынса, был бәндә виртуаль тормошта йәшәп, реаль тормошта нимә барғанын да белмәй ҙә баһа; ваҡыт, киңлек төшөнсәләрен юғалтҡан, тимәк. Хатта көнө менән төнө буталып, тәмле йоҡонан да мәхрүмдер инде ул, тип уйлап ҡуйҙым. Юғиһә, мейеһе әҙерәк ял итер ине кәрәкмәгән мәғлүмәти ташҡындан. Шундай күренеште күҙ алдына килтерҙем: хәҙер ул өйөнә ҡайтып инә лә, иң тәүҙә йүгереп барып компьютерға йәбешә (уны тиҙерәк эшләтеп ебәрергә кәрәк бит), шул арала кухняға сығып, тиҙ генә ҡаптыҡларға берәй нәмә табып, уны компьютер эргәһенә алып килә лә, шул ҡара йәшниккә текәлә. Үҙе ҡабаланып ашай, донъяһын онотоп, ризыҡтың тәмен дә тоймай... Ғөмүмән, йәшәү тәмен һиҙмәй, тормош йәмен күрмәй. Бахыр йән... Ул төшөп ҡалғас, бар халыҡ еңел тын алып ҡуйған кеүек булды.

**Хәлиҙә АЛТЫНБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Минималь эш хаҡы 5 мең 500 һумдан 6 мең 900 һумға тиклем артасаҡ. БР Эш биреүселәр союзы, БР Сауҙа-сәнәғәт палатаһы һәм БР Профсоюздар федерацияһы вәкилдәре ҡатнашлығындағы Социаль-хеҙмәт мөнәсәбәттәрен көйләү буйынса өс яҡлы республика комиссияһы ултырышында Рөстәм Хәмитов Башҡортостанда минималь эш хаҡын күтәреү тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуйҙы.

✓ 2014 йылдың 4 сентябренән алып 14-нә тиклем көн һайын иртәнге 9-ҙан көндөҙгө 1-гә тиклем һәм көндөҙгө 2-нән киске сәғәт 6-ға тиклем (Мәскәү ваҡыты буйынса) Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһының "ҡыҙыу линия" эше ойоштороласаҡ, тип хәбәр итеlә ведомство сайтында. "Ҡыҙыу линия"ның күп каналлы телефоны: (495) 606-98-88. Республика халҡы, шылтыратып, һайлауҙар менән бәйле мәсьәләләр буйынса консультация ала, шулай уҡ һайлау ҡануниәтен боҙоу факттары тураһында хәбәр итә ала.

✓ Умартасылыҡ продукцияһын етештереүселәр һәм эшкәртеүселәр эшмәкәрлеген төбәк-ара координациялау ассоциацияһы һәм Башҡортостан сауҙа ассоциацияһы һәр йыл уҙғарылып килгән "Иң тәмле бал" республика конкурсының башланыуы тураһында иғлан итә. Тулыраҡ мәғлүмәт алыу өсөн Мәләүеҙ районы хакимиәтенең иҡтисади үҫеш, сәнәғәт, инвестициялар, эшҡыуарлыҡ, туризм һәм ҡулланыусылар баҙары бүлегенә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Белешмәләр өсөн телефондар: (34764) 3-12-20; 3-08-10.

✓ "Башҡортостан продукты" республика проектына дүрт яңы ҡатнашыусы ҡушылды, тип хәбәр итә БР Сауҙа һәм ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәте. Тейешле дипломдарҙы шәхси эшҡыуарҙар Хәйруллин (Стәрлетамаҡ районы) һәм Сәрүәров (Краснокама районы), "Добрый пряник" компанияһы яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте (Иглин районы), "СН-продукт" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте (Благовар районы) алған. Хәҙер улар үҙҙәренең тауарҙарында "Башҡортостан продукты" тамғаһын ҡуя ала. Шулай итеп, "Башҡортостан продукты" проекты 1500-ләгән төр продукция сығарған, 130 етештереүсене берләштерә.

**"Башинформ"дан.**

✔ Баш ҡалала үҙенсәлекле "Үҙ кәштәм" проекты старт алды. Был гәзиттәге "барахолка" түгел, ә бутик. Унда һатырға теләгән әйбереңде ҡуйып, уны һатып алыусы килгәнен көтөргә генә кәрәк.



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИНША ЯҘЫП...

**Рәсәйҙә яңы уҡыу йылынан дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын үткәреү тәртибе үҙгәрәсәк.**

Хәҙер урта дөйөм белем биреү программалары буйынса дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын (ГИА) тапшырыу алдынан уҡыусылар инша яҙырға тейеш буласаҡ. Инвалид балалар инша урынына изложение һайлай ала. Иншаны (изложениены) сығарылыш уҡыусылары Рособрнадзор билдәләгән темалар (текстар) буйынса декабрә яҙасаҡ, уны февралдә һәм апрель-майҙа ҡабаттан яҙырға мөмкинлек биреләсәк.

Бынан тыш, дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын алдан тапшырырға теләүселәрҙең (1 апрелдән һуң) барыһына ла, мәктәптә үткән йылдарҙа тамамлаусыларға ла рөхсәт биреләсәк. Әгәр ҙә һөҙөмтә насар билдә менән баһаланһа, бөтөн предметтан да уны яңынан тапшырырға мөмкин буласаҡ. Был мөмкинлек имтихандарҙың һәр этабында һәр предметка бер тапҡыр бирелә. Шулай уҡ Берҙәм дәүләт имтихандарын (ЕГЭ) уҡыу программаһы буйынса предметты уҡып бөткәс тә тапшырырға була. Мәҫәлән, географияны хәҙер унынсы класта тапшырырға мөмкин буласаҡ. Сит телдән БДИ тапшырғанда уҡыусының теләге буйынса "Телмәр" бүлеге индерелә ала. Телдән бирелгән яуаптарҙы яҙҙырып алыу планлаштырыла.

# ЯҢЫ КӘСЕП ТӨРӨ

**Баш ҡалала үҙенсәлекле "Үҙ кәштәм" проекты старт алды. Был гәзиттәге "барахолка" түгел, ә бутик. Унда кәштә йәки кейем элгесен ҡуртымға алып, һатырға теләгән әйбереңде ҡуйып, уны һатып алыусы килгәнен көтөргә генә кәрәк.**

- Беҙ ҡуртымға бина алып, уны йыһазландырҙыҡ, социаль селтәрҙәрҙә мәғлүмәт урынлаштырҙыҡ, - ти Менделеев урамы 155-се йортта гәҙәти булмаған бутикты ойоштороусылар. - Нигеҙҙә, беҙгә винтаж кейемдәре килтерәләр. Шулай уҡ ҡулдан эшләнгән йомшаҡ уйынсыҡтар, тильдаҡурсаҡтар, хәтфә айыуҙар, бәйләнгән кейемдәр күп.

Магазин күреү һәләте буйынса инвалидтарҙың "Луч" спорт-реабилитация үҙәге һәм башҡа коммерция булмаған ойошмалар менән хеҙмәттәшлек итә. Физик мөмкинлектәре сикләнгән балалар ҙа магазин кәштәләренә үҙҙәренең ҡул эштәрен буш-лай урынлаштырып, улар өсөн аҡса алыу мөмкинлегенә эйә.

- Үҙ ҡулдары менән нимәләр етештергән кешеләр менән системалы эш ойоштороу - ҙур булмаған, әммә ҡала өсөн ҡыҙыҡлы бизнес, - ти "Луч" үҙәге етәксеһе урынбаҫары, Башҡортостан Республикаһының Йәмәғәт палатаһы ағзаһы Кирилл Волков. - Беҙҙә һәләтле кешеләр бик күп, әммә уларҙың бер өлөшө төрлө сәбәптәр арҡаһында үҙенә эш урыны таба алмауы ихтимал. Быңдай социаль эшҡыуарлыҡ өлгөләре бик кәрәк.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ



# МӘҒАРИФТЫ...

## тағы үҙгәрештәр көтә

**Яңы уҡыу йылы башланыр алдынан республика районларында мәғариф учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең август кәңәшмәләре үтте. Ҡыйғы районындағы шундай сарала РФ Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева ла ҡатнашты.**

Әлеге ваҡытта мәктәп мәғарифта барған үҙгәрештәр үҙәге булып тора. Ул яңы быуын мәғариф стандарттарын ҡулланылышҡа әүҙем индереү, уҡыусыларҙы тормошҡа әҙерләү, йәштән үк һөнәр һайлауға йүнәлеш бирергә тейеш. Әммә Сәлиә Шәрифйән ҡыҙының сығышы РФ Президентының педагогтарҙың эш хаҡын арттырыу буйынса сығарған май указдарына ҡағылды. "Средстволарҙың аныҡ уҡытыусы ҡесәһенә нисек барып инеүе ҙур мәсьәлә. Был процесс теге йәки был коллективта эшләүсе һәр кешегә аңлайышлы булырға тейеш. "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" федераль закондың 47-се статьяһы һәр педагогҡа белем биреү ойошмаһының эшмәкәрлегенә ҡағылышлы мәсьәләләр буйынса фекер алышыуҙа ҡатнашырға хоҡуҡ бирә, - тине ул. - Беҙ барыбыҙ ҙа педагогтың эш хаҡын арттырыу үҙмаҡсат түгел икәнлеген аңлайбыҙ. Был - белем биреү сифатын күтәреү өсөн яһалған аҙым. Педагогтың һөнәри стандарттын индереү һәм һөҙөмтә контракт системаһына күсеү эш хаҡы түләү буйынса килеп тыуған мәсьәләләрҙе көйләү мөмкинлеге бирәсәк, дөрт өҫтәйәсәк. Тышҡы факторҙарға килгәндә инде, яңы ҡабул ителгән федераль законда йәмәғәтселеккә теләһә ниндәй дәүләт ойошмаһын, шул иҫәптән мәғариф ойошмаһын, контроллау һәм баһалау мөмкинлеге бирә һәм был көслө мотивация буласаҡ. Аныҡлап әйткәндә, "Рәсәй Федерацияһының йәмәғәт контроле нигеҙҙәре тураһында" федераль закондың 3-сө статьяһы РФ граждандарының шәхсән дә, ихтимағи берекмәләр, башҡа коммерция булмаған ойошмалар составында ла йәмәғәт инспекторы йәки йәмәғәт эксперты булып ҡатнашыу хоҡуғын бирә. 21 октябрҙән "Мәҙәниәт, социаль хеҙмәтләндереү, һаулыҡ һаҡлау һәм мәғариф ойошмаларының хеҙмәтләндереү сифатын бойондороҡһоҙ баһалау буйынса РФ-ның айырым закон акттарына үҙгәрештәр индереү тураһында" федераль закон көсөнә инәсәк. Ул мәғариф өлкәһендә белем биреү сифатын бойондороҡһоҙ баһалауҙы күҙаллай. Бында төп критерий булып асыҡлыҡ, ойошма тураһында мәғлүмәттең һәр кем өсөн асыҡ булыуы, уңайлылыҡ, хеҙмәткәрҙәрҙең илтифатлылығы, изгелеклелеге, компетентлылығы һәм белем биреү сифаты буйынса үткәреләсәк. Белем биреү сифаты буйынса бойондороҡһоҙ баһалама һөҙөмтәләре белем биреү эшмәкәрлеген туктата йәки лицензияны тартып алыуға йоғонто яһамай. Әммә ошо баһалар нигеҙендә мәғариф учреждениеларының һәм уларҙа ҡулланылған программаларҙың рейтинғы формалаштырылыуы мөмкин. Йәмәғәтселек арбитр ғына түгел, ә һәр белем усағы өсөн оптималь моделдә эшләүҙә ҡатнашыусы партнер ҙа буласаҡ".

Шулай уҡ Сәлиә Мырҙабаева уҡытыусыларҙың сәләмәтлеге мәсьәләләренә лә ентекле туҡталды. Сөнки уҡытыу-тәрбиә эшенең уңышы педагогтың физик һәм эмоциональ торошона бәйле. Был йәһәттән депутат уҡытыусыларҙың, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең ҡарарын тормошҡа ашырыу сиктәрендә, дәүләт учреждениелары белгестәрен шифахана-курорт тәьминәте буйынса социаль хеҙмәт менән файҙалана алыуын билдәләне.

...ГӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҺӨТЛӨ БАЙРАМДА

**Өфөнөң В. И. Ленин исемендәге майҙаны ул көндө ҡырмыҫҡа иләүеләй геүләне. Өфөләр генә түгел, бөтөн республиканан сираттағы тапҡыр "Һөт иле" байрамына йыйылды халыҡ. Бына ап-аҡ "бәшмәктәр" - палаткалар эсендә бер иш алъяпҡыстар кейгән ағайҙар, апайҙар, инәйҙәр, олатайҙар балаларға, өлкәндәргә һөт, ҡымыҙ тәмләтә. Кешеләр, "паровоз" уйынындағы һымаҡ, бер-береһе артынан теҙелгән. Ҡәртәләргә бикләнгән бер өйөр мал-тыуар эргәһендә кеше бигерәк тә күп. Айырыуса бала-сағаның иҫәбе-һаны юҡ. Ә сәхнәлә йырлайҙар, бейейҙәр. Шул арала беҙ сараға килеүселәрҙең байрам тураһында фекерҙәрен һораштыҡ.**

**Гөлсиә НУРМӨХӘМӘТОВА, тәрбиәсе, Өфө ҡалаһы:** Балаларыбыҙ Кәримә һәм Азат, барайыҡ та барайыҡ, тигәс, быйыл да килдек әле. Өсөнсө йыл рәттән ҡатнашһаҡ та, бер ҙә ялҡытмай: ял итеп ҡайтабыҙ. Өйҙә үҙебеҙ ҙә, балалар ҙа сөйҙе һөтләп эсәбеҙ. Ҡымыҙҙы йыш эсеп булмай бит, бына әле бер литр ярымлыҡ һауыт менән һатып алдыҡ. Тәмле тойола былай. Минең атайым ауылда йылҡы тота, ысын ҡымыҙҙың ниндәй икәнлеген беләбеҙ. Шуға, магазиндағы ҡымыҙға күңел төшмәй. Бөгөн тәмләп ҡарап, һәйбәтен һайлап алырбыҙ, тигәйнек тә, балалар менән оҙон сиратта торорға йөрьәт итмәнек. Сараны баһалауға килгәндә, яҡшы ойошторолған, һүҙ ҙә юҡ. Тик, халыҡтың был тиклем күп килерен белмәгәндәрме - хатта шундай киң майҙан да тар тойолдо.

**Рәсим РӘХМӘТУЛЛИН, Стәрлетамаҡ районының "Рощинский" совхозы хеҙмәткәре:** Төп шөғөлөбөҙ сусҡа итенән колбаса, деликатестар әҙерләп һатыу булһа ла, һөт аҙыҡтары етештереү менән дә шөғөлләнәбеҙ. Фестивалдә асылғаны бирле ҡатнашабыҙ. Быйыл һөт, ҡорот, кефир, ҡатыҡ, йогурт алып килдек. Беҙҙең һөт аҙыҡтары һатып алыусылар араһында ҙур һорау менән файҙалана. Был һүҙҙәрҙең ысынбарлыҡ икәнлегенә бөгөн дә инандыҡ: палаткабыҙ янында һөт эсергә, һөт продукттарын һатып алырға теләүселәр сираты өҙөлмәне. Ҡапсыҡтар, кәрзиндәр тотоп, этешә-төртөшә торған халыҡты күргәс, совет осорондағы һыу буйы сираттар хәтергә килеп төштө хатта. "Һөт иле" фестивале беҙгә - һатыусы менән һатып алыусыға яҡындан аралашыу мөмкинлеге биреүе менән ҡыҙыҡлы, әһәмиәтле.

**Вәсилә МИҺРАНОВА, Белорет районы Маңышты ауылы:** Өфөгә ҡыҙыбыҙ Динә менән Динар кейәүебеҙгә ҡунаҡҡа килгәйнек, Һөт байрамын да күрергә яҙҙы бына. Ҡалала ла халыҡ һөт ризыҡтарын үҙ итә икән, тип ҡарап торам әле. Күптәр йүгереп йөрөп ҡорот, эремсек эҙләй. Ҡоротто әйтәм, бер-ике урында бар ине, уларың да тиҙ арала алып бөттөләр. Мин дә балаларға әленән-әле ҡаймаҡ, май, эремсек, ҡорот әҙерләп биреп ебәреп торам. Беҙ, башҡорттар, һурпаны ҡоротлап эсәбеҙ бит, шуға ла һау-сәләмәтбеҙ, күрәһең.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**2014 йылдың "Һөт иле" фестивалендә, БР Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, һөт һәм һөт аҙыҡтары етештереүсе 27 предприятие ҡатнашҡан. Быйылғы фестивалдең төп үҙенсәлеге - фестивалдә бары тик Башҡортостан етештереүселәренең генә ҡатнашыуы. Әлшәй, Иглин, Бөләбәй, Шаран районларынан дүрт фермер хужалығы үҙ тауарын сығарған. "Һөт йәрминкәһе", "Фермер баҙары" зоналарында 48 тонна-нан ашыу һөт ризығы, 5 тонна самаһы аҡ май, 2,5 тонна тирәһе ҡаты сыр, 1,2 тонна йомшаҡ сыр һәм сыр ризыҡтары, 2,3 тонна туңдырма, 12 мең банка ҡуйыртылған һөт, 8 тоннанан ашыу бейә һәм кәзә һөтөнән эшләнгән ҡымыҙ, 550 литр кәзә һөтө һатылған. Тамашаға 50 меңдән ашыу кеше килгән.**

Иҙел РӘХИМОВ.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Башҡортостан делегацияһы Ырымбурҙа башҡорт мәҙәниәте байрамында ҡатнашты. Тантана "Карауанһарай" Ырымбур өлкә башҡорттары ҡоролтайы" йәмәғәт хәрәкәтенең 25 йыллығына арналған. Делегация составына БР мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев, БР Милли музейы генераль директоры Ғәли Вәлиуллиин һәм башҡа мәҙәниәт һәм фән вәкилдәре инде. Башҡорт халҡы мәҙәниәтен, йолаларын байрамда Көйөргәҙе районы художество үҙешмәкәрлегенең 60-тан ашыу ҡатнашыусыһы күрһәтте.

✔Башҡорт дәүләт педагогия университетында лингвистиканың актуаль проблемаларына арналған Халыҡ-ара коллоквиум булып үтте. Быңдай сара Рәсәйҙә икенсе тапҡырға ғына үткәрелә. Тәүгеһенә лингвист-ғалимдар 2005 йылда Мәскәү ҡала педагогия университетында йыйылғайны. Форумда Германия, Швейцария, Болгария, Словения, Төркиә, Гана Республикаһы ғалимдары ҡатнашты.

✔2015 йылда Өфөлә уҙасаҡ ШОС һәм БРИКС саммиттарын үткәреүгә һәм әҙерләүгә көмәндә 500 волонтер йәлеп итеү күҙаллана. Ошо хаҡта хәбәр ителгәндән алып тәүге тәүлектә генә Өфөлә волонтер булырға 480 кеше ғариза биргән. Уларҙы уҡытыуға 2,5 миллион һумлап аҡса талап ителәсәк. Уҡытыу бер нисә этаптан торасаҡ. Волонтер сифатында теркәлеү өсөн 2014 йылдың 31 октябренә тиклем volunteer2015 сайтында анкета тултырырға кәрәк. (347) 266-01-50 һандары буйынса ҡыҙыу линия эшләй, унда волонтерҙарға бөтә кәрәкле мәғлүмәт биреләсәк. Башҡортостандың баш ҡалаһында йәшәгән 18 йәштән өлкәнерәк кешеләр волонтер була ала.

✔6 һәм 7 сентябрҙә баш ҡаланың бар районларында ла сираттағы йәшелсә һәм бал йәрминкәләре уҙасаҡ. Совет районында Йәштәр һарайы алдындағы майҙанда бал йәрминкәһе ойоштороласаҡ. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, гәзиттәге ауыл хужалығы йәрминкәләре Өфөлә 2 ноябргә тиклем дауам итәсәк. Уларҙа ауыл хужалығы тауарҙарын етештереүселәрҙең, республиканың фермер һәм ярҙамсы хужалыҡтарының ит һәм һөт ризыҡтары, йәшелсә, картуф, бал һәм башҡа ауыл хужалығы продукттары тәҡдим ителәсәк.

*✓ Мин үҙем ике тапҡыр автокредитҡа машина алдым. Ике осраҡта ла отолманым. Беренсенән, инфляция ярҙам итте. 13 процентлыҡ кредитты йылына 15-20 процентлыҡ инфляция "ашаны".*

ФИНАНС ӘЛИФБАҺЫ

**Кредиттар тураһындағы һөйләшеүҙе дауам итәбеҙ. Бөгөн автокредит һәм ипотека тураһында һүҙ алып барырбыҙ. Алдағы һандарҙың береһендә Башҡортостан Республикаһының Суд приставтары федераль хеҙмәте начальнигы Зариф Байғусҡаров, Башҡортостанда "кредитомания" күренешенең сәскә атыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып, "поручитель" булыуҙан тыйылырға кәңәш иткәйне. Тағы бер һөйләшеү барышында эшҡыуарҙар Фәнис Әлмөхәмәтов менән Даян Мөхәмәҙин да ошо темаға бәхәсләште. Кредит алыу-алмау мәсьәләһенә ҡағылышлы фекерҙәр йыйыуҙы дауам итәбеҙ. Заман талаптарынан сығып ҡарағанда, кредит алыу отошломо, юҡмы? Ошо һорау менән ауыл хужалығы фәндәре докторы, профессор Ҡадир Барый улы МӘҒӘФҮРОВҠА мөрәжәғәт иттек. Һүҙ - ҡунағыбыҙға:**



# КРЕДИТ ҺИНЕ ҺЫНАҒАНДА...

## һин килем һана...

Нимә ул кредит? Был һорауға ҡыҫҡа ғына итеп: кредит ул - банктың "кредит" тигән тауар етештереп, ҡулланыусыға һатыуы, тип яуап бирергә була. Быны һис кенә лә үтескә аҡса биреү, тип аңларға ярамай. Сөнки, үтестә - алған аҡсаны бер арттырыуһыҙ кире ҡайтарһалар, кредитта - алған сумманан күпкә артығыраҡ түләйҙәр. Әммә, нисек кенә булмаһын, кредиттан ҡурҡырға кәрәкмәй. Беҙҙән алдағы быуын ғүмере буйы аҡса йыйҙы: эш хаҡының бер өлөшөн тотона, бер өлөшөн, машина алырға тип, һандыҡ төбөнә һалып ҡуя ине улар. Илдә тауарҙарға ҡытлыҡ булыуы арҡаһында хәләл аҡсаһына машина алыусылар артыҡ күп тә булманы: күпселек ул аҡсаны тотона алмай, балаларына ҡалдырып, баҡыйлыҡҡа күсте. Атайыбыҙ мәрхүм дә беҙгә, балаларына, 5 мең тәңкә ҡалдырған. Ә хәҙер кемдең ғүмере буйы аҡса йыйып, ҡартайғас ҡына автомобиль алғыһы килһен? Йәштәргә, мәҫәлән, автомобиль 20-30 йылдан һуң түгел, тап бөгөн кәрәк. Торлаҡ тураһында әйтеп тә тормайым: элек ҡала ерендә эш урынынан торлаҡ бирерҙәренә ышанырға мөмкин булһа, бөгөн - үҙеңә генә ышанырға ҡала. Өйлө, "тимер атлы" булыу мөмкинлеген йәштәргә бөгөн фәҡәт кредит системаһы ғына бирә ала. Шуға ла бөтөн донъя кредитҡа йәшәй.

Совет осоронда илдә тауарҙар ҙа, инфляция ла булманы, аҡса ла үҙ ҡиммәтен юғалтмай ине. Бөгөн, ысынында, инфляция 15-20 процент (инфляция рәсми сығанаҡтарҙа ғына 7-8 процент тип күрһәтелә) булғанға күрә, аҡса йыйып барыуҙың файҙаһына ҡарағанда зыяны күберәк. Әйтәйек, һин 500 меңлек берәй машина алырға теләп, аҡса йыйырға булдың, ти. Ниәт - бер, ә ғәмәл икенсе нәмә: уйлап, һанап, ул-был итеп, аҡса йыя башлаған көнөңдә үк теге тауарыңдың хаҡы күтәреләсәк. Һөҙөмтәлә һин ул машинаның хаҡын ҡыуып та етә алмауың бар. Шуға, теләйһеңме, юҡмы, кредит системаһына инеп китергә мәжбүр булаһың инде.

Әлегә Рәсәйҙәге кредит системаһын камил, тип әйтеп булмай. Сит илдә ул яҡшыраҡ эшләй. Унда йәш кеше кредитҡа хатта юғары белем дә алырға мөмкин. Йүнле эшкә урынлашҡас, ул уҡыуы өсөн дә түләп бөтә, өҫтәүенә, машина, фатир ҙа алып ебәрә. Алға киткән илдәрҙә кредит түләүе беҙҙең илдәгегә ҡарағанда нимәһе менән еңел? Мәҫәлән, Америкала 10 процентҡа ипотека, уҡыу өсөн кредит, автокредит алып була. Ә Рәсәй кешеһе Рәсәйҙә кредитты уртаса 13 процентҡа ғына ала. Һөҙөмтәлә, ул банктан алған аҡсаны банкҡа 3 тапҡырға арттырып түләй. Шулай ҙа был сумманы 30 йылға һалғанда, өҫтәүенә, шул утыҙ йыл буйына торлаҡлы йәшәүеңде лә иҫәпкә алғанда, ул тиклем ҡурҡыныс та түгел һымаҡ.

Банктарға килгәндә, беҙҙең илдә бер-нисә генә ышаныслы банк бар. Ҡалғандары, сама менән әйткәндә, "йәш" әле. Шуға кредит алғанда мотлаҡ шул Рәсәйҙәге иң эре, иң оҙаҡ эшләүсе банкҡа ғына мөрәжәғәт итеү яҡшыраҡтыр, ҡалғандар менән кредит килешеүе төҙөрҙән алда ныҡлап уйларға кәрәктер, тип уйлайым. Мин үҙем, мәҫәлән, "Сбербанк" менән "Уралсиб"-ты ышаныслы һанайым. Әммә шуны ла билдәләргә кәрәк: был ойошмаларҙан кредит алыу, һайлап алыу талаптары юғары булғанғалыр, ҡыйынға төшә. Шулай ҙа, "автокредит" алғанда автомобиль залогка һалынғанға күрә, кредиттың был төрөн алыу күпкә еңел. Автомобилдең закладта ятыуы арҡаһында процентлар ҙа, ипотекаға ҡарағанда бер аҙ кәмей. "Автокредит" алғанда страховкаға ныҡ иғтибар итергә кәңәш бирер инем. Ни өсөн тигәндә, банктар автокредит биргән саҡта "КАСКО" страховкаһы ярҙамында аҡса эшләргә тырыша. Ошо хәйләгә эләкмәҫ өсөн бер генә кәңәште иҫтә тотоу ҙа етә: страховканы бары тик кредиттың суммаһына ғына яҙҙырырға мөмкин. Ул сағында машинаның хаҡына ҡушылған үҙеңдең аҡсаң өсөн страховка түләнмәй. Мәҫәлән, 500 меңлек "тимер ат" алыр өсөн үҙегеҙҙең 200 меңегеҙгә ҡушып, 300 меңлек "автокредит" йүнләһәгеҙ, 300 меңенә генә "КАСКО" яһағыҙ ҙа, вәссәләм. Мин үҙем ике тапҡыр автокредитҡа машина алдым. Ике осраҡта ла отолманым. Беренсенән, инфляция ярҙам итте. 13 процентлыҡ кредитты йылына 15-20 процентлыҡ инфляция "ашаны". Икенсенән, банкта минең 200 меңлек, 12 процентлыҡ депозитым (кешенең кредит биреүсе учреждениеға процент иҫәбенә килем алыу өсөн ниндәйҙер күләмдә аҡса һалыуы) бар ине. Ул йылына 12 процентҡа артҡас, миңә 1 процентын ғына түләргә ҡала. Инфляцияны ҡушһаң, миңә бөтөнләй уңайлы, хатта килемле эш килеп сыҡты.

Нисек кенә сәйер тойолмаһын, кредит биреү банкҡа ла килемле. Кредит алыуыма йыл ярым тирәһе ваҡыт үткәс, банк хеҙмәткәрҙәре иплән кенә миңә теге кредитымды ваҡытынан алдараҡ түләргә мөмкин икәнен әйтеп һалды. "Һеҙ мине иҫәр тип беләһегеҙме?" тип көләм. Теге хеҙмәткәр ҙә көләп ҡуйҙы. Мин кредитты өс йыл буйына йәйлап, "тәмләп кенә" түләнем.

Бөгөнгө йәштәргә бигерәк уңайлы заман килде: биш йылға кредит алһаң, сумманы түләп бөтөп барғанда ул сумма бик аҙ ғына һымаҡ тойоласаҡ. Сөнки, әлеге лә баяғы, инфляция күренеше арҡаһында, эш хаҡының суммаһы ла арта. Шулай булғас, кредиттың күпселек өлөшөн тиҙләтеп ҡайтарырға тырышырға ла кәрәкмәй.

Урамда: "Кредит малому бизнесу! Первые три месяца разрешается не возвращать основной долг" тип яҙып ҡуйылған реклама баннерын күргәнегеҙ бармы? "О, ҡайһылай игелекле банк икән!" тип уйлайһың был яҙыуҙы күргәс. Ә һанап ҡараһаң, нимә килеп сыға? Кредит алдың, ти, проценты ҡалған өлөшкә һалына. Һин бер йылға 120 мең һум кредит алдың икән, ти, тәүге айҙа - 120 меңгә процент түләйһең, икенсеһендә - 110 меңгә, өсөнсө айҙа - 100 меңгә, ун икенсе айҙа - 10 меңгә генә түләйһең. Шулай итеп, теге банк тәүге өс айҙа һиңә бурысыңды ҡайтармай торорға рөхсәт бирә. Банк һиңә өс ай буйына йөҙ егерме меңгә процент түләтә, тигән һүҙ. Бына һиңә - "игелек"! Хатта шуға тиклем барып етә (кредит ала башлаған кеше уны шундуҡ күрә): бурысты тәүге алты айҙа тулыһынса ҡайтарыуҙы тыялар, йәғни, мараторий һалалар. Тимәк, ундай килешеү буйынса һин сумманы ҡайтарып бирһәң, ҙур күләмдә штраф түләйһең. Кемгәлер аҡса бирһәң, һин көн-төн: "Был кеше аҡсаны килтереп кенә бирһен инде", - тип уйлайһың. Ә теге банк: "Һинең тәүге алты ай эсендә сумманы ҡайтарып бирергә хоҡуғың юҡ", - ти. Ни өсөн? Һин алдың да, килтереп тә бирҙең - тегеләр аҡса эшләп өлгөрмәне...

Хәҙерге олигархтар ҙа инфляция арҡаһында байыны. 1989-1990 йылдарҙа улар, үҙ бизнесын асыу маҡсаты менән унар меңдән миллионға тиклем кредит алды. Ябай халыҡ ашығып барманы: "100 меңде ҡасан түләп бөтөрмөн?" тип ҡурҡты. Ә кредитты алыусылар артабан ни булырын белгән, күрәһең. Оҙаҡламай гиперинфляция китте. Бер мәл эш хаҡы алғараҡ сыҡһа, иртәгеһенә - тауарҙарға хаҡтар "күккә осто". Шулай итеп, хаҡтар менән эш хаҡы ҡыуыша-ҡыуыша, 1993 йылда ябай хеҙмәткәрҙең уртаса эш хаҡы миллион һум булды ла ҡуйҙы. Йәғни, ҡасандыр бер кеше алған йөҙ меңлек кредит ябай хеҙмәткәрҙең айлыҡ эш хаҡының ундан бер өлөшө генә булып ҡалды. Бөгөн дә шулай "шытып сығырға" кәрәк, милләттәштәр!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ошо материалды ҡағыҙға теркәгән саҡта бүлмәгә бер түгел, биш эреле-ваҡлы кредит түләүсе шәп бер ағай килеп инде. Яҙманың башын күрҙе лә: "Дә-ә-ә, кредит алғанда ҡыуанаһың, аҙаҡ - тирләп-бешеп йүгерәһең инде", - тип, көләмһөрәп ҡуйҙы... Ҡадир Барый улы Мәғәфүровтың тос фекерҙәренә ҡушылып, бары шуны ғына өҫтәге килә: бар ерҙә лә сама кәрәктер, моғайын. Кредит алғанда ҡыуанған һымаҡ, уны "тәмләп", матурлап ҡайтарыу сараһын күреү хәйерлерәк.**

**Илгизәр БУЛАТОВ яҙып алды.**

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡурылдай

❖ 5 грамм үгәй инә үләнен эмаль һауытҡа һалып, өҫтөнә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ҡапҡасын ябып, 15 минутҡа ҡайнап ултырған һыулы һауытта төнәтегеҙ, һыуытығыҙ, һөҙөгөҙ. Килеп сыҡҡан күләмгә 200 мл-ға еткәнсе ҡайнар һыу өҫтәгеҙ, 1 ҡалаҡ бал ҡушығыҙ. Көнөнә 2-3 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсергә. Тын юлдары ауырыуҙары - трахеит, киҫкен һәм хроник ҡурылдай, үпкә шешкән ваҡытта йүткереүҙе яҡшы йомшарта, шешеүҙе бөтөрә, микробтарҙы юҡҡа сығара, тирләтә.

### Экзема

❖ Һарымһаҡ ҡушылған балды (1:1) экзема урындарға һөртөргә.

❖ Һыуланып торған экземанан 100 г. таҙа бензин менән 30 г. йод ҡатнашмаһы ҡотҡара. Ҡулланыр алдынан яҡшылап болғатып, йыуылған һәм ҡоротолған экземалы урынға мамыҡ менән һөртөргә. Сир үтһен өсөн 5-6 тапҡыр эшләү ҙә етә.

❖ Экзема менән яфаланыусыларға тағы бер нисә кәңәш. Спиртлы эсемлектәрҙе бөтөнләй ҡулланмаҫҡа. Организмдың әселеген күтәреп тороу кәрәк. Һыуыҡ һыу менән ҡойоноу, кер һабыны менән йыуыныу ҙа яҡшы һөҙөмтә бирә.

### Гайморит

❖ Гайморитты түбәндәге ысул менән дауаларға була. Туҡыманан 8х8 ҙурлығындағы 10 тоҡсай тегегеҙ, уларҙы эре тоҙ менән тултырып, тегегеҙ. Был тоҙҙо торбала йәки башҡа урында йылытып алырға була. Көн дауамында мөмкин тиклем был моҡсайҙар ярҙамында танауҙы йылытығыҙ. Ошо уҡ маҡсатта ҡарабойҙай ярмаһын ҡулланырға була. Ул йылыны оҙағыраҡ тота. Бының өсөн ҡарабойҙайҙы табала йылытып, моҡсайға һалырға.

❖ Танау ҡыуышлығын көнөнә 3-4 тапҡыр бал өҫтәлгән сөйәл үләне (чистотел) менән сайҡатырға. 2 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 ҡалаҡ бал өҫтәргә, термоста 1 сәғәт төнәтергә, һыуытырға. Уҫҡа алырға һәм тамаҡта әсеү барлыҡҡа килгәнсе, танауҙы сайҡатырға. Бик файҙалы дауа, 15-20 көн эсендә танау эсендәге патологик шештәр (полип) юҡҡа сыҡҡан осраҡтар ҙа булды. Төнәтмәне һыуытҡыста һаҡларға мөмкин.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ *Ә бит ата-бабаларыбыҙ был өлкәлә бик һаҡ эш иткән. Ир менән ҡатындың, әсәй менән атайҙың балалар һәм ситтәр белергә тейеш булмаған, икәү генә белер йәшерен серҙәре була. Һәр бала, ваҡыты еткәс, үҙе аса был серҙе.*



*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*



# ҠОРБАН БАЙРАМЫ

**Ураҙанан һуң 70 көн үткәс үткәрелгән Ҡорбан байрамы ла мосолман байрамдары араһында иң ҙурҙарынан иҫәпләнә. Байрамға мотлаҡ рәүештә ҡорбан итеп килтерелгән мал һуйыла.**

Ислам дине ҡағиҙәләре буйынса, ул ҡуш тояҡлы (һарыҡ, һыйыр йәки дөйә), сәләмәт, мөгөҙҙәре һәм тояҡтары бөтөн, бер йәштән оло булырға тейеш. Юғиһә, Аллаһы Тәғәлә ҡорбанды ҡабул итмәй, тигән инаныу бар. Йышыраҡ ҡорбан итеп килтерелгән мал орғасы була. Үҙенең хужалығында мал булмаған йәки үтә ярлылар ҡорбан малын йыйылышып, дөйөм аҡсаға һатып ала. Ҡорбанға мулла махсус доға уҡый, бының өсөн уға айырым түләү ҡаралған (аҡса йәки малдың тиреһе). Ҡорбан байрамында ҡорбан салған кеше үлгәс, теге донъяла билдәле бер өҫтөнлөктәргә эйә була, тигән ҡараш борондан йәшәгән. Был ҡорбан, мифик затҡа әүерелеп, уға сәстән нәҙек, ҡылыстан үткер Сират күперен үтергә ярҙам итәсәк, тип иҫәпләнгән. Ҡорбанды салған саҡта унын йөнөнә тотоноу йолаһы ошо ышаныу менән бәйле. Шулай ҙа ҙур гонаһтар эйәһе күпме генә ҡорбан салмаһын, ул уға ярҙам итә алмай, тип иҫәпләгән мосолмандар.

Ҡорбан малының һөйәктәрен балта менән сабырға, турарға, ташларға йәки эттәргә бирергә ярамай. Ҡорбан ите өс өлөшкә бүленә. Бер өлөшө - ҡорбан ашын ашатыуға тотонола, икенсе өлөшөн хәйер итеп таратырға кәрәк, өсөнсө өлөш ғаиләлә ҡала. Етеш йәшәгәндәр ҡорбан итен тулыһынса тарата.

Иттән тыш, байрам табынына ҡоймаҡ, башҡа ризыҡтар әҙерләнә. Өйҙә мотлаҡ таба еҫе сығарыла. Был еҫ, һауаға күтәрелеп, Аллаһ тарафынан шулай уҡ ҡорбан булараҡ ҡабул ителә, тигән инаныу бар. Ҡорбан байрамында хәйер таратыла. Көньяҡ-көнбайыш һәм Урал буйында йәшәгән башҡорттарҙа бойҙай ярмаһынан бутҡа; үҙәк райондарҙа бойҙай ярмаһын майҙа ҡыҙҙырып, ҡаймаҡ менән болғап бутҡа бешергәндәр, ул онтаҡ тип атала. Ҡаймаҡҡа, майға, балға болғанған талҡан да ҡунаҡ һыйы иҫәпләнгән.

Мосолмандар Мәүлит байрамын, Ғәшүрә байрамын да билдәләгән, әммә улар ундай массалы форма алмаған. Ә бына аят ашы йышыраҡ үткәрелә. Мәрхүмдәрҙе иҫкә алыу, берәйһенең иҫәнлеген теләп салынған ҡорбан, яңы өй туйлау, берәй ваҡиға уңышлы тамамланһын өсөн башҡарылған был йола мәлендә доғалар уҡып, хәйер таратыла, байрамса табын әҙерләнә. Аят ашына яҡын туғандар, ауылдың өлкән кешеләре, абруйлы шәхестәр, шулай уҡ дин әһелдәре саҡырыла.

Ислам дине ҡабул ителгәнгә тиклем һәм унан һуңғы осорҙа башҡорттар араһында үткәрелгән йолаларҙың маҡсаты бер - ҡорбан салып, доғалар уҡып үткәрелгән саралар барыһы ла муллыҡ, именлек һорауға, тәбиғәт көстәрен, эпидемияларҙы, һуғыштарҙы туҡтатыуға ҡайтып ҡала.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА*

# БАЛАНЫ БИШЕКТӘ ТЫЙ...

## буй еткәс, һуң булыр



**"Киске Өфө" гәзитенең былтырғы һандарының береһендә "Тыйырғамы баланы, әллә иркенә ҡуйырғамы?" тигән мәҡәлә донъя күргәйне. Унда бала тәрбиәләүгә ҡарата төрлө ҡараштар белдерелгәйне.**

Ә нимә эшләп бөгөн, баланы тыйырғамы, юҡмы, тигән бәхәс ҡуба һуң әле? Халҡыбыҙ тәрбиәһендә тыйыу элек-электән булған һәм был бер ниндәй ризаһыҙлыҡ тыуҙырмаған бит. Элекке быуындың тәрбиәгә ҡағылышлы, оло әһәмиәткә эйә булған ҡайһы бер мәҡәл, әйтемдәре лә ошо уҡ ҡағиҙәгә арналған. Мәҫәлән, "Сабыйҙы бишектән өйрәт", "Баланы бишектә үк тый, буй еткәс, тыйырмын тимә", "Баланан ҡәҙер күрәм тиһәң, дөрөҫ тәрбиәлә", "Тал сағында бөкмәһәң, таяҡ булғас, бөгә алмаҫһың", "Баланы йәштән тый, йәштән эшкә бөк", "Ҡыҙ баланды ҡырҡ урындан тый" кеүегерәк өйрәтеүҙәрҙең ни тиклем дә мәғәнәле булыуын күрәһең. Әлбиттә, "тыйыу" тигәс тә, берәү ҙә балаһын нимәнәндер мәхрүм итеп, ҡәтғи сикләп ултырмаған. Бары тик үҙ тәжрибәһенә таянып, сама белеп, бала күңеленә барып етерҙәй тос һүҙҙәр һайлап ҡына, кинәйәләп тә, ишаралап та ярамағандар тураһында әйтеп барған. Шул арҡала тәрбиә ҡанундарын кесе йәштән күңеленә һеңдергән әҙәпле лә, тәрбиәле лә балалар үҫкән.

Донъялағы бар халыҡтарҙың да ниндәйҙер күренештәргә, хәл-ваҡиғаларға, кешелек сифаттарына ҡарата тыйыуы, үҙ ғөрөф-ғәҙәте бар. Быларҙың барыһы ла кешене матур ҡылыҡтарға, изге ғәмәлдәргә өндәгән, алама ғәҙәттәрҙән ҡурсыған. Ошондай мөхиттә үҫкән балалар иһә тәртиплерәк булған, олоно - оло, кесене кесе итә белгән, ишара, кинәйәләр менән тәрбиәләүҙе аңлап үҫкән. Халыҡ педагогикаһы тип аталған был ғилем кешелек донъяһы барлыҡҡа килгәндә үк тыуған, сөнки йәш быуынды тәрбиәләүгә элек-электән ҙур әһәмиәт бирелгән. Үкенескә күрә, һуңғы йылдарҙа мәғариф өлкәһенә килеп ингән үҙгәрештәр еле уҡытыу һәм тәрбиә биреүҙә бер системаға һалынған принциптарҙы ҡыҫырыҡлай, улар урынына яңы стандарттар, сит ил тәжрибәһен индерә. Патриотик, эстетик, әхлаҡи һәм хеҙмәт тәрбиәһе биргән күп кенә дәрестәр программанан алып ташланды, түңәрәктәр эшләүҙән туҡтаны. Нәҡ ошо сәбәптәр арҡаһында үҙ иленең тарихын, арҙаҡлы шәхестәрен, дәүләт символдарын, уның рухи ҡиммәттәрен белмәгән, хеҙмәт яратмаған вайымһыҙ быуын үҫә. Ә бит хеҙмәткә ҡарата ыңғай ҡараш ҡасандыр мәктәп эскәмйәһендә үк тәрбиәләнде. Үҙе уҡыған бүлмәһен таҙа, матур тотоу ҙа шул класта уҡыған балаларҙың бурысы ине. Был үҙенә күрә хеҙмәткә өйрәтеүҙең бәләкәй генә бер өлөшө булып торҙо. Сиратлап дежур итеп, иҙән йыуып ҡайтҡан балаларға өйҙә лә һүҙ әйтеүсе булманы. Бөгөн быларҙың нәҡ киреһен күреүебеҙ хатта ғәжәпләндермәй ҙә. Балаларыбыҙға ҡарап, йәмғиәтебеҙҙең ниндәй булыуын күҙ алдына килтерһәк, уйлыға уй булырҙай мәғәнә бар был күренештәрҙә.

Мәғариф системаһында халҡыбыҙ традицияларына, ғөрөф-ғәҙәттәренә нигеҙләнгән, быға тиклем эшләп килгән аныҡ ҡына тәрбиә алымдарының юҡҡа сығыуы һөҙөмтәһендә һәр кем бала тәрбиәләү буйынса фекерен башҡаларға тағып маташа. Шунлыҡтан, берәүҙәр халҡыбыҙҙың тәрбиә ысулдарына таянырға тырышҡанда, икенселәре иһә бала күңеленә бер ниндәй рухи орлоҡтар һалмай ғына, үҙ яйына ҡуйып, тыйыуһыҙ үҫтерә. Шуныһы үкенесле, мәғариф системаһының тәрбиә өлкәһендә ҡулланған бөгөнгө эксперименттар емешен күпмелер йылдар үткәс кенә татыясаҡбыҙ.

Тыйыу, тигәндә, беҙҙең халыҡта ла, башҡа халыҡтарҙа ла бөтөнләй телгә алынмай торған, сер булып йәшеренгән ҡағиҙәләр ҙә бар. Шундай серҙәр ҙә сер булыуҙан туҡтап бара хәҙер. Мәҫәлән, сабыйҙарҙың нисек барлыҡҡа килеүен балалар баҡсаһында уҡ аңлатырға тейешбеҙ, тигән мәсьәләне күтәрә кемдәрҙер. Ә бит ата-бабаларыбыҙ был өлкәлә бик һаҡ эш иткән. Ир менән ҡатындың, әсәй менән атайҙың балалар һәм ситтәр белергә тейеш булмаған, икәү генә белер йәшерен серҙәре була. Һәр бала, ваҡыты еткәс, үҙе аса был серҙе - ул тәбиғәт законы. Өйләнешкән йәштәрҙең береһе лә баланы йылға буйынан эҙләп йөрөмәй, йәиһә ҡауҙы килтергәнен көтөп ултырмай бит. Тоҡом ҡалдырыу, нәҫел үрсетеү инстинкты кеше аңына тыуғанда уҡ тәбиғәт тарафынан һалынған, бында күрһәтеп, өйрәтеп биреүҙең кәрәге юҡ.

Тыйылған емеште тәмләп ҡарау телләге күптәргә хас сифат, тип белдереүселәр ҙә бар. Һуңғы фекергә саҡ ҡына икенсе төрлөрәк ҡарағанда, ул отошлораҡ булмаҫ инеме икән? Мәҫәлән, ғаилә ҡороу серҙәре, ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәттәрҙең барыһына ла шаран-яран асыҡ булыуы һөҙөмтәһендә, күптән билдәле булған серҙәр ҡыҙыҡһыныу, ихтирам уятмауы ла бар бит әле. Һуңғы йылдарҙа бер енесле парҙарҙың күбәйеүе лә нәҡ ошоға килеп төртөлә түгелме? Ваҡыты етмәйенсә, ололар тормошо менән ҡыҙыҡһыныу, асырға ярамаған ишекте асып ҡарау баланың нығынып бөтмәгән психикаһын ҡаҡшатып ҡына ҡалмай, ә һаман да ниндәйҙер тыйыуҙарҙы тәмләп ҡарарға, табуға ҡаршы барырға ҡоторта. Бер ҡулына һыра шешәһе, икенсеһенә тәмәке тотҡан ауырлы ҡатындарҙың нисәлер йылдан һуң, улымды йәиһә ҡыҙымды дауаларға ярҙам итегеҙ, тигән иғландары ла ваҡытында ниндәйҙер тыйыуҙарҙы һанға һуҡмай, аша атлап үтеү һөҙөмтәһе ул. Шуға күрә лә үҙ халҡыбыҙҙың борондан килгән тәрбиә мәсьәләһенең, тыйыуҙарының ни тиклем дә оло әһәмиәткә эйә булыуын аңлау мөһим дә инде.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

*ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ*

# ҠАРАМА МЕНӘН ЙЫЛА...

## икеһе ике ағас!

**"Киске Өфө" гәзитенең быйылғы 30-сы һанында Илгиз Ишбулатовтың "Клен башҡортса нисек була?" тигән мәҡәләһен уҡып сыҡҡас, ҡайһы бер ағастар исемдәрендә хата китеүе тураһында белдерергә булдым.**

Автор ағастарҙың әҙәби телдәге атамаһы менән бергә уларҙың диалекттарҙа нисек атап йөрөтөлөүен дә билдәләй. Шул ерлектә йыла ағасын ҡараманың диалекттағы бер варианты тип яңылыш аңлап була. Унан бигерәк, ошо ағастарҙың рус теленә тәржемәһе лә бер үк һүҙ ярҙамында - "вяз" тип бирелгән. Ҡарама русса - "вяз", ә йыла - "ильм" була. Ҡарама ағасы ла , йыла ла беҙҙең тыуған яҡта - Күгәрсен районында күпләп үҫкәнгә күрә, беҙ, шул яҡ кешеләре, уларҙың айырмаһын яҡшы beләбеҙ. Ҡарама, ғәҙәттә, йылға буйҙарында үҫә, асыҡ урынды ярата - ботаҡтары тарбаҡ-тарбаҡ була. Йыла бөтөнләй айырым ағас. Ул урманда үҫә, шуға уның олоно ла төп-төҙ була. Йыланы мин үҙем утынға ҡырҡҡаным булды. Тағы, уның ҡайырыһы, йүкә ҡайырыһы һымаҡ, еңел генә һыҙырыла. Уның ҡабығын кәзә-һарыҡ шул хәтлем яратып ашай. Ҡараманың ҡайырыһын улай еңел генә һыҙырырмын тимә. Ҡарама, һығылып-бөгөлөп үҫкәс, уны утынға ярыуы ла ҡыйын. Ә йыла саған һымаҡ еңел генә ярыла. Ҡатылыҡ буйынса ла йыла ҡарамаға ҡарағанда йомшағыраҡ. Беҙ уны киҫеп, бала саҡта саңғы яһай торғайныҡ. Саңғы өсөн иң яҡшы ағас йыла иҫәпләнә ине. Әлбиттә, уларҙың яҡынлыҡтары ла бар - уларҙың япраҡтары бер-береһенә аҙыраҡ оҡшаш.

**Марат ҠОЛШӘРИПОВ,**
**тарих фәндәре докторы, профессор.**

✓ *Революциянан һуң ерҙәр тулыһынса тартып алына. Ә ер башҡорттарҙы тотоп тороусы төп фактор, терәк була. Шуға күрә лә ергә бәйлелек бөтөү менән бергә, тел, милләт тә онотола башлай. Ассимиляция, маңҡортлоҡ көсәйә.*

*ХӘҠИҠӘТ ШУЛАЙ*

**Архивариус итеп "айыҡ аҡыллы, бер ниндәй шик тыуҙырмаған, үҙен насар яҡтан күрһәтмәгән" кешеләрҙе тәғәйенләргә бойороҡ бирә ошо вазифаны индереүсе Рәсәй императоры Петр I. Документтарҙы, рәсми ҡағыҙҙарҙы һаҡлау яуаплы эш, уны һәр кем үтәй алмай, тип иҫәпләй ул. Шуға күрә лә, архив эшенә лә, был эште алып барыусыға ла талаптар ҡаты була. Ысынлап та, архивтар - тарихты өйрәнеүгә ярҙамсы булған төп сығанаҡ булып тора. Улар тарихтың яҙма йәки матди сағылышын беҙгә, киләсәк быуындарға еткерә. Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Үҙәк тарих архивы иһә, беҙҙең ерлеккә, халҡыбыҙға бәйле баһалап бөткөһөҙ хазинаны үҙенең бинаһы диуарҙары эсендә һаҡлай. Республиканың төп тарих һаҡсыһы август айында үҙенең 95 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Ошо уңай менән архив хеҙмәткәре Зөфәр Ғәбит улы ФӘТИӘТУЛЛИН ойошманың тарихы, әһәмиәте, бөгөнгө көндәге эшмәкәрлеге менән таныштырып китәсәк.**

# ҮҘӘК АРХИВ...

## боронғолоҡ һағында



### Байҡау

Документтар эшен алып барыу Башҡортостан Рус дәүләтенә ҡушылған дәүерҙә үк башлана. Ул рәсми властар тарафынан башҡарыла, был ролде урындағы хөкүмәт үтәй. Тәүҙә документтар туплау "Уфимская приказная изба"ның вәкәләттәрендә булһа, һуңынан был эште "Уфимская провинциальная канцелярия" алып бара. Был ике ойошмаға ҡараған документтар барыһы ла үткән быуаттың 50-се йылдарына тиклем Өфөлә һаҡлана. Ләкин 1950 йылда бөтөн боронғо документтарҙы Мәскәүгә күсереү буйынса ҡарар ҡабул ителә һәм ошо ике боронғо фонд Мәскәүгә ебәрелә. Әлеге ваҡытта ул тотошлай Мәскәүҙә һаҡлана, шуға күрә лә беҙҙә булған иң тәүге документтар 1740 йыл менән даталана. Улар бер нисә бәрәмек кенә, булғандары ла рәсми ҡағыҙҙар, сенаттың, хөкүмәттең указдары.

Революцияға тиклем Башҡортостанда үҙәкләштерелгән архив системаһы булмай. Һәр бер ойошма документтарҙы, рәсми ҡағыҙҙарҙы үҙҙәрендә һаҡлай. 1917 йылдағы революциянан һуң Ленин үҙәкләштерелгән архив системаһы төҙөү буйынса декретҡа ҡул ҡуя. Ләкин быны тиҙ генә тормошҡа ашырып булмай. Илдә барған граждандар һуғышы архивтарҙы бер үҙәккә тупларға мөмкинселек бирмәй. Һуғыштың үҙәге булған Өфө ҡалаһы бер-бер артлы йә аҡтар, йә ҡыҙылдар ҡулына күсә. Бары 1919 йылдың сентябрендә генә декрет ҡарарын үтәргә форсат тыуа. Августа Мәскәүҙә Өфө ҡалаһында архив төҙөү буйынса кәңәшмә үткәрелә һәм был эште тормошҡа ашырыу өсөн Гинзбург-Кольцов исемле кеше ебәрелә.

Архивты туплау тәүге осорҙа бик ауыр бара, хатта архивты тупларлыҡ бүлмә лә булмай. Был эш өсөн шәхси фатир бүленә, Гинзбург-Кольцов губернаторҙың канцелярияһында секретарь булып эшләгән Еникеев менән бергәләп документтарҙы йыйыу, туплау эшен башлап ебәрә. Төнгө ҡарауылсыны ла һанағанда, 6 кеше архив штатында иҫәптә тора. Эштең күләме күп, ә эшсе ҡулдар етешмәүенә ҡарамаҫтан, улар Өфө буйлап йөрөй, ойошмаларҙың архивтарын асыҡлай, иҫәпләй, ундағы документтар юғалмаһын өсөн уларҙы бикләп ҡуя. Шулай уҡ улар бер юлы картотека тултырыу эшен дә алып баралар.

Ҡыйынлыҡтар күп була. Үрҙә телгә алынғандарынан тыш, тағы ла шуныһы эште ҡатмарлаштыра: ул ваҡытта Өфөлә бөгөнгө көндәге кеүек йылытыу системаһы булмай. Яғыулыҡ урынына башлыса утын ҡулланыла. Ләкин һуғыш шарттарында утын менән тәьмин итеү бик насар ҡуйыла. Шуға күрә лә янған бар материалдар яғыуға китә. Ябай халыҡ ҡайҙалыр ҡағыҙ бар икәнен белһә, уны үҙләштерергә ашыға. Баҙарҙа ла ҡағыҙға ҙур һорау була. Ә төрлө ойошмаларҙың архивтарында был "яғыулыҡ" етерлек була. Шуға күрә, ойошмаларҙағы архивтарҙың бер өлөшө ошо арҡала юҡҡа сыға.

Архивтарҙың эҙһеҙ юғалыуының тағы бер ҙур сәбәбе булып Колчактың эшмәкәрлеге тора. Аҡ ғәскәр командиры Өфөнән сигенгән ваҡытта һалдаттарына ҡайһы бер ойошмаларҙың архивтарын алып сығырға бойороҡ бирә. Тарихсылар фаразы буйынса, 48 ойошманың архивы аҡтар менән китә. Һуңынан уларҙың бер өлөшө кире ҡайтарыла. Шулай ҙа 25 ойошманың архивы тулыһынса юғала. Өфө губернаһы тарихына бәйле ҡайһы бер факттар беҙгә бөтөнләй билдәле булмауының сәбәбе ошо. Мәҫәлән, Дворяндар собраниеһының документтары юҡ. Шулай уҡ аҡтар Дәүләт банкының документтарын махсус вагонға тейәп, бер нисә хеҙмәткәрҙе ошо вагондарға бикләп, пломба һалып, Себергә оҙата. Шулай итеп Дәүләт банкы архивы ла юғала. Ләкин күп кенә архивтар юғалыуына ҡарамаҫтан, бөгөнгө көндә беҙҙә бик ҡиммәтле тарихи сығанаҡтар, баһалап бөткөһөҙ документтар һаҡланып ҡалған.

Архивты туплау тәүге осорҙа ныҡ ҡыйынға төшә, һуңынан эш яйға һалына, штат арта, 1922 йылда архивҡа әлеге Карл Маркс урамында урынлашҡан элекке Земствоның бер бинаһы бирелә. 50-се йылдарҙа архивҡа ҡушып тағы бер бина төҙөлә. 90-сы йылдарҙа күпләп ойошмалар ябыла башлағас, йәнә урын етмәй башлай һәм Черниковкала урынлашҡан "Башпотребсоюз"дың складтарның бер өлөшө архивҡа өҫтәп бирелә.

### Архивтың әһәмиәте

Архивтарҙың әһәмиәте, һис шикһеҙ, ҙур. Боронғоно белмәй тороп, алға барып булмай, тип, халыҡ бушҡа әйтмәгән бит. Беҙҙә ана шул боронғоноң комментарийҙар яҙылмаған тура сығанаҡтары ята. Етмәһә, архив кешегә ғибрәт алыу өсөн бик яҡшы урын булып тора. Мәҫәлән, әлеге ваҡытта Рәсәйҙә федерализм ҡағыҙҙа ғына тороп ҡалды, ил ҡабаттан власть вертикален нығытып, ышаныслы рәүештә унитаризмға атлай. Ә бит архив документтарында сағылыш тапҡан тарих бындай хәлдең насар тамамланыуын бәйән итә. Илебеҙ ошондай уҡ юлды 1917 йылға тиклем үтә. Һуңынан Советтар Союзының тарҡалыуы нигеҙендә лә ошо сәбәптәр ята. СССР ҡағыҙҙа ғына федератив булып, ысынында унитар ҡоролошло дәүләт була. Ни өсөн шундай революция булғанын, дәүләт ҡоролошо, дәүләт тарҡалыуын өйрәнеп, бөгөнгө власть етәкселәре ошонан һабаҡ алырға тейеш, минеңсә.

Шулай уҡ халҡыбыҙ өсөн дә һабаҡ алырлыҡ мәғлүмәт бихисап архивта. Мәҫәлән, башҡорттар революцияға тиклем Рәсәйҙә аҫабалыҡ хоҡуғын һаҡлап ҡалған берҙән-бер халыҡ була. Ләкин революциянан һуң ерҙәр тулыһынса тартып алына. Ә ер башҡорттарҙы тотоп тороусы төп фактор, терәк була. Шуға күрә лә ергә бәйлелек бөтөү менән бергә, тел, хатта милләт тә онотола башлай. Ассимиляция, маңҡортлоҡ көсәйә.

### Башҡорттарға бәйле сығанаҡтар

Башҡорт халҡына бәйле документтар архивтың бөтөн фондтарында ла осрай. Бигерәк тә ер мәсьәләһе менән бәйле документтар күп. Ниндәйерәк йүнәлештә һуң улар? Башҡорттар йәшәгән ерҙәргә башҡа милләттәр күсеп, күсерелеп килә башлай. Улар башҡорттарҙың аҫаба ерҙәрен йә һатып, йә арендаға, йә тартып алалар. Ошо сәбәпле башҡорттар үҙ ерҙәрен ҡабаттан ҡайтарыу өсөн бәхәсләшергә, судлашырға мәжбүр була. Йыш ҡына ҡуртымға бирелгән ерҙәр буйынса судтар үтеүен күрергә була. Был, ғәҙәттә, килешеүгә ҡул ҡуйған ике яҡтың берәүһенең алдан ярашылған шарттарҙы боҙоуы арҡаһында килеп сыға.

Шулай уҡ хәрби хеҙмәткә ҡағылышлы документтар күп. 1798-1865 йылдарҙа кантон системаһы ҡоролошо булған, башҡорттарҙың бөтә ир халҡы хәрби хеҙмәткә барырға тейеш, тип иҫәпләнгән. Башҡорттар йыл һайын Ырымбур линияһын һаҡларға команда ебәрә, ул командалар даими алышынып тора. Хәрби кешеләр һәр ваҡыт кәрәк булғанға күрә, халыҡтың һәр береһе иҫәптә тора. Беҙҙең көнгә ошо командаларҙың, кемдең ҡасан, ҡайҙа хеҙмәт иткәнен, нимә менән наградланғанын күрһәткән формуляр исемлектәр һаҡланған. Офицерҙар хаҡында исемлек тулыраҡ бирелгән, уларҙың ғаилә хәле лә күрһәтелә. Рядовойҙар исемлеге уларҙың исем-шәрифен телгә алыу менән генә сикләнә.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ яҙып алды.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

## БАШҠОРТТАР

### Ғаилә көнкүреше һәм халыҡ байрамдары

Башҡорттарҙа, барлыҡ тикшеренеүселәр уртаҡ фекергә килеүенсә, ҡәтғи экзогамия (бер ырыу эсендә үҙ-ара өйләнешеүҙе тыйған йола) йәшәгән. XIX быуат һуңында ул барлыҡ башҡорттарҙа ла күҙәтелһә, XX быуат башында айырым урындарҙа ғына һаҡлана. Экзогамия шарттарында башҡорттарҙа эндогамия, йәғни башҡорт башҡортҡа ғына өйләнергә тейеш тигән талап булғанмы? Әлбиттә, башҡорт егеттәре нигеҙҙә башҡорт ҡыҙҙарына өйләнгән, әммә эндогамия (бер ҡәбилә эсендә өйләнешеү) мотлаҡ шарт булмаған. Ҡаҙаҡ далаларына барымта ваҡытында уларҙың ҡатындарын үҙҙәренә алып ҡайтыуҙар ҙа билдәле. Ҡаҙан батшалығы ҡолатылып, башҡорт иленә татарҙарҙың миграцияһы көсәйгәс, улар менән туғанлашыу киткән. Башҡорттарҙың татарҙар менән ҡатышыуының йоғонтоһо ни тиклем ҙур булыуын 1736 йылдың 11 февралендә башҡорттар өсөн Ҡаҙан татарҙары менән ғариза һәм Ҡаҙан губернаторының рөхсәтенән тыш никахлашыуҙы тыйыусы указ ҡабул ителеүе лә раҫлай. Бындай никахҡа рөхсәт өсөн һәр туйҙан - бер, рөхсәтһеҙ өйләнеүсенән өс ат алынған, ә икенсе тапҡыр ғәйепләнеүсе, йәғни указды ике тапҡыр боҙоусы бөтөнләй илдән һөрөлгән. XX быуат башында Башҡортостандың сигендә йәшәүселәр күрше татарҙар, мишәрҙәр, типтәрҙәр менән никахлаша башлай.

Ҡалым шарттары тураһында һөйләшеү табын артында уҙа. Бер нисә көндән кейәү ата-әсәһе менән кәләш йортона бүләктәр алып бара. Көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында кәләш өсөн бүләкте кейәүҙең туғандарынан йыялар. Бер малай һыбай йөрөп сыға һәм аҡса, төрлө ептәр, яулыҡ йыя, уларҙы бер һайғауға бәйләй, һуңынан кейәүгә тапшыра. Кейәүҙең әсәһе туған-тыумасаһын, таныш ҡатын-ҡыҙҙарҙы сәйгә саҡыра; табынға һараүыс (**һүрәт**), төрлө ептәр, туҡыма һ.б.



килтерәләр. Ижап-ҡабулға - кейәүҙең тәүге тапҡыр кәләш эргәһенә килеүенә һәм мулланың никах килешеүе уҡыуына ике көн ҡала кәләштең атаһы 10-20 нәҫел-нәсәбен саҡырып, ҡунаҡтар килеүе хаҡында хәбәр итә һәм уларҙы ҡабул итеүгә әҙерләнергә ҡуша. Ризалыҡ алғас, сапҡынсы артынан кейәүҙе, уның ата-әсәһен һәм туғандарын ҡунаҡҡа саҡыра. Сапҡын кейәүҙең атаһы яғынан алдан уҡ һөйләшеп килешенгән ат - туйлыҡ алып ҡайта. Ҡатайҙарҙа кейәүҙең атаһы туйлыҡты (ат йәки һарыҡ) үҙе алып килә. Кейәү яғынан, әсәһенән йәки үлгән әсәһен алмаштырыусы яҡын туғанынан тыш, ҡатын-ҡыҙҙарҙан берәү ҙә туйға йөрөмәй; шуға күрә ата-әсә, ғәҙәттә, арбала йәки санала бара, башҡалар һыбай сыға. Көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында туй каруанын егеттәр һыбайлы ҡаршылай һәм ғәҙәти сәмләмләшеүҙән һуң ҡунаҡтарҙың баш кейемдәрен тартып алырға тырыша. Әгәр баш кейемдәрен эләктерһәләр, ауылға ҡарай сабалар. Барлыҡ ҡунаҡтар ҙа төп йортта туҡтала.

**✓ Дизраэлиҙың: "Әгәр яҡшы китап уҡығым килһә, мин уны үҙем яҙам...", - тигән ҡанатлы һүҙе бар. Бында ла шулай: кемдер йәмғиәттә берәй эшләнеп бөтөлмәгән урын күреп ҡала ла, уны тултырырға тырыша.**



# БАШҠОРТ заман ҡуласаһының

**Бер йәнһүрәттә йәнлектәр, самолеттары боҙолоп, утрауға ултырырға мәжбүр була. Самолет менән идара итеүсе пингвиндар башлығы барыһына ла эш ҡушырға тотона. "Кем һине командир итеп ҡуйҙы әле?" тип, йәш арыҫлан пингвиндың бойороғон үтәүҙән баш тарта. Ә командир, иҫе китмәй генә: "Улайһа, әйҙә һин командир бул - самолетты йүнәтеүҙе үҙең ойоштор", - ти. Арыҫлан баҙап ҡала...**
**Был өҙөк ирекһеҙҙән тормошта йыш ҡабатланған бер күренеште - лидерҙар һәм уларҙың дәғүәселәре араһындағы көрәште хәтерләтте. Бөгөнгө һөйләшеү ҙә тап ошо темаға арналған. Башҡорт йәштәре араһында бөгөнгө заман бабичтары, вәлидиҙәре, салауаттары бармы? Йәштәрҙе берләштерер лидер ниндәй сифаттарға, ниндәй белемгә эйә булырға тейеш? Ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап табыу маҡсатында редакциябыҙға әле күптән түгел Силәбе өлкәһенең Башҡорт йәштәре иттифағы уҙғарған "Йәштәр йыйыны - 2014" төбәк-ара лидерҙар форумында ҡатнашыу бәхетенә эйә булған шағир, "Ҡош юлы", "Минең Рәми" кеүек проекттарҙы ойоштороусыларҙың береһе, "Ватандаш" журналының баш мөхәррире Азамат ЮЛДАШБАЕВты, "Башҡорт асыҡ КВН лигаһы" төбәк-ара йәмғиәте идараһы рәйесе урынбаҫары Алина ИМАНҒОЛОВАны һәм "Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларында белем алыусы башҡорт студенттары һәм аспиранттары берлеге" рәйесе урынбаҫары, Мәскәү дәүләт юғары иҡтисад мәктәбе фәнни-тикшеренеүҙәр университетының 4-се курсын тамамлаусы Фатима ЯНБАЕВАны ҡунаҡҡа саҡырҙыҡ.**

**▸ Тәүге һорау Азамат Рәмил улына тәғәйенләнә. Һеҙгә, урта быуын вәкиленә, йәштәр менән бер тулҡында йөҙөү күңелһеҙ түгелме? Ни тиһәң дә, йәштәрҙе урта быуын да, олораҡ быуын да һәр саҡ тәнҡит утына тота бит?**

**А. ЮЛДАШБАЕВ:** Мин "быуынһыҙ" быуын вәкиле - заман тап беҙҙең быуындың "умыртҡаһы" тапҡырынан һынды. Яҙмышымдың бер этабында, анығыраҡ әйткәндә, Яҙыусылар Союзы менән бәйле ваҡиғаларҙан һуң, ниндәйҙер ғилләә мине йәштәр араһына алып инеп бырғаны. Һәм... Мин уларҙы үҙем өсөн бөтөнләй башҡа йәһәттән астым. Иң мөһиме, күп мәсьәләләр буйынса улар менән бер "тулҡында" булыуымды аңланым. Беләһегеҙме, бөгөнгө йәштәр бөтөнләй башҡаса: улар беҙҙең кеүек "ике яҡлы стандарт"тар заманында, урынына-ваҡытына ҡарап йәтешле һүҙҙәр һөйләргә яраҡлашып үҫмәгән. Йәштәрҙә тар күңеллелек юҡ. Улар шул тиклем ихлас: арҡаға "бысаҡ ҡаҙамай", һине артыңдан яманлап, һүҙ һөйләп йөрөмәй, уйлағандарын күҙгә ҡарап, тура әйтә ала, бер-береһендә конкурент күрмәй. Күбеһе сәләмәт тормош яҡлы, бөтә саралар ҙа айныҡ форматта үткәрелә. Йәштәрҙең аңлы булыуына, әүҙемлегенә, дәртенә лә һоҡланам. Мин үҙемдең эргәмдәге йәштәр тураһында ғына әйтмәйем, райондарҙа, ҡалаларҙа ундайҙар хәҙер бик күп. Әле бына Силәбелә үткән йыйында барыһының да бөгөнгө көн талаптарына ярашлы асыҡтан-асыҡ эшлекле һөйләшеүгә, ҡыйыу аралашырға, танышырға тырышыуына, рәхәтләнеп ял итеүенә тамаша ҡылғанда ошо төркөмдә беҙҙең быуын кешеләренең, минең дуҫтарымдың булмауына үкенеп ҡуйҙым. Һәм, ғөмүмән, бөгөнгө көндә беҙҙең милли ижтимағи хәрәкәттә бындай шарттарҙа, сиктәрҙә конструктив һөйләшеүҙәр бик-бик һирәк. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әйткәнем дә бар: беҙ, ғәҙәттә, нимәгә генә тотонһаҡ та, һабантуй килә лә сыға - йырбейеү, уйын-көлкө, спорт ярыштары һ.б. Икенсе яҡтан, бындай осрашыуҙар һәр кемгә асылырға, үҫергә, тәүәккәлләргә ярҙам итә. Мәҫәлән, оялсан ғына бер ҡыҙҙың, барлыҡҡа килгән күтәренке рух мөхитендә ҡыйыуланып, түңәрәк эсенә инеп, бейеп китеүен күреп тә йыуандым. Ана шул һылыу һымаҡ, башҡорт йәштәре лә заман ҡуласаһының уртаһына инһен, тип теләп торҙом. Бөгөн беҙ донъяны үҙгәртә алмайбыҙ. Шуға күрә үҙебеҙҙе донъяуи талаптарға яраҡлаштырырға тейешбеҙ. Япондар, ҡытайҙар, ғәрәптәр кеүек - рухи тамырҙарыбыҙға балта сапмай ғына. Бөгөн йәштәргә тап шундай өмөттәр менән бағам мин.

**▸ Йәштәрҙең төрлө йәмәғәт ойошмаларына берләшеүе ни өсөн кәрәк, тип уйлайһығыҙ? Һуңғы ваҡытта барлыҡҡа килгән ойошмаларҙың төп маҡсаты нимәлә булырға тейеш? Башҡорт йәштәре берләшеүенең төп асылы нимәгә ҡайтып ҡала?**

**Ф. ЯНБАЕВА:** Һәр кемдең, айырыуса йәш кешенең, үҙе йәшәгән заманға ниндәй булһа ла яңылыҡ, үҙе килешмәгән теге йәки был хәл-күренешкә үҙгәреш индергеһе килә. Йәштәр араһында ҡайһы берәүҙәр аҡса таба белә, икенсе берәүҙәр милли, дөйөм мәнфәғәттәрҙе алға ҡуйып, йәмәғәт ойошмаларына берләшеп, көнүҙәк мәсьәләләрҙе күмәк көс менән хәл итеп, рухи ҡәнәғәтлек кисерә. Өсөнсө төркөм дә бар - улар ҙа нимәнелер үҙгәртергә теләй, әммә яңғыҙ булыуҙары арҡаһында, был эшкә тотоноп китә алмай, тотонһа ла, ҡаршылыҡтарҙы йырып сыға алмай аҙаплана. Ундайҙар һәләтле лә, көслө лә булыуы мөмкин, ләкин система, әйләнә-тирәләге кешеләр йоғонтоһо арҡаһында мөмкинлектәре сикләнә.

Йәмәғәт ойошмаһында иһә һәр кем үҙ һәләтен үҫтереү мөмкинлеге алалыр, тип уйлайым. Сөнки кемдер бер эште башҡаларға ҡарағанда яҡшыраҡ башҡара һәм көстәрҙең берләшеүе һөҙөмтәһендә күп нәмәгә өлгәшергә мөмкин. Әммә һәр ойошманың һәләтле лидеры булырға тейеш.

Лидер, тимәк, бер туҡтауһыҙ идеялар тыуҙырыусы. Ул - башҡаларҙы илһамландыра белгән шәхес. Башҡорт йәштәренең берләшеүенең төп маҡсаты булып, берҙәмләшеп, файҙалы эштәр атҡарырға ынтылыу торалыр. Силәбелә үткән "Йәштәр йыйыны"нда ла был турала һүҙ булды. Беҙ хәҙер эшмәкәрлегебеҙҙе "Нимәне үҙгәртергә тейешбеҙ?" тип түгел, "Нимәне эшләй алабыҙ?" тигән ҡараштан сығып ойошторорға бурыслы. Йәғни, бөгөнгө йәштәр ойошмаларында һөҙөмтәле эштәр эшләү принцибы алғы планға сығырға тейештер.

**А. ЮЛДАШБАЕВ:** Бында, тәү сиратта, милли-ижтимағи аңдың үҙгәреүе, дөрөҫөрәге, үҙгәртеү фарызлығы тураһында һүҙ алып барыу кәрәктер. Сөнки бөгөн майҙанға үҙаллылыҡ осоронда тыуып, яңыса белем алған, һуңғы егерме йыл эсендә формалашҡан йәштәр килде. Улар беҙҙең быуындан, минән олораҡтарҙан "тимер ҡоршауҙар" һәм сикләүҙәр араһында ҡыҫылып үҫмәгәнлеге менән айырыла. Бөгөнгө йәштәргә белем алыу, туған телендә һөйләшеү, милли рухты тәрәнерәк өйрәнеп, күңеленә һеңдереү, уны таратыу мөмкинлеге күберәк бирелде. Әлбиттә, уларға яңы заман технологиялары ла ярҙам итә. Оло быуынға ҡарағанда, улар уны үҙ эшендә файҙалана белә. Әгәр ҙә беҙ бөгөн уларҙың тормошонан виртуаль мөмкинлектәрҙе: интернетты, социаль селтәрҙәрҙе, телефон һәм башҡаларҙы алып ташлаһаҡ, йәштәрҙең яҙмышы икенсе төрлөрәк булыр ине, моғайын.

Шулай ҙа бөгөнгө йәштәрҙең берләшергә ынтылыуының иң төп сәбәбе - уларҙың донъяға ҡараштарҙы үҙгәртеп, икенсел ролдән беренсел ролгә дәғүә итеүҙәре. Улар тәүҙәрәк, ағай-апайҙар халҡыбыҙ яҙмышын, рухыбыҙҙы үҙгәртер һәм милләтте яңы кимәлгә алып сығыр, тип көттө. Һуңғы 20 йыл эсендә булып үткән йыйындарҙа - өс Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында һәм улар араһында ойошторолған башҡа күп кенә сараларҙа, телевидениела, радиола һөйләнелгәндәрҙе тыңлап, гәзит-журналдарҙа яҙылғандарҙы уҡып ҡарағандан һуң, йәштәр олораҡ зыялыларҙың түңәрәк буйлап йөрөүен, һүҙҙән эшкә күсә алмай аптыраныуын аңланы. Әгәр үҙебеҙ тотонмаһаҡ, милләттең яҙмышын бер кем дә хәл итмәйәсәк, тигән ысынбарлыҡҡа төшөндө.

Милләттең яҙмышында һынылышлы осорҙа уртаға һәр саҡ йәштәр сыҡҡан. Салауат Юлаевтың, Зәки Вәлидиҙең, Бабичтың йәшен ҡарағыҙ! Сөнки аңды үҙгәртеүгә һәм үҙгәреүсән тормошҡа яуап биреүгә бары тик йәштәр генә һәләтле. Ә өлкәндәрҙең, беренсенән, фекере ҡалыплашҡан, икенсенән, уларҙың эш урындары, ғаиләһе, йорто - юғалтыр әйберҙәре бар һәм улар ниндәйҙер революцион фекергә һәләттәрен юғалтҡан була. Икенсе яҡтан, шул уҡ Рәшит Шәкүр, Марат Ҡолшәрипов, Мәрйәм Бураҡаевалар 60-сы йылдарҙа Рәми Ғарипов етәкселегендә бер тапҡыр аң революцияһын эшләгәндәр бит инде, 90-сы йылда - уны икенсе тапҡыр ҡабатланылар. Хәҙер уларҙан өсөнсө революция талап итергәме ни? Дүртенсенән, донъяуи тенденцияны ла иҫәпкә алырға кәрәк. Бөгөн бөтөн донъяла йәштәрҙең әүҙемлеге күҙәтелә. Сәйәсмәндәрҙең дөрөҫ һүҙ һөйләмәүенән, донъя менән аҡса идара итеүенән туйған йәштәр үҙҙәренең яңы талабын тәҡдим итергә теләй. Беҙҙең республикала ла яңы лидерҙар барлыҡҡа килә башланы. Улар бөтөн йәштәрҙе ойоштороуға һәләтле түгел, әммә локаль кимәлдә йәштәрҙе туплай ала. Бөгөн, минең аңлауымса, тиҫтәләгән милли-ижтимағи ойошмалар бар. "Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларында уҡыусы башҡорт студенттары һәм аспиранттары берлеге", "Башлига", "Башлидер", "Беҙ - Башҡортостандың киләсәге", "Күк бүре", әле яңы барлыҡҡа килгән "Башҡорт" ойошмаһы, "Ҡош юлы" ойошмалары, БДПУ-ла, БДУ-ның Сибай институтында әлегә бер исем аҫтында берләшмәгән әүҙем йәштәр бар. Бындай хәрәкәттәрҙең бер-береһе менән юлдары киҫешә, улар бер-береһе үткәргән проекттар менән таныша, хуплай. Иң мөһиме, шуны әйтергә кәрәк - бөгөн уларҙың береһе лә әле сәйәсиләштерелмәгән ойошмалар. Шуға күрә, кемдеңдер ниндәйҙер сәйәси юҫыҡ эҙләүе, сәйәси мәғәнә табырға тырышыуы урынһыҙ. Улар ижад, мәғариф һәм мәҙәниәт юҫығында берләшкән.

**Ф. ЯНБАЕВА:** Йәштәр сәйәсәткә ҡыҫылмай, тип дөрөҫ әйтелде. Йәштәр революцияның бер нөктәгә йүнәлтелгән, һөҙөмтәһе тиҙ арала бөтә торған ысул булыуын яҡшы аңлай. Беҙгә хәҙер икенсе төрлө эшмәкәрлек алып барыу зарур. Тамсы тама-тама ташты тишә, ти, йәштәрҙе берләштереү эшен иплəп кенә, әммә системалы алып барғанда ғына уңышҡа өлгәшергә мөмкин. Шуныһы ҡыуаныслы, бөгөнгө лидерҙар быны бик яҡшы аңлай.

**А. ИМАНҒОЛОВА:** Йәмәғәт ойошмалары барлыҡҡа килеүҙең ике юлын: ойошмаларҙың халыҡ тарафынан һәм юғарыла ултырғандар теләгенән, тәҡдименән сығып ойошторолоуын төҫмөрләп була. Тәүгеһен халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыусылар төркөмө йәки бер лидер булдыра. Икенсеһе, ғәҙәттә, сәйәсиләштерелгән була, унда властағы етәкселәр бер лидерҙы таба ла, уның аша эш итә. Әлеге көндә башҡорт йәмәғәтселегендә был төркөмдәрҙең ике төрө лә бар.

**А. ЮЛДАШБАЕВ:** Инглиз яҙыусыһы Дизраэлиҙың: "Әгәр яҡшы китап уҡығым килһә, мин уны үҙем яҙам...", - тигән ҡанатлы һүҙе бар. Бында ла шулай: кемдер йәмғиәттә берәй эшләнеп бөтөлмәгән урын күреп ҡала ла, уны тултырырға тырыша.

**А. ИМАНҒОЛОВА:** Йәштәр йәмәғәт ойошмаларының барлыҡҡа килеү маҡсаты һәм эшмәкәрлек диапазоны киң булыуы мөмкин: кемдер башҡорт халҡына файҙа килтерергә теләй, кемдер, мәҫәлән, тарыраҡ мәсьәләне хәл итеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Сиктәре билдәләнмәгән бер маҡсатты тормошҡа ашырыуға ҡарағанда, бер йүнәлеш булараҡ билдәләнгәнен тормошҡа ашырыуы күпкә еңелерәк, минеңсә. 5-10 кешенән торған төркөм тотош халыҡ өсөн уйларға, халыҡ исеменән эш эшләргә теләһә, әлбиттә, был эш улар өсөн бик ауыр буласаҡ. Фатима, беҙҙең лидерҙар системалы эш итә, тиһә лә, мин быны киреһен күрәм. Минеңсә, системалылыҡ төшөнсәһе бөгөнгө башҡорт йәштә-ренең йәмәғәт ойошмаларына бик үк хас түгел. Система, планлаштырыу, концепциялы эш кеүек төшөнсәләрҙе ҡулланып эшләүсе ойошмалар бик аҙ. Ул ойошмалар ағзалары үҙҙәренең нимә эшләргә тейеш икәнлеген дә белмәй. Был - барлыҡ йәмәғәт ойошмаларының етешһеҙлеге.

**А. ЮЛДАШБАЕВ:** Шәхес булараҡ формалашҡан, үҫкән осорҙа был күренеште барыһы ла

***Сәйәсмәндәрҙең дөрөҫ һүҙ һөйләмәүенән, донъя менән аҡса идара итеүенән туйған йәштәр үҙҙәренең яңы талабын тәҡдим итергә теләй. Беҙҙең республикала ла яңы лидерҙар барлыҡҡа килә башланы. Улар бөтөн йәштәрҙе ойоштороуға һәләтле түгел, әммә локаль кимәлдә йәштәрҙе туплай ала. Бөгөн тиҫтәләгән милли-ижтимағи ойошмалар бар. Был хәрәкәттәрҙең бер-береһе менән юлдары киҫешә, улар бер-береһе үткәргән проекттар менән таныша, хуплай. Иң мөһиме, шуны әйтергә кәрәк - бөгөн уларҙың береһе лә әле сәйәсиләштерелмәгән ойошмалар. Шуға күрә, кемдеңдер ниндәйҙер сәйәси юҫыҡ эҙләүе, сәйәси мәғәнә табырға тырышыуы урынһыҙ. Улар ижад, мәғариф һәм мәҙәниәт юҫығында берләшкән.***

***✓ Бөгөнгө башҡорт йәштәре йәмғәт ойошмалары һәм уларҙың лидерҙары ниндәйҙер милли идеяны, милли концепцияны барлыҡҡа килтерә алмай әле. Ике йыл буйы үткәрелгән сараны "ойоштороу кәңәшмәһе" тип кенә атап була.***

үтә. Бер осорҙа - бер, икенсе осорҙа икенсе йәмәғәт ойошмаһына күсеп йөрөгән йәштәрҙе генә алайыҡ. Улар үҙҙәрен теге йәки был ойошмала эҙләй-эҙләй, ахыр сиктә, йә таба, йә тапмай. Тағы, бөгөн башҡорт йәштәре араһында йәмәғәт ойошмалары бар, тип әйтеү урынһыҙ булыр ине. Уларҙы мин "ҡыҙыҡһыныуҙар буйынса төҙөлгән клубтар" формаһында ҡарар инем. Беҙ үҙебеҙҙе нисек кенә йыуатһаҡ та, ысынбарлыҡта беҙ - клубтар кимәлендә генә эш итеүсе ойошмалар. Шулай ҙа һуңғы йылдарҙа алға китеш һиҙелә.

**▸ Силәбелә үткән быйылғы "Йәштәр йыйыны" былтырғыһы менән сағыштырғанда һөҙөмтәлерәк эшләне, быйыл ҡатнашҡан ойошмаларҙың әҙерлеге яҡшыраҡ булды, тип әйтеп буламы?**

**А. ЮЛДАШБАЕВ:** Былтырғы йыйында ҡатнашҡан көслө-көслө ойошмаларҙың ҡайһылары быйыл ни өсөндөр килмәне. Бөтөн башҡорт йәштәрен берләштереү маҡсаты менән янған ойошмалар вәкилдәренең әйтер һүҙе юҡ икән, минә ҡалһа, улар ошо форумға килеп, йәштәрҙең нисек "тын алғанын" булһа ла тыңлап ҡайтырға тейеш ине. "Йәштәр йыйыны"ның киләһе аҙымы аныҡлаштырылған, яҡшыраҡ уйланылған, ерлекле булырға тейеш. Был юҫыҡта һәр форумға айырым бер тема билдәләп, шул тема буйынса белгестәрҙе йәлеп итергә тәҡдим итәм. Мәҫәлән, эшҡыуарлыҡ нигеҙҙәре, гранттар, телде һаҡлау буйынса айырым форумдар ойошторорға мөмкин.

Бөгөнгө башҡорт йәштәре йәмәғәт ойошмалары һәм уларҙың лидерҙары ниндәйҙер милли идеяны, милли концепцияны барлыҡҡа килтерә алмай әле. Ике йыл буйы үткәрелгән сараны "ойоштороу кәңәшмәһе" тип кенә атап була. Ойоштороу тағы ике йылға һуҙылыр әле. Төп иғтибарҙы шуға йүнәлтергә кәрәк: йәштәр бөгөн осрашырға, һөйләшергә, иң мөһиме, бер-береһен тыңларға һәм ишетергә өйрәнә. Мин был сараға килә алмаған делегациялар етәкселәренә: "Барығыҙ, ҡатнашығыҙ, йәштәрҙе күберәк алып килегеҙ", - тип әйтергә теләйем. Ә кемдәр ҡатнашҡан - уларға һәр йыл яңы ҡатнашыусылар алып килергә кәңәш итер инем. Йәштәргә биш ай буйы һеңдерергә тырышҡан аҡылды был йыйында биш сәғәттә лә атҡарып була.

**▸ Бөгөнгө башҡорт йәштәренең йәмәғәт ойошмалары рәйестәре шәхси мәнфәғәттән тыш, халыҡ мәнфәғәтен дә ҡайғырта, тип ныҡлы әйтеп буламы?**

**А. ЮЛДАШБАЕВ:** Ниндәй генә байрам, сара ойоштормаһындар, күп йәштәр ул сараны иң тәүҙә килем сығанағы булараҡ ҡына ҡабул итә. Уйын-көлкөгә ҡоролған саралар үткәрер алдынан бик аҙҙар ғына башҡорт халҡының мәнфәғәтен ҡайғыртҡан һорауҙар менән ҡыҙыҡһына. Шундай бер конкурстан һуң телевидениелағы һөйләшеү барышында: "Беҙ, беренсенән, аҙ һанлыбыҙ, икенсенән, башҡорттар бөгөн шундай шарт алдына ҡуйылған - ябай ғына, күңел асыуға ғына йүнәлтелгән шоуҙар үткәрергә хаҡыбыҙ юҡ", - тип әйткәйнем дә ине. Бөгөн был фекерҙе тағы ҡабатлайым. Беҙ "Дом-2", йә булмаһа, Масляковтың КВН-ы һымаҡ шоуҙар үткәрә алмайбыҙ. Шуға, теләйбеҙме-теләмәйбеҙме, ойошторолған ҡайһы ғына сараны алып ҡарама - уның эсендә милли идея сатҡылары бар. Башҡортса тапҡырҙар һәм отҡорҙар бәйгеләре - быға асыҡ миҫал. Башҡорт телендә "Шаянимум" һәм "Шаян уйын" үткәрелә башлау менән Өфөлә башҡорт теленең ҡулланылыу даирәһе күҙгә күренеп артты. Башҡорт телендә көлөү, һөйләшеү һәм шаярыу бөгөн модаға инде. "Кеше алдында ҡысҡырып башҡортса һүҙ һөйләргә ярамай", тигән тыйыу менән тәрбиәләнгән милләт өсөн "КВН" мәктәбе ҙур әһәмиәткә эйә. "Мәскәүҙәр" ("Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларында уҡыусы башҡорт студенттары һәм аспиранттары берлеге") тураһында әйтәйек. Тәүҙәрәк уларҙы тыуған республиканы һағыныу берләштергәндер. Бөгөн уларҙың хәрәкәтендә ҡасандыр 100 йыл элек Сафуан Яҡшығолов менән Мәжит Ғафури әйтеп ҡалдырған идеялар ята: "Аҡыл һәм аң иң төп капитал булған ваҡытта мәғрифәтселекте беренсе урынға күсереп ҡалмаһаҡ, беҙҙең киләсәгебеҙ юҡ". Егерме йыл буйы бейеүселәрҙе, йырсыларҙы, филологтарҙы, уҡытыусыларҙы шул тиклем күп әҙерләгәнбеҙ, улар киләһе 50 йылға ла етәсәк. Хәҙер беҙ заманса белем алырға тейешбеҙ. Был йәһәттән мәскәүҙәрҙең алып барған эштәре иң төп йүнәлештәрҙең береһе. Улар ҙа ҡыҙыҡһыныуҙар клубылыр, әммә уларҙың асылында милли хәрәкәт ята. Мәскәү шарттарында башҡа милләттәр менән конкуренция шарттарында йәшәргә, уҡырға хоҡуҡ яулау бөгөнгө глобалләшеү шарттарында, ғөмүмән, милләттең йәшәргә хоҡуғы һымаҡ килеп сығасаҡ. Был беҙгә тағы бер пастулатты раҫлай, йәғни "Беҙ башҡорт булғаныбыҙ өсөн беҙгә ниндәйҙер шарттар, мөмкинлектәр тыуҙырылырға тейеш", тигән лозунгты тамам юҡҡа сығара. Бөгөнгө глобаллəшеү, федералләшеү һәм дөйөм асыҡ иҡтисади, сәйәси мөхит шарттарында беҙҙең милләт, башҡа милләттәр кеүек үк, көрәшеп, ҡояш аҫтында үҙ урынын табырға, яңы иҡтисади шарттарҙа үҙенә үҙе юл ярырға тейеш. Шул йәһәттән мәскәүҙәрҙең дә, "Башҡорт асыҡ КВН Лиғаһы"ның да әүҙемлеге хуплауға лайыҡ. Ғөмүмән, ниндәй генә милли хәрәкәтте алма, әгәр ул яман ғәҙәттәрҙән, ниндәйҙер сит йоғонтоларҙан азат һәм үҙе артынан эйәргәндәрҙе лә ошо юлға баҫтыра икән, был да бик мөһим.

**Ф. ЯНБАЕВА:** Йәмәғәт ойошмаларының үҙ алдына ҡуйған маҡсаттары үҙгәрмәгән тиерлек. Тик бөгөн улар шул маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыуҙың яңыса, заманса хәл итеү ысулдарын ғына эҙләй. Мәҫәлән, "Башҡорт асыҡ КВН Лиғаһы" башҡорт телендә шаяртыуҙарҙы алға ҡуя һәм шуның менән башҡорт телен һаҡлау, уны ҡулланыу даирәһен киңәйтеү маҡсатын алға һөрә. Бындай сараларҙы ойошторғанда, әлбиттә, йәштәр үҫһен, тигән изге уй ҙа һәр саҡ булған. Башҡорт йәштәрен үҫтереү инструменты булараҡ, тапҡырҙар һәм отҡорҙар бәйгеләре бик уңышлы һайланған, минеңсә. Унда ҡатнашҡан йәштәр башҡорт теленең нескәлектәренә төшөнә, үҙенсәлекле башҡорт юморын үҙләштерә, шул уҡ ваҡытта лидер сифаттары ла төҫмөрләнә. Был бик һөҙөмтәле ысул. Йәштәрҙе Рәсәйҙең ҙур ҡалаларына ебәреп уҡытыуҙы ойоштороу ҙа заман талап иткән яңы ысулдарҙың береһе булып сыға инде.

**А. ЮЛДАШБАЕВ:** Берҙәм дәүләт имтихандарын нисек кенә яманламаһындар, уға тиклем беҙҙең уҡыусыларҙың Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларындағы уҡыу йорттарына уҡырға инеү мөмкинлеге бик түбән кимәлдә, бының өсөн иҡтисади мөмкинлектәр ҙә юҡ ине. Әле быға юл асылған икән, файҙаланырға кәрәк. Күптәр быны аңлай, әммә аңламаған кешеләр ҙә бар, үкенескә күрә.

**А. ИМАНҒОЛОВА:** Фатима дөрөҫ әйтә, йәмәғәт ойошмаларының төп маҡсаты - милләтте берләштереү. Шулай уҡ "Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларында уҡыусы башҡорт студенттары һәм аспиранттары берлеге"нең маҡсаты, берләшеүҙән тыш, йәштәребеҙҙең белемен арттырыу нигеҙендә хеҙмәт баҙарында үҙ урынын табыуға, конкурентлылыҡ шарттарында өҫкә күтәрелеүгә өйрәнеү бит.

**А. ЮЛДАШБАЕВ:** Бөгөн бер проблема бар - лидерҙар мәктәбе юҡ. Комсомол системаһы бөттө, һуңғы егерме йыл эсендә бер ни ҙә булдырылманы. Тәбиғәттә "тәбиғи һайлап алыу" булған һымаҡ уҡ, йәмғиәттә лә яңы лидерҙар барлыҡҡа килә башланы. Ойошмалар күп һәм улар төрлө-төрлө, тиһәләр ҙә, улар барыбер бер-береһен, алдағы ойошмаларҙың эшмәкәрлеген ҡабатлай. Әлеге көндә бөтөн башҡорт йәштәрен бер идея ярҙамында тупларлыҡ лидерыбыҙ юҡ.

**▸ Йәмәғәт ойошмалары бер-береһе менән хеҙмәттәшлек итеү юлдарын дөрөҫ билдәләйме?**

**Ф. ЯНБАЕВА:** Мин әлеге һөйләшеүҙә билдәләнгәнсә, бөтөн башҡорт йәштәренең йәмәғәт ойошмалары ла клубтар кимәлендә генә, тигән фекер менән бик үк килешеп етмәйем. Эйе, ундайҙар ҙа бар, улар әлегә формалашып килә. Әммә ойошмалар араһында үҙҙәренең яйға һалынған эштәре менән айырылып торғандары ла юҡ түгел. Әгәр һәр ойошма үҙенең идеяларын тормошҡа ашырыр инструменттарға эйә булһа, улар бер-береһе менән тығыҙыраҡ хеҙмәттәшлек итер ине, әлбиттә. Бер ойошма системалы эшләй икән, формалашыу осорон кисергән ойошма был системаның бер өлөшөнә әүерелә алмай. Башҡалар менән бергә эшләр алдынан һәр ойошма иң тәүҙә үҙенең эске мәсьәләләрен хәл итергә, үҙ маҡсаттарын билдәләргә тейеш.

**А. ИМАНҒОЛОВА:** Һәр йәмәғәт ойошмаһы эште үҙенән, үҙенең башлығынан башларға тейеш. Әгәр башлыҡ маҡсаттарҙы, бурыстарҙы аныҡ итеп билдәләй икән, ойошмалағы бар кешеләр ҙә шул маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн көс һала.

**А. ЮЛДАШБАЕВ:** Әгәр ағзалар үҙҙәренең маҡсатын билдәләһә, улар үҙҙәре үк башлыҡҡа: "Ә ниңә беҙ ошо маҡсатты алға һөрмәйбеҙ?" - тип әйтә ала. Рәйес үҙенең бурыстарын атҡара алмаһа, уны икенсе кандидат менән алыштыралар. Тағы өҫтәп шуны әйтке килә: коллектив бәхет булмай. Мин быны электән әйтә киләм. Ғаиләлә лә барыһы ла бер юлы бәхетле була алмай: һәр кем үҙенсә бәхетле булыуы ғына мөмкин. Ойошмаларҙың бергә хеҙмәттәшлегендә лә шулай: уларҙы бер ҡалпаҡ аҫтына йыйыу бик үк дөрөҫ түгелдер ул. Улар айырым эшләргә, ваҡыты-ваҡыты менән йыйылып, уртаҡ проблемаларҙы хәл итеү юлдарын бергәләп эҙләргә, тәжрибә уртаҡлашырға тейеш. Беҙҙе бәйләгән берҙән-бер еп - халҡыбыҙ икәнен, берҙән-бер мәнфәғәт - милләт мәнфәғәте онотмайыҡ. Киләһе быуат тупһаһы аша атлап үтеүсе милләттәр араһында башҡорт тигән милләт булырмы, әллә ошо халыҡ тарихҡа тороп ҡалырмы - бына ошо һорауға бары тик бөгөнгө йәштәр генә яуап бирә ала. Мин дә, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире лә, Президент та, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ла түгел, бөгөнгө көндә мәктәптә, юғары уҡыу йортонда уҡып, һуңғы биш йыл эсендә эш башлап йөрөүсе йәштәр һәм бары тик улар ғына... Бына әле ҡаршымда ултырыусы Алина, Фатима, Илгиз - һеҙ генә!



# ЙӘШТӘРЕ ЛӘ...

## уртаһына инһен ине

***Мин әлеге һөйләшеүҙә билдәләнгәнсә, бөтөн башҡорт йәштәренең йәмәғәт ойошмалары ла клубтар кимәлендә генә, тигән фекер менән бик үк килешеп етмәйем. Эйе, ундайҙар ҙа бар, улар әлегә формалашып килә. Әммә ойошмалар араһында үҙҙәренең яйға һалынған эштәре менән айырылып торғандары ла юҡ түгел. Әгәр һәр ойошма үҙенең идеяларын тормошҡа ашырыр инструменттарға эйә булһа, улар бер-береһе менән тығыҙыраҡ хеҙмәттәшлек итер ине, әлбиттә. Бер ойошма системалы эшләй икән, формалашыу осорон кисергән ойошма был системаның бер өлөшөнә әүерелә алмай. Башҡалар менән бергә эшләр алдынан һәр ойошма иң тәүҙә үҙенең эске мәсьәләләрен хәл итергә, үҙ маҡсаттарын билдәләргә тейеш.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Төп темаға һығымта шул: башҡорт йәштәрен етәкләүсе лидерҙар бөгөн дә бар һәм уларҙың һәр береһе үҙ һуҡмағынан алға бара. Ул һуҡмаҡтар ҡайҙалыр бер-береһе менән киҫешә, ҡайҙалыр тоташа, ҡайҙалыр бер-береһенән алыҫая икән - был тәбиғи. Иң мөһиме - аҙашмаһындар.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

**✓ Юҡ, ул етәксене ғәйепләмәй. Күңеле нисек кенә ытырғанмаһын, аҡылы менән Йәнбикә үҙен мәжбүр итте түгелме? Илаһи сәнғәт күгенә осорға рөхсәт һорауы, йәшел юл асырға маташыуы ине ҡатындың.**




* * *

Ауылдан атаһы килгәйне Үлмәсбикәнең. Бик ныҡ ауырып, табипҡа күренеп, һалһалар, дауаханала ятып алыу ине иҫәбе. Эштән ҡайтҡан ҡыҙы менән йүнләп һөйләшергә лә өлгөрмәнеләр, һуҡмыш малайҙары ҡайтып инде Үлмәсбикәнең.

- О, картатай приехал, здорово, - ҡосаҡлап күрештеләр. Әсәһе табынға саҡырҙы.

- Осрашыу хөрмәтенә бер ярты ҡуйырһың ул, мам?

- Әҙерләп торалар ти ине һиңә, икмәклек тә аҡса юҡ.

- А то пусть дед үҙе ултыртһын, он пенсионер, иң аҡсалы кеше. Ҡартатай не откажет. Ул мировой парень. Видишь, даже миҙалдарын да тағып алған. Герой!

Дауаханала этләнеп сиратта тормаҫ өсөн генә таҡҡан орден-миҙалдары өсөн ҡарт былай ҙа уңайһыҙлана ине.

- Ҡуйығыҙсы, балалар, юҡ менән булмағыҙ. Һеҙгәме һуң эсеп йөрөргә, самый уҡып, һөнәр алыр сағығыҙ. Ә миңә ярамай, йөрәк шаяра, давлением күтәрелә лә китә, - тип ҡаршы төштө.

- Ну ты даешь, дед. Һиңә нельзя, а нам можно. Бер илле тәңкәң жалко что ли?!

- Аҡса йәл түгел, ә йәштән ошо зәхмәткә башығыҙҙы тыҡҡан һеҙ йәл.

- Спокойно, ҡарт, не лезь. Эсһәк, үҙебеҙҙекен эсәбеҙ, һинекен түгел.

Ғүмер буйы ауылдың хөрмәтле эшсеһе, олоһо ла, кесеһе лә аҡһаҡал тип тыңларға күнеккән бабай, ейәндәре лә әйткән өгөт-нәсихәтенә ҡолаҡ һалыр, тигәндер, артабан дауам итте.

- Үҙегеҙҙекен дә эсмәгеҙ. Бына ҡандай матур табын, ҡайнар аш, тамаҡ ялғағыҙ ҙа, ятығыҙ йоҡларға. Әсәңә лә ял кәрәк, эштән арманһыҙ булып ҡайта.

- Ә һин, ҡартлас, беҙҙе өйрәтмә. Беҙ үҙебеҙгә үҙебеҙ хужа.

- Етәр, балам, ҡартатаңа ауыр һүҙ әйтмә. Былай ҙа сирләп саҡ йөрөй, - тип яҡлашты Үлмәсбикә.

- Тогда пусть заткнется. Нашелся умник, деревенщина!

Атаһын был һүҙҙәр бик ғәрләндерҙе булһа кәрәк.

- Тьфү, һеҙгә ауыҙ бысратҡансы, - тип өҫтәл артынан тороп китмәксе ине, кесе ейәне уны яғаһынан маҡып туҡтатты.

- Кемгә төкөрәһең һин, старый черт?

Өлкәне ауыҙын салышайтып, ҡустыһын йөпләп, мыҫҡыллап ултырҙы.

- Покажи ему, браток, бик шашмаһын. Ана, беҙҙең пап башы эшләгәс, үҙе лә эсә, беҙҙе лә һыйлай, нотация уҡымай.

Төпкө бүлмәлә ләх ятҡан аталары ишетмәне, бик маһайыр ине, юғиһә. Буйсан көслө егет, ысҡынмаҡсы булып тартҡылашҡан ҡаҡса бабайҙы бер генә һалып осорҙо, теге һыңҡ итеп ишек яңағына бәрелде лә тынып ҡалды.

Үлмәсбикә сәсрәп һикереп торҙо:

- Ай, үлтерҙең бит, балаҡайым, бар сығып китегеҙ, йәшенегеҙ. Хәҙер "скорый" саҡыртам, берике көнһөҙ ҡайтмағыҙ, - тип сарбайланы.

Эштең былайға боролорон абайламаған егет ишараттары шымтайып, сығып юғалды. Икеһе лә мотоцикл урлаған өсөн милицияла иҫәптә тора һәм шартлы рәүештә хөкөм ителгәйне.

Атаһы, иҫенә килмәйенсә, икенсе көндө дауаханала йән бирҙе. Үлмәсбикә менән ике улынан башҡа был ҡурҡыныс енәйәтте һис кем белмәне. Ҡан баҫымы юғары булғас, ҡолап, һуштан яҙыуына шик тыуманы. Ни әйтәһең, һикһән йәшенә етеп килә ине бит. Ғүмер баҡый сөкөрҙәшеп кенә йәшәгән әсәһенең теләге бойомға ашты - ҡарты артынса ул да мәңгегә күҙен йомдо. Ошо бабайымдан ҡалдырмаһын, унһыҙ нисек көн күрермен, ти торғайны, бахырҡай.

- Берәй ҡасан, берәй кешегә ауыҙ асып һүҙ өндәшһәң, үҙеңде лә ҡартатай артынан ебәрербеҙ, - тип ҡурҡытты Үлмәсбикәне улдары. Шулай эшләйәсәктәренә шикләнмәне ҡатын, йөрәгенә хәүеф үрмәләне. Ошонан һуң уларҙан ҡотолор өсөн кейәүенең йортона һәм күңеленә юл һала башланы ла инде.

* * *

Үлмәсбикә менән һүнеп барған йортҡа ҡояш нуры ла керҙе. Көнө-төнө эш тип сапҡан Йәнбикә өй таҙалау, донъя бөтәйтеүгә бер ҙә иғтибар итмәгән икән. Аяғөҫтө ашап, йүгереп тик йөрөгән. Әле апаһы килеп, өйгә ҡот кереткәс кенә шәйләне быны Сәмерхан. Беренсе эш итеп Үлмәҫбикә бар йыһазын сығарып, ҡаҡҡылап-һуҡҡылап, өйҙө ағартты. Бөтөн кер йыуылды, ҡорған-пәрҙә алмаштырылды. Балаларға килгән пенсияға иң тәүҙә Сәмерхандың өҫ-башын бөтәйтте.

- Шофёрмын, тигәс тә, йөрөмә ҡараҫҡы ҡошап, трико кейеп. Хәҙерге заманда уҡытыусы ни ҙә, көтөүсе ни. Айырма юҡ, - тип ебәрҙе. Ысынлап та, бик килешә ине Сәмерханға һорғолт-ҡара костюм-салбар. Ҡиммәтле куртка, туфли-кроссовкалар ҙа ярап ҡалды. Өҫтәлдән тәм-том өҙөлмәне. Үҙе лә ҡунаҡҡа йыйынғандай кейенеп, биҙәнеп-төҙәнеп кенә йөрөнө. Сәмерхандың ҡыҙы Зәйтүнәне лә суҡтай кейендереп, сәсен матур итеп тарап үрҙе.

Был үҙгәреш кеше күҙенә күренмәй ҡалманы, әлбиттә. Әле генә Йәнбикә тип ауыҙ һыуы ҡороҡан әбей-һәбейҙең дә, Сәмерханды йәлләүсе ир-аттың да уның яңы йәмәғәтен маҡтап "теше төштө". Яйһыҙ тойолһа ла, Сәмерханға ла оҡшаны хәҙерге тормошо. Тик ваҡыты-ваҡыты менән йөрәген ниҙер сәнсеп, һулҡылдатып ала, йәнә "Йәнбикә"не йырларға тотона:

Баҙарҙарға барһаң, аҡ тула ал,
Хаҡҡынайын үҙем түләрмен...

Сәмерхандың күңелендә үлгән ҡатынына ҡарата йылы хистәрҙең һүнеүенә бер ваҡиға сәбәпсе булды.

Бөтөн ерҙе пыр туҙҙырып, рәтләп йөрөгәндә, Йәнбикәнең ҡағыҙҙары араһынан хат килеп сыға. Уны вафатына ике-өс көн ҡала Йәнбикә яҙған. "Сәмерхан! Был донъяла миңә бүленгән ваҡыт үтеп бара, буғай. Ләкин мин яҙмышыма үпкәләмәйем. Үкенмәйем. Сөнки мин һинең алдыңда бөткөһөҙ ғәйепле, улай ғына ла түгел, гонаһлы. Ниндәй гонаһ икәнен йөрәгеңә яра һалып, яҙып тормайым. Шулай ҙа һинең кисереүеңде, бәхиллегеңде һорайым. Рәхмәт, Сәмерхан, мин һинең менән бәхетле булдым. Ғәфү ит һәм, зинһар, балаларҙы етем итмә".

Был хатты, әлбиттә, иң алда Үлмәҫбикә уҡыны. Күңеленә ауыр булыр, иҫләтеп тормайым, тип, тәүҙә Сәмерханға бирмәҫкә лә уйлағайны. Аҙаҡтан, киреһенсә, Йәнбикәнең фәрештә түгеллеген белеп, йәһәтерәк төңөлөр, тигән ҡарарға килеп, аманатты тапшырҙы. Сәмерхан хатты бер ни өндәшмәй уҡып сыҡты ла утҡа яҡты. Ҡатының ғәйебе булыуға ул ышанманы, ауыл ерендә хәбәр тиҙ йөрөй, әгәр хилаф эш ҡылһа, әллә ҡасан ишетелер, сүпте сүмәлә итергә әҙер торосылар күптән сәйнәп ырғытыр ине. Күңелендә мәрхүмәгә үпкәләү тойғоһо яралды, хәйер, ҡара гүр кемдәрҙе генә һыуындырмай! Әммә Йәнбикәнең йөрәкте әрнетерлек яңылығы бының менән генә бөтмәгән, имеш.

- Бынағайыш, Йәнбикә композитор икән дә баһа. Бына, күр! - Үлмәҫбикә иренә ялтырап торған матур тышлы ҡатырға һуҙҙы. - Үәт, йомоҡ, шуны ла йәшереп йөрөһөн сәле. Исмаһам, һиңә әйттеме?

Улар бөтәһе лә Йәнбикәнең шиғырҙар, көйҙәр яҙыуын белә ине, тик эшкә кәрәк булған өсөн, концерттарға, кисәләргә йәм өҫтәр өсөн генә тип ҡабул иткәндәр, күрәһең.

- Юҡсы, - Сәмерхандың күкрәк тапҡырында ниндәйҙер ҡорт ҡымырйып ҡуйҙы, тере сағында ҡыҙғанмағанды, үлгән кешене үҙенә ышанмауҙа, хәләл иренән дә йәшерен сере булыуы, хатта гонаһлы икәнен белеү ризаһыҙлыҡ, улай ғына ла түгел, рәнйеү, асыу тыуҙырҙы. Ул ус аяһындай ҡатырғаны әйләндереп-тулғандырып ҡараны. Бер йылдан ашыу элегерәк бирелгән. Тап шул мәлдә семинар типме, әллә кәңәшмә типме, баш ҡалаға барып ҡайтҡайны шул. Ундай саралар йыш булғас, нимә эшләүҙәре хаҡында ул һорашманы, ҡатыны өндәшмәне. Әйтһә ни, ауыҙына һуҡмаҫ ине әле. Бәлки, Сәмерхандың мыҫҡыллауынан ҡасҡандыр. Сөнки Йәнбикәһе:

- Тыңла әле, мин бер көй яҙҙым, - тип пианинола йә баянда уйнай башлаһа:

- Башты ҡатырма әле, әйтерһең, мин берәй нәмә аңлайым. Лутсы әйҙә сәй эсер. Әтеү профессор бисә менән ас ҡарынға музыка тыңлап ҡына йәшәлә, - тип, үҙ йүненә бора ла ебәрә.

* * *

Ғәйепле генә түгел, оло гонаһлы ла ине Йәнбикә ире алдында. Ошо ялтыр ҡағыҙҙы алыр өсөн бер йыл самаһы элек баш ҡалаға барҙы. Автобус киске биштәр тирәһенә килеп етте. Тура Композиторҙар союзы етәксеһенә инде ҡатын. Сөнки иртәгәһенә Йәнбикәне Союзға алыу-алмау мәсьәләһен ул хәл итәсәк. Алтмышҡа еткән сал сәсле, ныҡ кәүҙәле, оҙон буйлы мөләйем ир ҡаршы алды уны. Йәш, сибәр Йәнбикәнең әле генә килеп төшөүе, урынлашып өлгөрмәүен белгәс, ул ҡатынды ҡапҡылап алырға саҡырҙы. Итәғәтле баш тартҡан Йәнбикәне өгөтләп күндерҙе. Ябай ғына ресторанда киске аш ашанылар, оҙаҡ ҡына тормош, ауылдағы көнитмеш, Башҡортостанда милли музыка кимәле һәм киләсәге хаҡында һөйләштеләр. Ауылда үҙенә быңдай етди мөғәмәлә күрмәгән, ир бисәһе булып ҡына йәшәгән ҡатынға шундай ҙур мәсьәләләр тураһында кәңәшләшеп, уның фекерен һорап, ҡатын-ҡыҙ итеп комплимент әйтеп тороуҙары аңлата алмаҫлыҡ кинәнес килтерҙе, үҙенең әле саҡ утыҙҙы тултырған йәш ҡатын икәнлеген хәтеренә төшөрҙө. Талғын көйгә бер-ике мәртәбә вальс әйләнделәр. Киске уттар ҡабынып, меңәрләгән йондоҙ шикелле балҡып торған Өфө урамына сыҡтылар. Рәйес йәш ҡатынды өйөнә саҡырҙы. Оялышынан ҡыпҡыҙыл булған Йәнбикәнең ҡаршы төшөүенә:

- Ҡурҡма, һылыу, мин кеше ашамайым. Үкенескә күрә, һыйхөрмәт күрһәтә алмайым, хәләл ефетем өйҙә юҡ. Әммә баш төртөр мендәр табылыр, - тине. Был һүҙҙән һуң Йәнбикәгә уңайһыҙ булып китте. Өлкән кеше, бәлки, ысынлап та уны ҡайғырталыр, ял итергә урын ғына тәҡдим итәлер. Ә ул, диуана, әллә ниҙәр уйлай. Бахыр ауыл ҡатыны, эт һөйәккә ымһынмаймы һуң инде... Терһәген тешләрҙәй булып, был ҡылығына, бер ҡатлылығына үкенде лә бит аҙаҡ. Ҡаршылашып маташҡан ҡатын: "Ә бит һинең сәнғәттәге киләсәгең минең ҡулда. Теләйем икән, йондоҙ итеп балҡытам, теләмәһәм..." - тигән хужаларса талаптан ҡойолдо ла төштө, әҙәп кәртәһе емерелде...

Юҡ, ул етәксене ғәйепләмәй. Бейә кешнәмәһә, айғыр тешләмәй икәнен ул яҡшы белә. Күңеле нисек кенә ытырғанмаһын, аҡылы менән Йәнбикә үҙен мәжбүр итте түгелме? Илаһи сәнғәт күгенә осорға рөхсәт һорауы, йәшел юл асырға маташыуы ине ҡатындың. Тәнем бысранһа ла, йәнем менән мин тик Сәмерхандыҡы ғына, тип үҙенә күпме тәкрарламаһын, аҡылы эшләгән хыянатты үҙ күңеле онота ла, кисерә лә алманы. Шуға күрә, билдәле сәнғәт әһелдәренең фатиха биреп, үҙ даирәһенә алыуҙары ла көтөлгән ҡәнәғәтлек, шатлыҡ килтермәне. Союзға инеүе хаҡында Сәмерханға әйтмәүенең сәбәбе ошо ине. Был уға үҙенең түбәнлеге, хурлығы менән маһайыуын күрһәтеү булып тойолдо. Ниндәй бысраҡ, түбән хаҡ түләп алды бит ул ошо кескенә ҡағыҙ ҡиҫәген.

Бәлки, ваҡыт үтеү менән онотолор ҙа ине был гонаһ. Йөрәк аҫтында сабый ралыуы аяҙ көндә йәшен атҡандай тәьҫир итте Йәнбикәгә. Тиҫтә йыллап ире менән түшәк бүлешһә лә, ни өсөндөр, ошо гонаһһыҙ йән теге гонаһлы төндә яралғандыр шикелле тойолдо. Алтмышҡа еткән иргә күҙҙәрен сытырҙатып йомоп, теләмәй генә буйһондоролған төндә ниндәй осҡон булыуы мөмкин, юҡ, булмаҫ, тип үҙен ышандырырға маташһа ла, йәнененең бер мөйөшө һулҡылдап, "Ә шулай ҙа?.." тип йөрәкһене һәм бар тыныслығын алды. Кәләшененең малай табыуын һорап һарыуын ҡайнатҡан Сәмерхан улы Тимерханды сөйә-сөйә түбәһе күккә тейгәндәй ҡыуанғанда, Йәнбикәнең күңеле һыҡрай, ғазаплана барҙы.

Бәлки, бөтөн ошо тетрәнеүҙәр-үкенеүҙәр, йоҡоһоҙ төндәр буйы Алланан ярлыҡау һәм тейешле яза көтөү уның былай ҙа нескәргән ғүмер ебен ҡыҫҡартҡандыр. Сөнки был ғазап уты көндән-көн көсәйә, намыҫын кимерә, ялмай бара, улының йөҙ-ҡиәфәтендә баш ҡалала ҡылған гонаһ сәбәпсеһе менән оҡшаш һыҙаттар күреүҙән ҡурҡыу йөрәк әрнеүен түҙеп торғоһоҙға әйләндерә. Иренең тупаҫланыуын, баланың мыжыуын, үҙенең сирен бахыр ҡатын үҙ бизмәне менән үлсәп, әлеге хыянатына япһара, башы түбән эйелгәндән-эйелә, сүптәй ғәйеп, тауҙан тәгәрәгән ҡар тубылай ҙурая, ҡабарғандан-ҡабарып, Йәнбикәне күмә бара...

* * *

Сәмерхандың уйҙары Үлмәҫбикәгә күскәйне. Ауыл халҡы һынап ҡарап, тамам үҙ иткәйне уңған ҡатынды. Сәмерхандың ҡалала йәшәргә теләп тә, Йәнбикәнең һүҙен йыға алмай ғына ауылда йәшәргә мәжбүр булыуын белгәс, уның бар уйы ирен ҡалаға күсереүгә бәйләнде. Сәмерхан ҡаршы түгел ине түгеллеккә, ләкин шап-шаҡтай донъяһын, яңы өйөн ташлап, билдәһеҙлеккә сығып китеүгә шикләнеп ҡараны. Кем һине ҡолас йәйеп, фатир әҙерләп тора. Ә ул арала өлгөр ҡатын ҡайҙандыр Ҡайынлыла бер бисәгә йортҡа ингән ирҙең Стәрлелә фатиры барлығын белеп ҡалған. Нисек итһә итте, үҙҙәренең дүрт бүлмәле ҙур өйөн ике бүлмәле фатирға алмаштырыуға өлгәште. Етмәгәнен өҫтәп, мал-тыуар, ҡошҡортто һатҡан аҡса менән түләнеләр.

Шулай итеп, Йәнбикәнең вафатына йыл ярым үттеме-юҡмы, икенсе ҡатынлы һәм ҡала кешеһе булып китте Сәмерхан. Зарланырлыҡ йәшәмәне улар. Тик тәүге мәлдә үҙе өсөн өҙөлөп тор-

***✓ Бошоноуы бөттө. Байрам байрамса буласаҡ бит! Битен буяны, билбауын быуҙы, бармағында балдағы, беләҙеге лә балҡыны. Бүләктәрен барланы. Бикбулаттар, Батырҙар, Басирҙар, Билалдар Барыйҙарға боролдо. Байрам башланды.***

ған ҡатынының, йәшәй-йәшәй мыжыҡланып, үҙ һүҙен генә һүҙ итергә тырышып еңмешләнеүе ирҙең намыҫына тейә, бәсен төшөрә барҙы.

- Һинең балаларың хаҡына үҙемдекеләрҙе ташланым, бар ғүмеремде һеҙгә, Зәйтүнә менән Тимурға арнаным (ул Тимерханды бер ҡасан да ысын исеме менән атаманы, йәнәһе, хәҙерге заманда ниндәй Тимерхан ти ул, үҙ исемебеҙ ҙә ҡатлы-ҡатлы моҡ заманғы булыуы етмәгәнме), - тип, әленәнән-әле иҫкә төшөрөп, игәп тороуы ирҙе екһендерҙе. Киреһенсә, был хаҡта иҫкәртмәһә, Сәмерхан бисәһенең ҡәҙерен нығыраҡ белер, изгелеген онотмаҫ ине, тик Үлмәҫбикәнең яҡшылығы өсөн хаҡ талап иткән кеүек ҡыланыуы күңелен ҡайтарҙы. Әйтәһе түгел, һүҙ тигеҙмәй, үҙ балаларылай күреп тәрбиәләне. Зәйтүнәһе иҫ белгәс, "апай" тип, улы сабый сағынан "әсәй" тип өйрәнгәс, үҙ әсәһе түгел икәнен белгәс тә, ҡарашын үҙгәртмәне, әсәй тип өҙөлөп торҙо. Балаларының бәхете өсөн ата кеше Үлмәҫбикәгә бар йөрәктән рәхмәтле. Шул арҡала ғына үҙәген өҙгән мәлдәрҙә лә ҡаты һүҙ әйтә, яман ҡарай алманы Үлмәҫбикәгә. Әммә тамаҡ туҡлыҡтан, өй таҙалыҡтан, етеш тормоштан, балалар шатлығынан да өҫтөн рухи яҡынлыҡ, уртаҡ тойғолар бар икәнлегенә төшөнә барҙы. Ошо инаныу уны Үлмәҫбикәнән алыҫайтып, әллә ҡасан үткәндәрҙә ҡалған Йәнбикәһен йышыраҡ иҫенә төшөрҙө, онотолған хистәр ҡуҙғыны, терелә алмаҫлыҡ итеп баҫтырылған һөйөү осҡоно быҫҡып-быҫҡып, киренән тоҡанды һәм оло һағыш-үкенескә әйләнде.

* * *

Сәмерхан ҡарттың уйын юлдашы бүлде.

- Кемгә төбәп ҡайтаһың, олатай, ҡаршы алыр кешең бармы?

Бәй, уйланып, Ҡайынлыға килеп еткәндәрен һиҙмәй ҙә ҡалған да баһа. Тыуған ауылына ата-әсәһен ерләшергә генә ҡайтып уранылар, хәҙер һуңғы килеүенә лә туғыҙ-ун йыллап барҙыр. Ҡайынлы тағы ҙурайған, төҙөкләнгән. Элекке кеүек кесерткән, алабута баҫҡан тыҡрыҡ юҡ. Бөтөн ерҙә йәшеллек, аллы-гөллөгә буялған ҡапҡа-ҡойма, тәҙрә ҡапҡастары. Еңел машиналар байтаҡ күренә.

Һоҡланыулы-хәсрәтле ҡарашын тәҙрәнән алмай, көттөрөп яуап бирҙе:

- Атай-әсәй көтә.

Фәрит һыҙғырып ебәрҙе.

- Бәхетлеһең һин, Сәмерхан бабай. Ошо йәшеңдә лә ата-әсәйле булып, көтөп торғас.

- Эйе-е, бәхетлемен, - тип һүҙҙы Сәмерхан, уйҙары солғанышынан сыға алмай.

Икенсе урамға боролоп, магазин ҡырынан өҫкә күтәрелделәр. Осраған ир-ат баш ҡағып, әбей-һәбей маңлайына ҡулын ҡуйып ҡарап ҡала. Әллә сырамыталар, әллә юҡ. Әммә ауылдың яҙылмаған ҡануны буйынса, береһе лә һаулыҡ һорашмай үтмәй. Һул яҡлап урам осондараҡ тәпәшәк, ләкин ҙур ғына йорт янына туҡтанылар. Тәҙрәләренә арҡыс-торҡос таҡта ҡатылған, ҡапҡа алдын, баҡсаны әрем, кесерткән, һап-һары бәпембә баҫҡан. Ишеген асып, бабайға машинанан төшөргә ярҙамлашҡан Фәрит, был сәйер күренешкә аптырап, һораулы ҡарашын Сәмерханға төбәне.

- Атаҡ, олатай,... ней... көтә тигәйнең дә...

- Көтәләр. Ана улар... - Сәмерхан хәлһеҙ ҡулын күтәрә бирҙе лә, ярамағанлығын иҫенә төшөрөп, эйәге менән түбән осҡа ымланы. Унда киске ҡояш нурында ҡыҙғылт булып ялтырап, ярым айҙар күренә ине. Зыярат... Фәрит унайһыҙланып көрһөндө, гәйепле кешеләй урынында тапанды.

- Тамаҡ ялғап кит, улым. Сумкала бөтөн нәмә бар, ҡайнар сәй ҙә термоста. Яҡын ер түгел бит, - тине ҡарт күршеһенә. - Бынауында, йәшел сирәмдә ултырып, бер сәй эсеп алайыҡ әле. Ҡабат әллә яҙа улайтып ирәүәнләнеп бәпкә үләнендә ултырыу, әллә юҡ. Бер Хоҙай Тәғәлә ҡулында.

- Ә һин ҡалаһыңмы ни, олатай? - Фәрит ни эшләргә белмәй аптыраны. - Ҡасан ҡайтаһың? Әйткән көнөңдә килеп алырмын.

Сәмерхан һыҙлаған аяҡтарын көс-хәл менән бөкләп, ҡуйы үләнгә сүгәләне, йомшаҡ сирәмде һыйпап-ҡапшап ҡараны.

- Бабай булып йөрөлә шул, - тине ул үкенгәндәй итеп. - Ә бит минә, улым, алтмыш йәш тә юҡ. Һаулығың булмаһа, тәнең дә ҡартая, йәшәүҙең дә йәме китә икән. - Бер аҙ шымып, тирә-яҡты хәсрәтле ҡарашы менән байҡап алғас, дауам итте. - Ҡалам, Фәрит улым, шуның өсөн дә ҡайттым да баһа. Ҡабат Стәрлегә барып тормам, ахыры... Ҡәкүк тә... - һүҙен әйтеп бөтмәне. Ирендәре ҡалтырап китте... Тамағына төйөлгән әсе төйөрҙө йотҡас, шулай тип өҫтәне:- Килерһең, улым, йәме. Ике көндән... Үлмәҫбикә инәйеңде алып килерһең...

**(Аҙағы. Башы 34-35-се һандарҙа).**

БЕР ХӘРЕФ ХИКМӘТЕ

# БАЙРАМ БАЙРАМСА БУЛАСАҠ!



Баҙыян байрам булдырмаҡсы. Барыйы бурылдай: бесән булмағас, байрам булмай. Бер Беларус та бесәндәре булманы быйыл.

Боҙ-борсағы бигерәк борсой. Бар байлығың баҡсала булғас, борсолаһың. Бөгөн бына Баҙыян бисара бар булған баҡса байлыҡтарын болғаны, баҡсаһынан биҙрәләп борсаҡ бырғатты. Был багудаһы быйыл быйтандапмы-быйтандай. Болот та болот. Башта булманы. Бесән башланғайны, башланы был да. Бесән бакуйҙа, бесәнлеккә барып та булмай, батҡаҡ. Беларус та батҡан. Барый барып бакуйҙарын болдаланы. Бурһыған бакуй бесәнгә бармай, билдәле. Бүтән берәй бесәнлек барлар Барый. Башмаҡтары бар, быҙауҙары, бүтәне. Барыһы биш баш.

Баҙыяны баҡсаһында бил бөгә. Бар белгәне баҡса. Бурылдаһа ла, былтырғы баҡса байлығы быйыл да бар. Балалары булыша. Бытылдап, бәләкәсе лә баҡсала. Бәрәңгеләре байтаҡ. Баҡсала барыһы ла бар. Бутбылдарында, баҙҙарында була байлыҡтары.

Бәрәңгеһен биҙрәләп, баҙарға ла бара. Бөгөн дә барҙы. Бәрәңге байтаҡ булһа ла, Баҙыяндыҡы баҙҙыҡы бит. Байтаҡ болло булды. Балаларына, Барыйына башмаҡтар, башлыҡтар, бирсәткәләр булдырҙы. Баҙыян былай бирсәткәне бәйләй, балаларға баҙарҙыҡы ла бара. Бигерәк бөтөрәләр бит.

Барыйы быртандап, бурылдап бер булды: баҙар бисәһе, баҡсаңды барламай, баҙарҙа буталаһың. Баҙар бирсәткәһе биргәс, бурылдауы баҫылды. Барый ҙа баш бала бит. Баҙарҙа буш бирмәйһең бит, бол була. Барый быртандаһа ла, барыр Баҙыян. Балалары бына-бына балалар баҡсаһына барыр. Бөлтәһе, быймаһы, башҡаһы - барыһы баҙарҙа. Бармай булмай. Барыйы былай бик башлы башҡорт. Бол булдыра. Бесәне борсой, бурылдауы борсолоуҙан. Бар белгәне - бесән.

Бик булмаһа, бураһын башлар. Барый бик булдыҡлы бит, буш булыу Барыйға бармай. Былтыр бетонын, барыһын барлағайны. Быйыл бураһын баҫтырыр.

Балдары ла бар. Баҡсала быжылдап-быжылдайҙар. Быйыл бал бик булмаҫ. Борсағы, башҡаһы бөтөрҙө. Безелдәүектәр бик болданманылар. Былай борҙолар. Балаларға баллы бауырһаҡҡа булды. Булғанына - бәрәкәт. Былтырҙан бер бидон бар. Баҙ буш булмаҫ. Бәрәңге, башҡа байлыҡ булыр.

Бер башмаҡтарын бартерға бирерҙәр. Бураның башына.

Бына, бесәне булһа, барыһы булыр. Борсағы бер бөтөр, бәлки. Бөтмәһә, бөттө. Башмағы ла, башҡаһы ла - баҙарға. Бесән булмаһа, башмаҡ-быҙауҙы болдалап бөтөлөр. Бер баш булһа - булды. Бәрәңге, былтырғы бесән бер башҡа буйтым булыр.

Барый Баҙыянына бик быртандамаҫҡа бойороп, бесәнгә барырға булды. Бакуйҙары бурһыһа ла, барыбер, бармай булмай. Башҡа берәй бесәнлек булыр, бәлки. Беларусы боҙолмаһын да бынау борсағы булмаһын. Башҡаһы Барыйса булыр.

Баҙыян бәлеш, бәрәмәс бешерә башланы. Берынғай бауырһаҡ баҫты. Билмән дә бөктө. Былау, бишбармаҡ та булыр. Барыйҙың бажалары - Бикбулаттар, Батырҙар, бирьяҡтан Басирҙар, Билалдар булыр байрамда. Бесән булмаһа ла, барыбер байрам байрамса булһын. Боҫо борҡоған бишбармаҡ, быуы бөрккән бәлештәр, бәрәмәстәр, билдәмәнән билмән, бәшмәк, баллы бауырһаҡтар - Баҙыян булдырҙы барыһын да.

...Бесәнле беларуста Барый болдорға боролдо. Быйылғы болғаҡта барына, булғанына - бәрәкәт. Беларустан борҡоп бесәй болдорға боҫто. Бормаһын бороп, Баҙыян болдорға барып баҫты. Барыйының бите боҙолмаған, бесәне бар бит. Баҙыяндың да битендә бәхет балҡыны. Барый бөҙрә башын бороп биҙәнгән Баҙыянға баҡты. Бисәһе бигерәк бөтмөр, булдыҡлы, баҫымсаҡ, барыһын барлап, булдырып бара, бурылдап бурһымай. Быйтанлап, бисураланып бимазаламай. Барый бесән башындағы баһырауҙарын, бағаналыҡтарын бырғатҡас, Баҙыян бесән бушатышырға ла булышты. Балалар ҙа буталанған булды. Буйтым бесән бушаттылар. Барый балауыҙҙай булды, бите бәхеттән балҡыны. Бер ыңғай Бетерәнән бәрҙе, бағры бығауҙаған. Байрамға батыр.

- Быйыл бесән бил-бауырҙан. Боҙ-борсағы булмаһа, байтаҡ булыр.

- Бигерәк бөтмөрһөң, Барый. Бынауындай бесән булғас, барына бәрәкәт. - Баҙыян баҙнатһыҙланманы, Барыйына булыша-булыша бытылданы.

- Бисәм дә бик булдыҡлы бит. - Барый ҙа булдырҙы.

- Байрам байрамса булыр. Бәлешем беләү булмаһа, бишбармаҡ беште. Бал балы бер батман.

- Баҙыяным, бәғерем, бауырым, бөйөрөм, бергенәм, бөрләтәүем...

- Барый, бытылдама, балалар бар бит.

- Балалар ҙа белһен Баҙыянымдың булдыҡлы, бергенә булыуын.

- Барый, билең биртенмәһен бесән бушатып.

- Биртенмәҫ, биртенһә, Баҙыян баллар билде.

- Бар, битең буялған, байрам башлана бит.

- Байрастар буламы?

- Байрастар Баймаҡта.

- Бар, бәлештәреңә, былауыңа баҡ, болдаланмаһын.

Бәхетле Баҙыян боландай борғаланып болдорға боролдо. Бошоноуы бөттө. Байрам байрамса буласаҡ бит! Барыйы бурылдамай! Битен буяны, билбауын быуҙы, бармағында балдағы, беләҙеге лә балҡыны. Бүләктәрен барланы. Барыһы бар. Бикбулаттар, Батырҙар, Басирҙар, Билалдар Барыйҙарға боролдо. Байрам башланды.

**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА.**
**Бөрйән районы.**

ЗАУЫҠ



# ӘСӘЙЕМ ҺАБАҠТАРЫ

* * *

Сыра кеүек тоҡанғанда
Әсәйемде иҫкә (а)лам:
"Ҡыҙған баштан һүҙ һөйләмә,
Иртәнгә ҡалдыр, балам!"
Асыуҙарым, үпкәләрем
Төн үткәнсе һүрелә,
Кисә көйгән көйөктәрем
Бөгөн көлкө күренә.
Эй, әсәйем, рәхмәт инде
Биргән кәңәшең өсөн:
Йылдар үткәс, саҡ аңланым
Ошо кәңәштең көсөн.
Ошо кәңәште тотмаһам,
Ояҡка батыр инем,
Нисә ҡабат айырылып,
Нисә ҡат ҡайтыр инем...
Нисә эште алмаштырып,
Нисә күсенер инем,
Көнсөл йәнле кешеләрҙән
Күпме үсәлер инем...
Ҡыҙған баштан һөйләмәйем,
Шыма бара тормошом.
Эй, Хоҙайым, берүк кенә
Боҙолмаһын тормозом!

* * *

Яҙғы һыуҙай, ярһыу йәшлек
Шаулап үтә лә китә,
Һәр кемде алда билдәһеҙ,
"Ҡурҡыныс" ҡартлыҡ көтә.
Беҙҙән ярҙам кәрәк саҡта
Кәрәклебеҙ үҙебеҙ,
Ярҙам кәрәк көнгә ҡалғас,
Үтерме һуң һүҙебеҙ?
Әсәйем дә ошо хаҡта
Уйлап йөрөгәндер инде:
"Ни күрһәтһәң, шуны үҙең
Күрерһең", - тигән ине.
Атайым менән әсәйем
Һуңғы көнөнә ҡәҙәр,
Һуңғы һулышына тиклем
Күрҙеләр хөрмәт, ҡәҙер.
Балаларымды рәнйетмәй,
Яҡлап, һаҡлап үҫтерәм,
Ҡартлыҡ көндә миңә улар
Терәк булырын беләм.
Йәшеренеп, ҡасып булмай,
Ҡартлыҡ ҡайҙа ла табыр,
Күрһәткәндәремде күрһәм,
Ҡартлығым булыр матур...

* * *

Үҙ туғаны яҡын һәр кешегә,
Мин туғаным менән терәкле.
...Ир туғанын нисек үҙ итергә
Һин бит, әсәй, миңә өйрәттең.
"Ирең һине хөрмәт итһен, тиһәң,
Насарлама уның туғанын,
Туған араһына инмә, балам,
Гонаһынан Хоҙай һаҡлаһын!"
Эй тырышам, әсәй, ғүмер буйы
Туғандарҙы бергә тупларға,
Йәнде ярып бирер саҡтар була,
Инер инем һыуға-уттарға.
Йән тартмаһа ла ҡан тарта, тиҙәр.
Тартһын ине шул ҡан нығыраҡ!
Тере саҡта ҡәҙерҙәрҙе белеп,
Эх, йәшәргә ине!...
Юғыраҡ...
Юғыраҡ шул беҙҙә, етмәйерәк,
Туғандарҙың ҡәҙерен белмәйбеҙ,
Яттар менән бергә күңеллерәк,
Дуҫ-иштәрҙе ситтән эҙләйбеҙ.
Бер туғандан яҡын кеше булмаҫ,
Ҡанлы көндә яҡын ҡарындаш.
Булһын ине гелән бер туғандар
Иптәш, серҙәш, ҡорҙаш, табындаш!

**Фирүзә АБДУЛЛИНА.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Минән ун биш - егерме метр аралыҡта ҡарағай ботаҡтары араһынан бер аҡ кеше шәүләһе ҡарап тора. Оҙонлоғо 2,5-3 метр булыр. Алыҫтан үҙенең дә, күҙенең дә ниндәй булғанын аңғармайым, әммә унан күҙемде ала алмай, теклэп тик торам.*



ИНТЕРНЕТТАН



# АНЕМИЯ...
## хәүефле сир

■ Корнелл университеты (АҠШ) ғалимдары раҫлауынса, дисгевзия - тәм тойоусанлыҡ боҙолоуы һөҙөмтәһендә кеше ашарға ярамаған нәмәләр ашап, организмына ҙур зыян килтерә. Ғалимдар 158 ауырлы ҡатын-ҡыҙҙан торған төркөмдә тикшеренеүҙәр үткәргән. Былдай тайпылыш уларҙың 47 процентында күҙәтелгән һәм улар йышыраҡ боҙ, крахмал, порошок, һабын, ҡағыҙ, пенопласт, аш содаһы ашаған. Тәм тойоусанлыҡ боҙолоуы, тәү сиратта, организмға тимер етешмәгәндә барлыҡҡа килә. Һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың тәм тойоусанлыҡ боҙолоу менән бергә гемоглобин кимәле түбәнәйеүе асыҡланған. Шуға ла былдай ҡатындар хәүеф төркөмөнә ҡарай, улар араһында ауырлыһы нормаға тулмаған балалар табыусылар күберәк. Ашарға ярамаған нәмәне ашарға теләү тойғоһо тимер дефициты менән бергә ҙурая. Анемия мейегә йоғонто яһай һәм кеше ғәҙәттән тыш ашарға ярамаған әйберҙәргә ынтыла башлай, әммә бынан гемоглобин кимәле күтәрелмәй. Ғалимдар иҫәпләүенсә, табиптар дисгевзияға тейешенсә иғтибар бүлергә тейеш, юғиһә, уның сәләмәтлеккә насар йоғонтоһо ҙур.

■ Падуан университеты тикшеренеүселәре асыҡлауынса, ҡатын-ҡыҙҙарҙың ярһыны ирҙәре хаҡлы ялға сыҡҡас стресс, депрессия, йоҡоһоҙлоҡ менән йышыраҡ яфалана икән. Иренең яңы статусы бигерәк тә эшләп йөрөгән ҡатындарға йоғонто яһай. "Отставкалағы ир" синдромы беренсе тапҡыр 30 йыл элек Америка ғалимы Чарльз Клиффорд Джонсон тарафынан телгә алына. 1984 йылда барлыҡҡа килгән теорияны белгестәр практикала раҫлаған. Тикшеренеүҙәрҙә 840 япон ҡатын-ҡыҙы ҡатнашҡан. Уларҙың 47 процентында ирҙәре хаҡлы ялға сыҡҡас та эмоциональ проблемалар башланған. Йыл һайын был ҡатындарҙың хәле насарая барған. Белгестәр билдәләүенсә, хаҡлы ялға сығыу - ирҙәр өсөн ауыр һынау. Уларҙың психик сәләмәтлеге һәм кәйефе насарая, был уларҙың ҡатындарына сағылыш таба. Килем кимәленең түбәнәйеүе шулай уҡ стресты көсәйтә. Етмәһә, иренең көнө буйы өйҙә булыуы ҡатындарға өҫтәмә йөк булып тойола.

■ Лейкемия - ҡан яман шеше ниндәй сәбәптән килеп сығыуына белгестәр әлегәсә яуап биргәндәре юҡ. Әгәр ҙә сиргә диагноз иртә ҡуйылһа, уны дауалап була, был саҡта иҫән ҡалыу осрағы 80 процент тәшкил итә. Ғалимдар лейкемия насар экология менән бәйле булыуы ихтимал, ти. Шулай уҡ яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡәһүә ҡулланыу ҙа был сир менән бәйле булыуы бар. Ауырлы саҡта көнөнә 2 сынаяҡ ҡәһүә эсеүселәр балаларының лейкемия менән ауырыу хәүефен арттыра. Тикшеренеүселәр буласаҡ әсәләргә ҡәһүә эсеүҙән тыйылып торорға кәңәш итә, сөнки кофеин яралғының күҙәнәктәрендә ДНК-ның үҙгәреүенә алып килә, һөҙөмтәлә, улар был сиргә тиҙерәк бирешә.

■ Иртән яҡшы кәйефтә уянып та, көн дауамында уның ҡапыл кирегә үҙгәреүе - эш аҙнаһы дауамында йоҡо туймау һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән арыуға бәйле. Һуңғы ун йыл дауамында был бәлә бер кемдә лә урап үтмәй. Кешеләр эштәге көсөргәнештән арый, һуң йоҡларға ята, иртә тора. Былдай көнелһеҙлек булмаһын өсөн көн һайын сәғәт 10-да йоҡларға ятырға кәңәш итә ғалимдар.

МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ



# "ПАРАЛЛЕЛЬ ДОНЪЯ...
## уйҙырма түгел"

**Яҡташым һәм рухи остазым Марат ағай Ишмөхәмәтовтың "Киске Өфө" гәзитендә (№ 27, 28) баҫылып сыҡҡан "Параллель донъя уйҙырма түгел" тигән мәҡәләһен уҡып сыҡҡас, үҙемдең дә баштан үткәндәрҙе яҙырға булдым, сөнки күптәр беҙҙең донъя менән бергә тағы ла әллә күпме башҡа донъяларҙың да булыуын инҡар итә, уға ышанып етмәй.**

Мин үҙем бала саҡтан беҙҙең йәнәшәләге донъяның, унда беҙҙең кеүек үк йәшәп ятҡан йән эйәләренең барлығына ышана инем. Күргәндәремде ата-әсәйемдәргә һөйләп, уларҙы ышандыра алмау ғына түгел, был турала башҡа бер кемгә лә һөйләргә ярамағанлығын кисәтеп, мине әрләүҙәре ауыҙымды йоморға мәжбүр итте. Әммә был кисәтеүҙәр минең параллель донъяны күреү һәләтемде бер нисек тә юя алманы, тик мин, әсәйем әйтмешләй, "кеше ышанмаҫлыҡты" һөйләп йөрөмәҫ, шулай ҙа күргән-ишеткәндәремде хәтер йомғағына төйнәп барыр булып киттем. Параллель донъя хаҡында ҡасандыр бер килеп бөрәү һүҙ башлар, шул ваҡытта мин дә уның һөйләгәндәрен йөпләп, һүҙ әйтермен, тип өмөт итә инем. Кешеләр ышанмаһа ла, минең менән булған хәлдәр минең фантазиям емеше түгел, ә ысынбарлыҡ булыуына иманым камил ине. Бөгөн һеҙгә бәйән итер ваҡиғаларҙа бер-нисә йыл ваҡыт үтһә лә, хәтеремдә улар әле генә булған кеүек.

Холҡом шулай: еләк, бәшмәк мәле еттеме, урман, тип "ауырый" башлайым. Ял көндәре, кис эштән һуң көн дә тиерлек урманға йүгерәм. Эргә-тирәләге урмандарҙың мин белмәгән ере юҡтыр. Бала сағымда "Урал" матасына ултыртып та, йәйәүләп тә атайым ҡасабабыҙҙың тирә-яғын бер итеп йөрөп күрһәтер, шишмә, тау-яландарҙың исемдәрен әйтеп, тарихын һөйләр, урманда йөрөгәндә нисек аҙашмай юл табырға өйрәтер ине. Атайымдың әсәһе Хәбирә өләсәйем дә урман ҡыҙырырға әүәҫ булды, мине эйәртеп, әллә ҡайһы урман-тауҙар аша йөрөтөп алып ҡайтыр ине. Урманда яңғыҙ ҡурҡмай-аҙашмай йөрөй белеүем һунынан Башҡорт дәүләт университетында белем алғанда бик тә ярҙам итте. "Иңкештәрҙең физиологик үҙенсәлектәре" исемле диплом эшенә материалдар йыйыр өсөн иңкештәрҙең төрҙәрен, уларҙың тормошон өйрәнеп, яңғыҙыма бик күп урман-тауҙар гиҙергә тура килде. Тора-бара төрлө китаптарҙан тәбиғәттең, кешелек донъяһының нескәлектәрен, шулай уҡ ата-бабаларыбыҙҙың тәбиғәткә бәйле йолалары аша урман-ҡырҙарҙа үҙ-үҙеңде нисек итеп дөрөҫ торорға кәрәклеге хаҡында өйрәнә башланым. Шуға ла яңғыҙ йөрөгәндә бер-бер нәмәгә осраһам, ҡурҡмаҫмын, тип уйлай торғайным. Ысынбарлыҡта улай булмай сыҡты.

Биш-алты йылдар элек булды был хәл. Әхирәтем менән бәшмәк йыйырға барырға булдыҡ. Шунынһы яҡшы, ул үҙе машина йөрөтә. Әйт кенә, теләгән еренә ултыртып алып та китә. Был юлы әхирәтемдең тыуған ауылы Берлек яғына барырға булдыҡ. Автодромдан алыҫ түгел юлдың уң яғында элеккке картуф баҡсаһы бар. Хәҙер унда бәрәү ҙә картуф сәсмәгәнлектән, кәртәһе туҙып, емерелеп бөткән. Шунда туҡтап, машинаны ҡалдырҙыҡ та, тауға артылдыҡ. Ул йылды йәй ҡоро булыуға ҡарамаҫтан, бәшмәк бигерәк уңғайны. Барып төшһәк, гөрөҙҙә тулып ята, йый ғына. Кеше лә күп. Йә уң яҡлап, йә һул яҡлап ололар ҙа, бала-саға ла үтеп кенә тора. Әхирәтем ҡолаҡҡа ҡатыраҡ, шуға ла мин уға алдан әйтеп ҡуям: "Ҡурҡмай ғына йөрө, һине күҙ яҙлыҡтырмай, ҡарап ҡына йөрөйөм", - тим. Әленән-әле баш ҡалҡытып, ҡайҙалығын ҡарап-ҡарап алам. Шуға ла минең менән йөрөргә ярата ул, сөнки аҙашып китеүенән ҡурҡмай, бер уйһыҙ йөрөй ала.

Бер ваҡыт эргәмдә генә бәрәү һыҙғыра башланы. Ҡалҡып тороп, тынлап-тыңлап ҡарайым, бер кем дә күренмәй, ә тауыш эргәмдә генә, әйтерһең, әкиәттәгеләй, кешегә күрендертмәй торған эшләпә кейеп, бәрәү эргәмдә баҫып тора. Тауышы ҡоштоҡона ла, кешенекенә лә оҡшамаған һымаҡ. Кемдер алҡынып-алҡынып минең менән һыҙғырып һөйләшкән кеүек, интонация менән һүҙҙәр һөйләгән һымаҡ, әҙәп-әҙәп һыҙғыра. "Тауҙың эйәһелер ул, хилаф эш ҡылмаһындар, урманға зыян килтермәһендәр, тип ҡарап йөрөйҙөр",- тип үҙемде тынысландырам. Бигерәк ҡоро бит былыл. Күпме урман яныу осраҡтары булды. Шулай, тауыш һаман да эргәмдә һыҙғыра, мин дә уйым менән генә уның менән һөйләшәм, урманының байлығына һоҡланыуымды белдерәм, уға рәхмәттәремде әйтәм. Һәр ҡырҡып алынған бәшмәктең тамырын тупраҡ менән матурлап күмеп ҡуям. Яйлап, кинәнеп йөрөйөм. Шундай рәхәт!

Бына пакеттарыбыҙ ҙа тулды! Көн дә кисләтеп бара. Ҡояш ҡаршы тау башына менеп, иртәгәгә тиклем, тип, хушлашырға әҙерләнгән. Әхирәтемдең дә пакеттары бәшмәк менән тулған.

- Ҡайттыҡмы?- ти.

- Юҡ! - мин әйтәм. - Анауында матур ғына ҡайынлыҡ күргәйнем, әйҙә, шунда барып, ҡояшты оҙатайыҡ!

- Әйҙә!

Ап-аҡ ҡына йәш ҡайындар, әйтерһең дә, йәш ҡыҙҙар! Ҡыҙғылт шәфәҡ нурында улар тағы ла матурыраҡ күренә. Шундай матур урын!

- Минең ҡайындар яратҡанды ҡайҙан белдең? - тип һорай әхирәтем.

- Белмәнем, - тим. - Мин үҙем ҡайындар яратам!

Ҡояш күренеп торған ерҙә бер йығылған ағасҡа ултырып алдыҡ. Бергә-бергә ошондай хозурлыҡ, был ерҙәрҙең муллығы өсөн Аллаһы Тәғәләгә рәхмәттәр әйтеп, бар тәбиғәткә, йәнтөйәгебеҙгә именлек, бәрәкәт теләп, доғалар уҡынып, байып барған ҡояштың матурлығына иҫебеҙ китеп һоҡланып ултырабыҙ. Тегеурман эйәһе лә беҙгә ҡушылып, һыҙғырып-һыҙғыра, үҙенсә алҡышлап нимәләр һөйләй. Әхирәтемә әйтәм: "Ишетәһеңме, урман эйәһе һыҙғырып һөйләшә", - тим. "Юҡ",- тип башын һелкә. Ярар, тип уйлап ҡуям үҙем дә, ишетмәгәнең, бәлки, яҡшыраҡтыр ҙа, ишетһәң, ҡурҡыр инең...

Урманда әнер тиҙ төшә. Ҡояштың тау артына тәгәрәп төшөүе булды, ағастар араһы ҡараңғыланды ла ҡуйҙы. Йоҡонан уянып киткәндәй, йәһәт кенә тороп, ҡайтыр юлға ыңғайланыҡ. Юлға сығып, машинаға ултырҙыҡ та, ҡайтып киттек...

...Икенсе көн тағы ла күңелем шул урманға тартыла. Әхирәтемә шылтыратҡайным, ваҡыты юҡ. Ҡустыма шылтыратам:

- Кисә Берлек юлында бер тауға бәшмәккә барғайныҡ. Бәшмәк күп.

Әйҙә, ваҡытың булһа, шунда барып киләйек әле.

- Ике сәғәт кенә ваҡытым бар. Алыҫ түгел бит, барырмын. Әҙер тор, хәҙер барып алам.

Кисәге урынға барып туҡтаныҡ. Емерек кәртә буйында солоҡло бер ҙур ҡарағай тора. Ҡорт көтөкән ҡустым шуға әүәрп тороп ҡалды, мин урманға инеп киттем. Ике сәғәттән машина эргәһендә осрашырға һөйләштек. Урманға барып ингәйнем, әкиәт донъяһына барып эләккәндәй булдым: шундай матур! Бәләкәй генә ҡарағайҙар ергә яңы ғына тыуған кеүек: шундай һылыуҙар, ҡупшылар, энәләре һутлы-йәшел, ялтырап тора. Араларындағы ер тоташ бәләкәй генә дүңгәләктәр менән тулған. Бәшмәкселәр белә, гөрөҙҙә бәшмәге кипкән япраҡ-ылөндәр дүңгәләге аҫтында йәшеренеп үҫә. Мин былдай хозурлыҡты күреп, хисләнеп киттем һәм:

- Һаумы, урман! - тип ҡысҡырып ебәрҙем.

Ҡысҡырыуым булды, урман эйәһе һыҙғырып та ебәрҙе. Тирә-яғымды ҡарайым, үҙе күренмәй. Тауышы эргәмдә генә. Мин йәш ҡарағайҙар араһындағы теге бәшмәктәрҙе йыям. Бер урында ултырып тигәндәй, пакеттарымды тултырып та алдым. Сәғәткә лә ҡарамай йөрөгәнмен, эргәмдән ҡустым үтеп китте.

- Әйҙә, апай, оҙаҡлама. Мин машина эргәһенә киттем, - тине ул.

- Хәҙер, - тинем дә, үҙем һаман бәшмәк йыйып йөрөйөм. Бәшмәк шул тиклем күп. Күпме кеше йөрөй, ә бында, яҡында ғына, бер кеше лә йөрөмәгән, аптырайым.

Ҡайтырға ла ваҡыт. Урман хужаһына рәхмәт әйтеп, уйым менән уның менән хушлашып, ҡайтыр юлға боролған ғына инем, ҡапыл артымда "гөрһ" итеп ағас ауған тауыш ишетелде. Мин тауыш сыҡҡан яҡҡа әйләнеп ҡараным. Минән ун биш - егерме метр аралыҡта ҡарағай ботаҡтары араһынан бер аҡ кеше шәүләһе ҡарап тора. Оҙонлоғо 2,5-3 метр булыр. Алыҫтан үҙенең дә, күҙенең дә ниндәй булғанын аңғармайым, әммә унан күҙемде ала алмай, теклэп тик торам. Ул-был нәмә күрһәм, ҡурҡмаҫмын, тип уйлай торған инем. Улай булмай сыҡты. Күңелемде шул саҡ аңлатып булмаҫлыҡ ҡурҡыу тойғоһо биләп алды. Аңым менән миңә бер ниндәй ҙә ҡурҡыныс янамағанлығын аңлайым, әммә ҡурҡыуымды бер нисек тә еңеп булмай, әйтерһең дә, кемдер минең тойғолар менән ситтән идара итә. Ҡысҡыра ла алмай ҡатып тик торам. Бер ваҡыт аңыма килгәндәй булдым да, үҙем дә һиҙмәҫтән, Наил! Наил! тип ҡысҡырырға тотондом. Үҙем ҡысҡырам, үҙем кеҫә телефонынан ҡустыма шылтыратам. Ул ерҙә бәйләнеш юҡ икәнен онотҡанмын. Ҡысҡырып тора инем, теге аҡ шәүлә йәшен тиҙлеге менән һул яҡҡа табан йүгерҙе. Йүгерҙе, тип әйтеп тә булмай. Бер ағас ботағы ла ҡыбырламаны, йәшен һымаҡ үтеп китте. Ул һулға китте, мин артыма ҡарай саптым. Ҡулда бәшмәк тулы ике пакет. Бер-ике баҫыуым булды, машина эргәһенә килеп тә сыҡтым. Ҡустым руль артында мине көтөп ултыра. Тиҙ генә машинаға инеп ултырҙым да: "Киттек, тиҙерәк!" - тим. Ҡустым аптырап китте: "Нимә булды?" - ти. Мин әйтәм: "Әйҙә, тиҙерәк китә һалайыҡ, юлда һөйләрмен..." Әҙерәк тыныслана төшкәс, күргәнемде һөйләп бирҙем. Аптыраманы. "Һин булһаң, шул теләһә нимә күрерһең дә йөрөрһөң инде", - тине. Ышанманы.

**Фәриҙә АЙЫТБАЕВА.**
**Бөрйән районы.**
**(Дауамы бар).**

*ИҒТИБАР!*

# ДИНИ БАЙРАМҒА САҠЫРАБЫҘ

**Мөхтәрәм милләттәштәр, диндәштәр, туғандар! Һәммәгеҙҙе Башҡортостандың изге урындарына - әүлиәләр зыяраттары, изге шишмәләр, Башҡортостандың иң күркәм мәсеттәре буйлап дини сәфәргә саҡырабыҙ.**



Иншаллаһ, Аллаһ ризалығы хаҡына ойошторолған дини байрамыбыҙға Рәсәйҙең баш мөфтөйө Шәйех-әл-Ислам Тәлғәт Тажетдиндың һәм милләттәштәребеҙҙең, диндәштәребеҙҙең саҡырыуын ихлас ҡабул итеп, бөтөн донъяға билдәле Мәүләнә Әүлиә Шәйех Солтан Мехмет хәҙрәттәренең Башҡортостанға килеүе көтөлә. Ул 15 сентябрҙән 21 сентябргә тиклем Башҡортостандың бер нисә районында мосолмандар менән осрашасаҡ. Әүлиәләребеҙгә зыярат ҡылып, мәсеттәребеҙҙә беҙҙең менән намаҙға баҫып, Аллаһ ризалығына аят-сүрәләр, илебеҙгә, еребеҙгә, халҡыбыҙға бәрәкәт килһен, милләтебеҙ иманға ҡайтһын, республикабыҙҙа, Рәсәйҙә, бөтөн донъяла тыныслыҡ һәм именлек булһын, тип доғалар уҡыясаҡ. Солтан Әүлиәнең доғалары аша шаһит булып киткән ата-бабаларыбыҙ хөрмәтенә Аллаһы Тәғәлә беҙгә Үҙенең сикһеҙ бөйөк фатихаларын бирһен, рәхмәттәрен яуҙырһын. Иман сәфәренә рәхим итегеҙ.

**Сәйәхәтебеҙ түбәндәгесә:**

**15 сентябрь**

**13:00** - билдәле Мәүләнә Әүлиә Шәйех Солтан Мехмет хәҙрәттәренең Рәсәйҙең Юғары мөфтөйө Шәйех-әл-Ислам Тәлғәт Сафа Тажетдин менән Туҡай урамындағы Үҙәк мәсеттә осрашыуы (Туҡай урамы, 50).

**13:30 - 15:00** - Үҙәк мәсеттә намаҙ, мосолмандар менән осрашыу.

**16 сентябрь**

**16:00** - суфый шағир, мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмуллаға зыярат ҡылыу (Силәбе өлкәһе Мейәс ҡалаһының мосолман зыяраты).

**17:00** - Әүештауҙа Рәсәйҙең Юғары мөфтөйө Шәйех-әл-Ислам Тәлғәт Сафа Тажетдин менән берлектә Мөхәммәт Ризуан әл-Әүеши әүлиәгә зыярат ҡылыу (Учалы районы Иҫке Байрамғол ауылы).

**20:30** - Зәйнулла Рәсүлев исемендәге мәсеттә намаҙ, мосолмандар менән осрашыу (Учалы ҡалаһы).

**17 сентябрь**

**13:00** - Урал батырыбыҙға (ғ.с) зыярат ҡылыу (Үргә Әүжән аша Исмаҡай ауылы яғына үтеп, Йәндек шишмәһе янында һулға боролорға).

**20:30** - Иҫке Собханғолдағы мәсеттә намаҙ, халыҡ менән осрашыу (Бөрйән районы).

**19 сентябрь**

**09:00** - Ғабдулла Сәиди ишанға зыярат ҡылыу (Муллаҡай ауылы), Байым ишанға зыярат (Байым ауылы Баймаҡ районы).

**11:00** - Мөжәүир хәҙрәткә зыярат ҡылыу (Манһыр ауылы Баймаҡ районы).

**14:00** - Йома намаҙы (Сибай ҡала мәсете).

**20 сентябрь**

**09:00** - Ғиләжетдин ишанға зыярат ҡылыу (Илкәнәй ауылы Көйөргәҙе районы).

**13:00** - Рәсәйҙең Юғары мөфтөйө Шәйех-әл-Ислам Тәлғәт Сафа Тажетдин менән берлектә сәхәбәләр Абдрахман ибн Зөбәйер һәм Зөбәйер ибн Зәйеткә зыярат, Сәхәбәләр мәсетендә намаҙ, халыҡ менән осрашыу (Илсеғол ауылы янындағы Нарыҫтауҙа, Миәкә районы).

**16:00** - Ярыштауҙағы Әүлиәгә зыярат ҡылыу (Дүртөйлө ауылы Дәүләкән районы)

**18:00** -Рәсәйҙең Юғары мөфтөйө Шәйех-әл-Ислам Тәлғәт Сафа Тажетдин менән берлектә Йәғәфәр ишанға зыярат ҡылыу (Собханғол ауылы янында, Ауырғазы районы).

**19:00** - Рәсәйҙең Юғары мөфтөйө Шәйех-әл-Ислам Тәлғәт Сафа Тажетдин менән берлектә Усман ауылында мәсет асыу (Ауырғазы районы).

**21 сентябрь**

**14:00** - Рәсәйҙең Юғары мөфтөйө Шәйех-әл-Ислам Тәлғәт Сафа Тажетдин менән берлектә Шаран ауылында мәсет асыу (Шаран районы).

**Бөтөн мәғлүмәттәр www.sufirb.ru сайтында урынлашҡан.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ТУҒАНДЫ ҠӘҘЕРЛӘЙЕК

Туғандарға ҡарата яҡшы мөнәсәбәт - Аллаһы Тәғәләнең ризалығына өлгәшергә булышлыҡ иткән изге ғәмәлдәрҙең береһе. Изге Ҡөрьәндә был турала: "Аллаға ғибәҙәт ҡылығыҙ, Уға һис бер нәмәне тиңдәш тотмағыҙ: ата-әсәләргә, яҡындарға, етемдәргә, ярлыларға, туғанлыҡ менән яҡын күршегә, күршелә булған дуҫыңа, юлсыға, уң ҡулдарығыҙ хужа булғандарға изгелек ҡылығыҙ! Ысынлап та, Алла тәкәббер, маҡтансыҡтарҙы яратмай", - тип әйтелә. Икенсе аятта: "Эй һеҙ, кешеләр! Һеҙҙе бер йәндән барлыҡҡа килтергән, һәм унан уның ҡатынһын бар ҡылған һәм был икеүҙән күп ирҙәрҙе һәм ҡатындарҙы тараткан Раббығыҙҙан ҡурҡығыҙ! Уның исеме менән бер-берегеҙгә ялбара торған Аллаһан һәм ҡәрҙәшлек бәйләнештәрен өҙөүҙән ҡурҡығыҙ. Ысынлап та, Алла һеҙҙең өҫтөгөҙҙән күҙәтеүсе!", - тигән иҫкәртеү бар. Бәйғәмбәребеҙ: "Аллаға һәм Ҡиәмәт көнөнә ышанған кеше үҙенең туғандарына яҡшы мөнәсәбәттә булырға тейеш", - тип нәсихәт бирә.

Нимәнән ғибәрәт һуң был изге мөнәсәбәт? Туғандарыңа ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер булыу, уларға һәр саҡ изге теләктә булып, яҡшы эштәреңдә ярҙам итеү, хәлдәрен белеү, иң мөһиме, нындай генә ауыр осраҡ булмаһын, ҡан ҡәрҙәштәрең менән ҙур бәхәскә инеп китеүҙән һаҡланып, туғанлыҡ ептәрен өҙмәү. Башҡорт халыҡ мәҡәлендә бушҡа ғына "Йән тартмаһа ла, ҡан тарта", тип әйтелмәй. Кеше тәбиғәте шулай яралған: бәхәс-низағҡа инеү өсөн уға күп кәрәкмәй, хатта яҡын туғандарың менән шундай хәл килеп сығыуы мөмкин.

Туғандарыңа яҡшы мөнәсәбәттә булыуыңа яуап итеп, уларҙан донъяуи әйберҙәр көтөү дөрөҫ түгел. Йәғни, мин һеҙгә ярҙам иттем, тип туғандарыңдың теңкәһен ашауҙан ғибәрәт ярҙамдың Аллаһы Тәғәлә алдында ла, туғандарың алдында ла бер ниндәй ҡиммәте юҡ. Шулай уҡ йәмғиәт алдында йөҙөңдө һаҡлау теләге менән күрһәтелгән ярҙамдың да (мәсәлән, бай кеше, бил һаран, тип әйтмәһендәр өсөн туғандарына өлөш сығарып тора, ти) Әхирәттәге сауабы бик аҙ булыуы, йәки бөтөнләй булмауы мөмкин. Һәр изге эштең нигеҙе - ул изге ниәт.

Бәйғәмбәребеҙҙең: "Иң ҡиммәтле саҙаҡа - ул мохтажлыҡта, йәки үҙең менән бәхәстә булған туғаныңа бирелгән саҙаҡа", - тигән һүҙҙәре бар. Бер кеше Мөхәммәт бәйғәмбәргә килә лә, ошондай һорау бирә: "Минең бер нисә туғаным бар. Мин уларға яҡшы мөғәмәләмен, ләкин улар минең хаҡымды (хоҡуҡтарымды) инҡар итә. Мин уларға яҡшы мөрәжәғәт итәм, ләкин улар киреһе менән яуап ҡайтара. Мин уларға ҡарата сабырмын, ләкин улар минең менән бәхәсләшә". Бәйғәмбәр был кешегә: "Әгәр барыһы ла һеҙ һөйләгәнсә икән, тимәк, һеҙ уларға эҫе көл ашатаһығыҙ. Аллаһ һеҙгә һәр саҡ ярҙамсы бирәсәк", - тигән. Был һүҙҙәре менән Бәйғәмбәр, изгелектең ҡәҙерен белмәйенсә, уға яманлыҡ менән яуап биреүселәр үҙ ҡылыҡтары өсөн йәһәннәм утында буласағын аңлатырға теләгән. Ә сабырлыҡ күрһәткәндәргә - Аллаһы Тәғәлә мотлаҡ ярҙамсыны бирәсәк. Иғтибар итегеҙ, хатта ошондай ауыр осраҡта ла Бәйғәмбәр туғанлыҡ ептәрен өҙөргә, дошманлашырға саҡырмаған.

Шул уҡ ваҡытта икенсе нәмәне лә оноторға ярамай. Туғандарға ҡарата мөхәббәт кешене һуҡырайтырға тейеш түгел. Бәғзеләр ҡан ҡәрҙәштәрен "үтә нығык" яратып, уларға гонаһта, насар эштә ярҙам итә башлай, шуның менән ғәҙелһеҙлек күрһәтә. "Үтә нығык" яратыу хатта кешене көфөрлөккә этәреүе лә мөмкин.

Кеше был донъяла төрлө һынауҙар үтә. Туғандар, һис шикһеҙ, ошо һынауҙарҙың иң мөһимдәренең, иң ҡатмарлыларының береһе. Кеше уларҙы "үтә нығык" яратып та, дошманлашып та Аллаһы Тәғәләнең нәфрәтен алыуы мөмкин. Шул уҡ ваҡытта Уның ризалығы ла туғанлыҡ ептәрен һаҡлауҙа һәм ҡан ҡәрҙәштәр менән яҡшы мөнәсәбәттә булыу - беҙҙең бурысыбыҙ. Ахырҙа, һәр кем Раббыбыҙ янына ҡайта һәм Уның алдында яуап тотасаҡ.

**Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ**
**әҙерләне.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

### Яуаплылыҡ

Әгәр һеҙ тупты ҡапҡаға табан алып бара алмайһығыҙ икән, команда башлығы ла була алмайһығыҙ. "Ҙур уңыш һеҙҙән яуаплылыҡты үҙ өҫтөгөҙгә алыуҙы талап итә... Һеҙөмтәлә, барлыҡ уңышлы кешеләргә хас берҙән-бер сифат - ул үҙеңә яуаплылыҡ ала белеү һәм ошоға әҙер булыу", тигән Майкл Корда тигән бер уңышлы кеше. Ысынлап та, лидер яуаплылыҡтан башҡа бөтөн нәмәнән дә баш тарта ала. Яҡшы лидерҙар бер ваҡытта ла ҡорбан менталитеты менән ҡоралланмай. Улар был тормошта кем булыуы һәм ниндәй урын биләүе өсөн ата-әсәләре лә, тормош иптәштәре лә, балалары ла, хөкүмәт тә, етәкселек тә, хеҙмәттәштәре лә түгел, ә бары тик үҙҙәре яуаплы булыуын яҡшы аңлай. Тормош ауырлыҡтары менән күҙмә-күҙ осрашып, мөмкин булғандың барыһын да эшләй, сөнки бары тик тупты ҡапҡаға алып барып еткереүҙәрен күрһәтеп кенә команданы алға алып бара аласаҡтарын яҡшы аңлай. Яуаплылыҡ тойған кешеләргә түбәндәге сифаттар хас:

**Улар эште башҡара белә.** Үҙ аллы миллионер булыусыларҙы өйрәнеп, Джорджия штаты университеты докторы Томас Стэнли уларға хас бер сифатты - физаҡәрлекте билдәләй. Бер миллионерҙан ни өсөн уның тәүлегенә 12 - 14 сәғәт эшләүе менән ҡыҙыҡһынғандар. Ул: "Миңә ябай бер нәмәне аңлау өсөн ҙур ойошмала эшләргә тура килде: беҙҙең йәмғиәттә әгәр һәр көн 8 сәғәт кенә эшләһәгеҙ, осон-оска ялғауға ғына өмөт итә алаһығыҙ... Уның ҡарауы, һигеҙ сәғәттән тыш эшләү - киләсәгегеҙгә тура-нан-тура инвестиция ул", тигән. Берәү ҙә аҙ эшләп юғары уңышҡа өлгәшә алмай.

Кеше нисек итеп "ошоно эшләргә кәрәк" тигән психологик көйләнештә тора ала? Улар үҙҙәренә эшләйбеҙ тип уйлай. Әгәр юғары уңышҡа өлгәшергә һәм артығыҙҙан эйәреүселәрҙә һәр саҡ ышаныс булдырырға теләһәгеҙ, уларҙы ошо тулҡынға көйләгеҙ. Былдай көйләнеш һеҙҙе алыҫҡа илтәсәк һәм бейеккә күтәрәсәк.

**Улар һәр саҡ кәрәк булғандан артығыраҡ эшләй.** Яуаплы кешеләр бер ваҡытта ла: "Был минең эшем түгел", - тип баш тартмай. Улар, кәрәк икән, эште ваҡытында тамамлау өсөн бөтөн нәмәне эшләргә риза. Әгәр уңышҡа өлгәшкегеҙ килһә, көн тәртибендә тәүге урынға үҙегеҙ эшләгән учреждениены йәки предприятиены ҡуйырға тейешһегеҙ.

**Камиллыҡҡа ынтылыш алға әйҙәй.** Камиллыҡҡа ынтылыш - көслө этәргес. Камиллыҡҡа эйә булырға тырышыусылар һәм ошо юҫыҡта ныҡышмал эшләүселәр һәр саҡ ҙур яуаплылыҡ тоя. Былдай кеше, үҙен тулыһынса эшкә бағышлап, һәр саҡ үҙ-үҙе менән килешеп йәшәй. Уңыш ҡаҙаныу мәсьәләһе буйынса билдәле эксперт Джим Рон: "Стресс һеҙ мөмкинлегегеҙҙән әҙерәк эшләгән ваҡытта барлыҡҡа килә", - ти. Үҙегеҙгә маҡсат итеп юғары сифатты ҡуйығыҙ - һөҙөмтәлә юғары яуаплылыҡ тойғоһо үҫешер.

**Улар хәл-торошҡа ҡарамаҫтан, һөҙөмтәгә өлгәшә.** Яуаплы кешенең айырылғыһыҙ сифаты - башлаған эшен аҙағынаса еткереү. Ричард Л. Эванс бер китабында: "Үҙенә яуаплылыҡ алған, эшен ахырынаса еткергән кешене табыуҙың хаҡы ҡиммәт. Бурыс алып, уны һөҙөмтәле, намыҫлы һәм тулыһынса атҡарып сығасағын белеүҙең баһаһы юғары", - тип яҙа. Әгәр артығыҙҙан башҡаларҙы эйәртергә теләһәгеҙ, һөҙөмтәгә өлгәшегеҙ.



## 8 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.05 "Добрый день".
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Брак по завещанию. Танцы на углях". Худ. фильм (12+).
16.15 "Время покажет".
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.45 "Хорошие руки". Криминальный сериал. 1-я и 2-я серии (16+).
23.45 "Вечерний Ургант" (16+).
00.20 Ночные новости.
00.35 "Форс-мажоры". Сериал (16+).
01.25, 03.05 "Приятели из Беверли Хиллз". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.15 "В наше время" (12+).
04.10 "Контрольная закупка".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 11.15 Новости недели (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Городок АЮЯ" (0+).**
**11.00, 17.45, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.55, 16.40, 21.25 "Выборы-2014" (16+).**
**12.00 "Королева Марго". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 00.30 Новости.**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**14.45 "Тәмле. Лучшее" (12+).**
**15.15 "Бауырһаҡ".**
**15.45 "Акбузат".**
**16.15 "Учим башкирский язык" (0+).**
**16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**16.45 "КЛИО" (6+).**
**17.30 Новости культуры.**
**18.00 "Автограф" (6+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. Прямая трансляция (6+).**
**22.00 "Дознание" (12+).**
**23.00 "Телецентр" (12+).**
**23.30 "Специальный репортаж" (16+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Еду я в деревню".**
**01.00, 04.15 "Приключения Филибера". Худ. фильм (16+).**
**02.45 Г.Шафиков. "Хадия" (12+).**
**06.15 "Орнамент".**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 9 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Хорошие руки". Сериал (16+).
14.25 "Добрый день" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Брак по завещанию. Танцы на углях". Сериал (16+).
16.15 "Время покажет".
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Хорошие руки". 3-я и 4-я серии (16+).
23.45 "Вечерний Ургант" (16+).
00.20 Ночные новости.
00.35 "Форс-мажоры". Драматический сериал (16+).
01.25, 03.05 "Ночь страха". Фильм ужасов (16+).
03.00 Новости.
03.20 "В наше время" (12+).
04.15 "Контрольная закупка".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Школа доктора Комаровского" (6+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Зеркальце".**
**11.00, 17.45, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30 Новости (на русск. яз.) (0+).**
**11.40, 16.40, 21.25 "Выборы-2014" (0+).**
**11.45 "Королева Марго". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**14.45 "Тәмле. Лучшее" (12+).**
**15.15 "Книга сказок".**
**15.45 "Сулпылар".**
**16.00 "Ғәләмәт донья".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Дорога к храму".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**18.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**18.45 "Пенелопа". Худ. фильм (12+).**
**20.20 "Правила денег" (12+).**
**20.30 "Сэнгелдэк".**
**20.45 Новоселье с "Радугой" (12+).**
**21.00 "Телецентр" (12+).**
**21.30 Новости (на русск. яз.) (16+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Баик" (0+).**
**24.00 "Еду я в деревню".**
**01.00, 05.00 "Крутой папочка". Худ. фильм (16+).**
**02.45 Х.Ибрагимов. "Зятек". Спектакль (12+).**

## 10 СЕНТЯБРЯ СРЕДА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Хорошие руки". Сериал (16+).
14.25 "Добрый день" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Брак по завещанию Танцы на углях". Сериал (16+).
16.15 "Время покажет".
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Хорошие руки". 5-я и 6-я серии (16+).
23.45 "Вечерний Ургант".
00.20 Ночные новости.
00.35 "Форс-мажоры". Драматический сериал (16+).
01.25, 03.05 "Фрида". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.50 "В наше время" (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Школа доктора Комаровского" (6+).**
**10.30, 15.45 "Гора новостей".**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 17.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30 Новости (на русск. яз.) (0+).**
**11.40 "Выборы-2014" (0+).**
**11.45 "Королева Марго". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 18.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**14.45 "Тәмле. Лучшее".**
**15.15, 16.40, 21.25 "Выборы-2014" (16+).**
**16.00 "еГорное расследование".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.45 "Здоровое решение".**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Алтын тирмә".**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Адмирал" (Владивосток). Прямая трансляция.**
**21.30 Новости (на русск. яз.) (16+).**
**22.00 "Телецентр". Главный день (12+).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2014" (6+).**
**23.30 "Автограф" (6+).**
**24.00 "Еду я в деревню".**
**01.00, 04.45 "100 футов". Худ. фильм (16+).**
**02.45 Т.Каюмов. "Наследство". Спектакль (12+).**
**04.15 "Весело живем" (12+).**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 11 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Хорошие руки". Сериал (16+).
14.25 "Добрый день".
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Брак по завещанию. Танцы на углях". Сериал (16+).
16.15 "Время покажет".
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.45 "Хорошие руки". 7-я и 8-я серии (16+).
23.45 "Вечерний Ургант" (16+).
00.20 Ночные новости.
00.35 "Форс-мажоры". Сериал (16+).
01.25, 03.05 "Я - шпион". Худ. фильм (12+).
03.00 Новости.
03.15 "В наше время" (12+).
04.10 "Контрольная закупка".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Школа доктора Комаровского" (6+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Царь горы".**
**11.00, 17.45, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 17.15, 06.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.40, 16.40, 21.25 "Выборы-2014".**
**11.45 "Королева Марго". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Тәмле. Лучшее" (12+).**
**15.15 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**15.45 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.00 "Семәр".**
**16.15 "Учим башкирский язык" (0+).**
**16.45 "Живое село" (0+).**
**17.30 Новости культуры (0+).**
**18.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (0+).**
**18.45, 04.45 "Большой солдат". Худ. фильм (12+).**
**20.30 "Сәңгелдәк".**
**20.45, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Телецентр" (12+).**
**22.00 "Аль-фатиха" (0+).**
**23.00 "Телецентр" (12+).**
**23.30 "Автограф".**
**24.00 "Еду я в деревню" (0+).**
**01.00 "Убийства в Оксфорде". Худ. фильм (16+).**
**02.45 А.Атнабаев. "Дети мои". Спектакль (12+).**

## 12 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Хорошие руки". Сериал (16+).
14.25 "Добрый день".
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Брак по завещанию. Танцы на углях". Сериал (16+).
16.15 "Время покажет".
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.45 "Голос". Музыкальный конкурс (12+).
23.55 "Вечерний Ургант".
00.50 "Айртон Сенна". Док. фильм (16+).
02.50 "Николай Еременко. Ищите женщину". Док. фильм (12+).
03.50 "В наше время" (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Школа доктора Комаровского".**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**11.00, 17.45, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 06.15 "Орнамент".**
**11.30, 13.30, 18.30, 00.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.40, 16.25, 16.40, 21.25 "Выборы-2014".**
**11.45 "Королева Марго". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.30, 22.30 Новости (12+).**
**14.45 "Тәмле" (12+).**
**15.15 "Зеркальце" (0+).**
**15.45 "Сулпылар".**
**16.00 "Байтус" (6+).**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.30, 21.30 Новости (16+).**
**16.45 "Позывной "Барс" (12+).**
**17.00 "История признания" (6+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости экономики (16+).**
**18.00 "Йома".**
**18.45 "Приключения Геркулеса в 3D". Худ. фильм (16+).**
**20.30 "Сәңгелдәк".**
**20.45, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Телецентр" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Попкорм" (12+).**
**23.30 "Народное кино" (12+).**
**24.00 "Еду я в деревню" (0+).**
**01.00 "Окись". Худ. фильм (16+).**
**02.45 Спектакль (12+).**
05.30 "Мелодии души" (12+).

## 13 СЕНТЯБРЯ СУББОТА ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00, 06.10 "Суровые километры". Худ. фильм.
06.00 Новости.
06.50 "Приходите завтра..." Худ. фильм (12+).
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Владимир Спиваков. Жизнь на кончиках пальцев" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "В наше время" (12+).
14.40 "Голос" (12+).
16.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Ледниковый период".
21.00 "Время".
21.30 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.10 "Что? Где? Когда?" (16+).
00.20 "Операция "Арго". Триллер (16+).
02.30 "Свидетель". Худ. фильм (12+).
04.25 "В наше время" (12+).
05.15 "Контрольная закупка".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!" (0+).**
**08.00 Мультфильмы.**
**08.15 "Астерикс и викинги". Анимационный фильм.**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-фатиха".**
**12.00 "Следопыт" (6+).**
**12.30 Новости (на башк. яз.) (6+).**
**12.45, 06.00 "Үткән ғүмер" (6+).**
**13.15, 06.30 "Замандаштар" (6+).**
**13.45 "Весело живем" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (0+).**
**16.00 "О времени, о творчестве, о нравах".**
**16.30 "Не ограниченные возможностями".**
**16.55 Хоккей. ВХЛ. "Торос" (Нефтекамск) - "Кубань" (Краснодар) (12+).**
**19.30 "Хазина".**
**20.00 "Башкорттар".**
**20.30 "Сәңгелдәк".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Любимое дело".**
**21.30 Новости (на русск. яз.) (12+).**
**22.00 "Живое село".**
**22.30 Новости (на башк. яз.).**
**23.00 "Дарман".**
**23.45 "Великая степь" (6+).**
**01.00 "Полное дыхание". Худ. фильм (16+).**
**03.00 М.Бурангулов. "Башкирская свадьба". Спектакль (12+).**
**05.15 "Мелодии души" (12+).**

## 14 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Принцесса на бобах". Мелодрама (12+).
06.00 Новости.
08.10 "Служу Отчизне!"
08.40 "Смешарики". "Пин-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Ирина Роднина. Женщина с характером" (12+).
13.20 "Точь-в-точь".
16.15 "Большие гонки" (12+).
17.40 "Черно-белое" (12+).
18.45 "Клуб Веселых и Находчивых". Летник кубок в Сочи (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Политика" (16+).
23.30 "Белый тигр". Военная драма (16+).
01.30 "Призрак в машине". Худ. фильм (16+).
03.15 "В наше время" (12+).
04.10 "Контрольная закупка".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.) (6+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.30 "Йома".**
**09.00 "Автограф" (6+).**
**09.30 Мультфильмы.**
**10.00 "Физ-ра" (0+).**
**10.15 "Дети-герои" (6+).**
**10.30 Новости (на русск. яз.).**
**10.45 "Бауырһаҡ" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Байтус" (6+).**
**11.30 "Гора новостей".**
**11.45 Хоккей. КХЛ. "Амур" (Хабаровск) - "Салават Юлаев" (Уфа). в Перерывах - Новости.**
**14.30 "Дарю песню" (0+).**
**16.30 "Об Отчизне, о правителях, о творцах".**
**17.00 "Историческая среда".**
**17.30 "Легенды".**
**18.00 "Орнамент".**
**18.15 "Полезные новости" (12+).**
**18.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**18.45 "Наука 102".**
**19.00 "Дорога к храму".**
**19.30 "История признания" (6+).**
**19.45 "Новоселье с "Радугой" (12+).**
**20.00 "Любимое дело" (12+).**
**20.30 "Время спорта" (12+).**
**21.00 "Деловой Башкортостан" (0+).**
**21.15 "Легенды спорта" (6+).**
**21.30 Новости недели (12+).**
**22.15 "Вечер.com".**
**23.00, 04.15 "Воздушный маршал". Худ. фильм (16+).**
**00.45 "Свидание с джазом" (16+).**
**01.45 А.Н.Островский. "Шестая жена Ивана Грозного". Спектакль (12+).**
**06.00 "Попкорм".**
**06.30 "Здоровое решение" (12+).**

ҺАЙЛАУҘАР




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Васильеву Ю. Н. в соответствии со ст.65 Кодекса РБ№380-з "О выборах"

ИВАНОВ Дмитрий Владимирович
кандидат в депутаты Совета городского округа город Уфа по избирательному округу №13
ЛДПР
ЗАСТАВИМ ВЛАСТЬ РАБОТАТЬ!
Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Иванову Д. В. в соответствии со ст.65 Кодекса РБ№380-з "О выборах"

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ЫРЫМБУР БАШҠОРТТАРЫ




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

## ИМАН - БӘХЕТ

• Үҙ-үҙен тота белмәү - кешенең иң ҙур кәмселеге. Балалары, дуҫтары, таныштары алдында ирен тәнҡитләүсе ҡатын йәки ҡатынын "аҡылға ултыртыусы" ир; үҙенең ҡул аҫтында эшләүселәргә һауалы ҡарап, тупаҫ һөйләшеүсе етәксе башҡаларҙа ниндәй тәьҫир ҡалдыра ала.

• "Рәхмәт", "зинһар өсөн" һүҙҙәрен ҡулланыуҙан тартынмағыҙ. Инсафлылыҡ, итәғәтлек яһалма булырға тейеш түгел, ысын йөрәктән сыҡһа ғына - ул ҡәҙерле.

• Үҙенән көсһөҙҙәргә йылы ҡараш, ярҙамға килергә әҙер булыу кешенең даими ғәҙәтенә әйләнергә тейеш.

• "Күп һүҙ - сүп һүҙ" тигән фәһемле әйтем бар. Самалап һөйләү - әҙәплелек билдәһе.

• Тыңлай белеү - һоҡланғыс сифат. Һөйләшкәндә кешене бүлдереү, уға фекерен әйтеп бөтөргә ирек бирмәү - тәрбиәһеҙлекте күрһәтә.

• Тыныс, аҡыллы, сабыр, тотанаҡлы кеше һәр кемдең йөрәгенә юл табыр, дуҫтары күп булыр.

• Дәһрилек - серегән ағас кеүек: уның тамырҙары ялған ерлеккә, ялған иғтиҡадҡа ҡоролған. Олоно - әҙәпһеҙлек, ботаҡтары менән япраҡтары - гонаһтар һәм боҙоҡлоҡтар йыйылмаһы, емештәре - был донъяла хурлыҡ, әхирәттә - яза өсөн сәбәп.

• Иманлы булыу - сәләмәт ағас кеүек. Тамырҙары ныҡлы, инанғанлыҡ тупрағында тармаҡланған, олоно - әҙәп, ботаҡтары һәм япраҡтары - яҡшылыҡ, яҡшы эштәр, емештәре - донъя тормошонда бәхет һәм муллыҡ сығанағы, әхирәттә - ҡотолоу.

• Серегән ағас хәлендә ҡалмаҫ өсөн, тип өйрәтә дин "йәндәрегеҙҙе һәм ғаиләләрегеҙҙе уттан һаҡлағыҙ!"

**"Әт-Тәхрим" (Харам ҡылыу) сүрәһе, 6-сы аят.**

**35-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Дидактика. Метрополитен. Рәссам. Күрән. Ғүмер. Лексика. Комод. Институт. Йәмғе. Синтаксис. Рация. Вәссәләм. Көл. Атан. Ент. Йәһәннәм. Әхмәҙиева. Ҡорот. Бикҡолов. Поэма. Күрк. Шөкәрә. Моталов. Тувалу. Нәтижә. Сержант. Гурт. Аттестат. Антон. Стакан. "Импала". Ангина. Шырт.

**Вертикаль буйынса:** Келә. Линолеум. Эркет. Туҙыҡа. Секта. Кәмә. Тире. Морж. Ғайсин. "Артек". Аргентина. Дәрес. Ватан. Маркер. Азот. Саба. Крем. Студент. Ағыш. Интермедия. Вест. Нуриев. Йәнүб. Тәнҡит. Әрйә. "Икарус". Һәнәк. Тәсмиә. Ҡаңтар. Нетто. Лион. Лирика. Маймыл. Вәхиәт.

✓ *Атаһы йылмайып ҡына улына туңдырма алырға аҡса бирә. Ә үҙе доклад яҙыуҙы дауам итә. Хәҙер инде ул шуны белә: ул үҙенең доклады темаһын "Кеше дөрөҫ булһа, картала һүрәтләнгән донъя ла дөрөҫ була" тип атаясаҡ...*



*ХОККЕЙ*

# БӨТӘ ДОНЪЯ КУБОГЫНДА...

## "Толпар"ҙар икенсе урында!

**Өфө - бөтә донъя хоккей майҙанына әйләнеп бара, тиһәк тә хата булмаҫ. Уҙған йылда баш ҡалабыҙ хоккей буйынса Бөтә донъя йәштәр чемпионатын ҡабул итте һәм барыһында ла матур тәьҫораттар ҡалдырҙы. Хоккей командалары ла, тренерҙар ҙа, көйәрмәндәр ҙә чемпионаттың юғары кимәлдә ойошторолғанлығын билдәләне. Шуға күрә Халыҡ-ара хоккей федерацияһының шайба менән хоккей буйынса йәштәр клубтары командалары араһында Бөтә Донъя Кубогын да нәҡ Өфөлә уҙғарырға ҡарар итеүенә аптырайһы түгел.**




Шулай итеп, 22 августан 30-на тиклем Өфөлә Рәсәй, АҠШ, Канада, Швеция, Чехия, Финляндия, Беларусь, Латвия һәм Австриянан иң яҡшы ун команда ҡатнашлығында йәштәр клубтары командалары араһында Бөтә Донъя Кубогына уйындар уҙҙы. "Өфө-Арена" һәм Спорт һарайына килгән меңәрләгән хоккей көйәрмәне төрлө командалар араһындағы көсөргәнешле уйындарҙы күҙәтеп, уларҙың оҫталығын сағыштырыу мөмкинлеге алды. Бер аҙна хоккей байрамы бүләк иткән был сара, ысынлап та, сағыу, ҡомарлы булды. Көйәрмәндәр бигерәк тә Өфөнөң "Толпар" хоккей командаһы ҡатнашҡан уйындарға күп килде һәм ихлас ҡараны. Тәүге уйынды "Толпар"ҙар Беларустың "Динамо-Шинник" командаһы менән уҙғарҙы һәм 0:2 иҫәбенә еңелде. Ләкин икенсе осрашыуға өфөләр етди әҙерләнде һәм Финляндияның "Эспоо блюз" командаһын 5:2 иҫәбе менән ҡыйратты. Чехияның "Пираты Хомутов" хоккейсылары ла "Толпар" егеттәренең көслө баҫымына яуап ҡайтара алманы, уйын өфөләр файҙаһына 2:0 иҫәбенә тамамланды. Ғөмүмән, Венер Сафин етәкселек иткән "Толпар"ҙар һәр уйында ла үҙҙәрен көслө һәм оҫта команда итеп танытты. Быны Канаданың "Кейп Бретон Скриминг Иглз", АҠШ-тың "Су-Сити" командалары менән булған уйындар асыҡ күрһәтте. Ике уйын да "Толпар"ҙарҙың еңеүе менән тамамланды. Беренсе осрашыуҙа өфөләр ярыштарын овертаймда 3:2, ә икенсеһендә 6:4 иҫәбе менән еңде.

Финалда иһә "Өфө-Арена" боҙонда ике Рәсәй командаһы - Өфөнөң "Толпар"ы һәм Мәскәүҙең "Спартаг"ы осрашты. Харламов Кубогының әлеге вәкилдәре әйһән "Спартак"ты өфөләр тәүге минуттан уҡ ҡаты ҡыҫымға алды һәм бер-бер артлы һөжүмдәр яһаны. Егеттәрҙең тырышлығы бушҡа булманы, иҫәпте Василий Жилов асты. Икенсе осорҙа Мәскәү ҡунаҡтары үҙҙәренең күпселектә ҡалыуҙарынан файҙаланып, иҫәпте тигеҙләне. Ләкин был "Толпар"ҙарҙы сафтан сығарманы, улар "Спартак" ҡапҡаһын "бейетеүҙе" дауам итте, тик башҡаса уңышҡа өлгәшә алманы. Владимир Тюриков егеттәре лә төп уйын ваҡытында Даниил Романов ҡапҡаһын башҡаса "аса" алманы. Өҫтәлмә уйын ваҡыты ла был уйындың еңеүсеһен асыҡламаны. Барыһын да буллит хәл итте - "Спартак" чемпион исеменә лайыҡ булды. "Толпар"ҙар баҫҡыстың икенсе урынында. Был - Донъя Кубогы өсөн абруйлы, маҡтаулы һәм баһалы һөҙөмтә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Иҫ киткес уйындарҙы, хайран ҡалырлыҡ финалды күҙәттек", тине бер хоккей көйәрмәне. Ысынлап та, был көндәрҙә Өфө хоккей менән "йәшәне" һәм "тын алды". Ә финалдағы хужалар һәм ҡунаҡтарҙың, көнсығыш һәм көнбайышның ҡапма-ҡаршылығы көйәрмәндәр хәтерендә оҙаҡ һаҡланасаҡ әле, сөнки ундағы кеүек еңеүгә булған ынтылышты бар уйындарҙа ла күреп булмай. Бер-береһенә бөтөнләй оҡшамаған, әммә берҙәй көслө ике команданы алда ла бихисап осрашыуҙар көтә. Тимәк, беҙгә матур һәм көсөргәнешле уйындар тәьмин ителгән.**

**Гөлназ САФУАНОВА.**

# И.РОМАЗАН МЕМОРИАЛЫНДА...

## өсөнсө урын

**27 августан 30 августҡа тиклем Магнитогорск ҡалаһында хоккей буйынса 23-сө тапҡыр И. Ромазан Мемориалы уҙҙы. Унда КХЛ-дың дүрт командаһы - Магнитогорскиҙың "Металлург"ы, Өфөнөң "Салауат Юлаев"ы, Новосибирскиҙың "Себер"е һәм Силәбенең "Трактор"ы ҡатнашты.**

Еңеү өсөн ҡаралған бер миллион һум өсөн алыштар ҡаты һәм көсөргәнешле булды. Юлаевсылар тәүгеләрҙән булып "Себер" менән көс һынашты һәм, ҡыҙғанысҡа күрә, 3:0 иҫәбе менән еңелде. Был осрашыуға ябай ғына ҡарамаған, команданың баш тренеры Владимир Юрзинов: "Һөжүм итеүҙә уйынды яҡшыртырға кәрәк", - тип билдәләне. Тренерҙың һүҙҙәре тәьҫир иттеме, әллә уйынсылар звеноһында бер аҙ үҙгәрештәр индереүҙәр ярҙам иттеме - "Трактор" менән алышта "Салауат Юлаев" матур һәм ҡомарлы уйын күрһәтеп, Силәбе ҡунаҡтарын 3:6 иҫәбе менән ҡыйратты.

Мемориалдың һуңғы матчында Өфө һәм Магнитогорск командалары осрашты. Төп уйын ваҡытында еңеү юлаевсыларға турнир еңеүсеһе булырға мөмкинлек бирә ине, шуға күрә ике команда ла көйәрмәндәргә киҫкен, күп һөжүм итеүҙәргә ҡоролған уйын минуттары бүләк итте. Тәүге шайбаны "Металлург" үҙ иҫәбенә яҙһа, өсөнсө осорҙа Александр Мерескин индергән гол юлаевсыларға иҫәпте тигеҙләү мөмкинлеге бирҙе. Төп ваҡытта турнир еңеүсеһе асыҡланманы һәм уйын овертаймға күсте. Өҫтәлмә уйын ваҡытында ла командаларға мәрәй килтермәне. Турнир еңеүсеһе буллит ярҙамында билдәләнде - боҙ хужалары ҡунаҡтар ҡапҡаһына бер шайба индереп, дүртенсе йыл рәттән И. Ромазан Мемориалы кубогын үҙҙәрендә ҡалдырҙы. Ә "Салауат Юлаев" дөйөм мәрәйҙәр һаны буйынса өсөнсө урын яуланы. Уйын һуңынан Өфө командаһының өлкән тренеры Василий Чижов: "Беҙҙең егеттәр һәйбәт уйын күрһәтте", - тип һығымта яһаны. КХЛ чемпионатында ла юлаевсыларҙың тренерҙарын һәм көйәрмәндәрен шатландырыр уйындар күрһәтеп, Гагарин Кубогын яулар өсөн бар көстәрен һалыр, тип ышаныбыҙ.

**Наҙгөл МАНАПОВА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БҮЛӘК АЛЫРҒА ЯРАТҺАҢ,

## бүләк бирергә лә ярат

Ашыҡ уйнаған - аҙыр, туп уйнаған - туҙыр, ҡуй көтөп, ҡарын майы ашаған - барынан да уҙыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Король дворян булырға мөмкин, әммә шәхес булмауы ла бар.

**(Эрих Фромм).**

Иртәнге ҡояшҡа һәм яҙҙарға нисек шатланыуығыҙға ҡарап, үҙ һаулыҡ торошонда билдәләргә була.

**(Генри Торо).**

Түҙемлелек -аҡылһыҙлыҡтың аҡылы, ә оятһыҙлыҡ - аҡылдың аҡылһыҙлығы.

**(Берган Эванс).**

Килешеүсәнлеккә өлгәшеү ауырҙан ауыр нәмә, сөнки үҙең тураһында тик яҡшы уйларға тигән теләк бит иң һуңынан үлә.

**(Томас Элиот).**

Бары тик мөхәббәт, һыуыш һәм үлем тураһында ғына яҡшы китап яҙып була.

**(Эрнест Хемингуэй).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ямғырлы көндә урамға сығып уйнау мөмкинлеге булмағас, Баттал исемле малай бер сарала сығыш яһарға доклад әҙерләүсе атаһы тирәһендә уралған. Улының ҡамасаулауынан тамам арыған атаһы иҫке бер журналдан Ер шары төшөрөлгән битте йыртып алып, ваҡ ҡына киҫәктәргә йыртҡылаған да, улына тотторған һәм: "Мә, улым, ошо ҡағыҙ киҫәктәренән картаны яңынан йый, шунан мин һиңә туңдырма өсөн аҡса бирермен", - тигән. Был эш хатта оло кеше өсөн дә оҙаҡҡа һуҙылыр төҫлө булғас, атай кеше улының мәҙәһыҙлауынан арындым тип уйлап, тынысланып, тағы докладын яҙырға ултырған. Әммә ун минуттан уҡ улы уның эргәһенә килеп, йөкмәтелгән бурысты үтәүе тураһында хәбәр иткән.**

**- Һин нисек шулай тиҙ генә йыя алдың был ҡағыҙ киҫәктәрен? - тип һораған атаһы улынан.**

**- Быны эшләү бер ҙә ауыр булманы, - тип яуаплаған Баттал. - Карталы ҡағыҙ битенең икенсе яғында кеше һүрәте ясалғайне. Мин ваҡ ҡағыҙ киҫәктәренән тәүҙә ана шул кеше һүрәтен йыйҙым, шулай карта һүрәте лә йыйылды. Кеше дөрөҫ булһа, картала һүрәтләнгән донъя ла дөрөҫ була...**

**Атаһы йылмайып ҡына ҡуя ла, улына туңдырма алырға аҡса бирә. Ә үҙе доклад яҙыуҙы дауам итә. Хәҙер инде ул шуны яҡшы белә: ул үҙенең докладын темаһын "Кеше дөрөҫ булһа, картала һүрәтләнгән донъя ла дөрөҫ була" тип атаясаҡ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 5 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4700
Заказ 2831